✓ *Бер һаран кеше бөтә байлығын йәшереп ҡуйған да, ғаиләһенә бер тин аҡса ла бирмәй, ти. Бер ваҡыт улы атаһының аҡса йәшергән урынын таба. Аҡсаны ҡаҙып алып, урынына ҙур таш һала. Ә аҡсаны тотоноп бөтә. Тиҙҙән атаһы аҡсаһының юҡҡа сыҡҡанын белеп, тәрән ҡайғыға кала. Ә улы, уны дәртләндерергә теләп, шулай ти: "Аҡсаны нимәгәләр тотоноу яҡшы, ә йәшереп тотоу өсөн таш та ярай".*

*(Саади).*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

17 - 23 СЕНТЯБРЬ (ҺАРЫСАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№38 (456)

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Хәләл ризыҡ ейеү...

ғибәҙәткә тиң ғәмәл



5

Сыртлановтар - Шланлыкүл ауылынан сыҡҡан данлы нәҫел



6-7

XIX быуат башҡорт өсөн юғалғанмы?

Юҡ, ул быуат вәлидиҙәрҙе үҫтереп сығарған...



8-9

Ҡортсолоҡҡа илтифат итеп...

төйәгебеҙҙе Балҡортостанға әйләндерәйек



12-13

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Мәктәптәрҙең ябылыуы, эшһеҙлек, халыҡтың күпләп ҡалаға күсенеүе ауылдарыбыҙҙың бөтөүенә алып килмәҫме? Ауылдың киләсәген нисек күҙаллайһығыҙ?

**Тимур ҠАСИМОВ, БР Президенты эргәһендәге Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһының юридик факультеты деканы:** Бөтә тарихыбыҙ һуҙымында ауыл халҡының кәмеүе һәм шуға ярашлы ҡалала йәшәүселәр һанының артыуы күҙәтелә килгән. Бөгөнгө заманда бындай "күсенеү" тағы ла йылдамыраҡ тиҙлек алды.

Республикабыҙҙа ауылда йәшәүселәр бөтә халыҡтың 40 процентын тәшкил итһә, Рәсәй буйынса был күрһәткес - 25 процент. Ауыл хужалығы өлкәһендә эшләүселәр беҙҙә - 15, Рәсәй буйынса - 10 процент. Шулай итеп, республикала ҡалалашыу (урбанизация) һәм индустриянан һуңғы иҡтисадҡа күсеү тағы ла шәберәк темп алһын өсөн мөмкинлектәр бар. Ҡалаларҙа етештереү предприятиелары һанының артыуы ауыл кешеләренең ултыраҡ урындарын ташлап китеүенә булышлыҡ итә, ә мегаполистарҙа халыҡ һанының артыуы хеҙмәттәр күрһәтеү өлкәһендә эшләүселәр өлөшөн арттыра. Шуға күрә мин бында бер ниндәй проблема йәки хәүеф тә күрмәйем. Нимә генә тиһәң дә, бөгөнгө хәлендә ауыл бөтөүгә табан бара һәм был тәбиғи процесс: ул бөтә үҫешкән илдәр өсөн дә хас күренеш. Мәҫәлән, Американы ғына алып ҡарайыҡ: унда фермерҙар дөйөм халыҡтың ни бары 5 кенә процентын тәшкил итә, ләкин улар бөтә илде аҫырай һәм хатта аҙыҡ-түлекте сит илдәргә лә сығара. Беҙҙә иһә ауыл хужалығында етештереүсәнлек бик түбән, йәштәр өсөн ылыҡтырғыс түгел, шуға ла улар нисек тә булһа ҡалаға китеү яғын ҡарай. Өҫтәүенә, ҡалала улар эшкә урынлашып, яҡшы ғына хеҙмәт хаҡы ала башлай. Бында улар шулай уҡ һөнәр оҫталыҡтарын камиллаштырырға ла, эштән һуң уҡырға йәки буш ваҡыттарын мауыҡтырғыс ял урындарында үткәреү мөмкинлегенә эйә. Әкренләп йәштәр ҡала кешеһенә әүерелә һәм, үкенескә ҡаршы, туған телендә һөйләшеүҙән туҡтай, халҡының тарихын, мәҙәниәтен һәм тамырҙарын онота башлай. Айырыуса уларҙы торлаҡ мәсьәләһе борсой, ҡайһыларының эш таба алмай йөрөүе борсоуға һала. Был яҡтан, әлбиттә, ҡалалашыуҙың да еңел түгеллеге асыҡлана. Шуға күрә мин килеп тыуған мәсьәләне хәл итеүҙе ауылдың инфраструктураһын үҫтереүҙә күрәм: мәктәптәр, больница, амбулаториялар, мәҙәниәт йорттары, спорт залдары күберәк төҙөлһөн ине ауылдарҙа. Ә шулай ҙа дөйөм рәүештә барған ҡалалашыу процесына кире юл юҡтыр, тигән уйҙа ҡалам.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ЯҢЫ РУБРИКА: "ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!"

# СИТТӘ ЙӨРӨГӘНСЕ...

## ҡул аҫтындағынан файҙа күр



**Аҡса тормошта төп урынды биләмәй, тип, күпме генә ышандырырға тырышмаһындар, унһыҙ йәшәү мөмкин түгеллеген барыһы ла яҡшы аңлай. Кеше һәр ваҡыт етеш йәшәргә ынтыла һәм нәҡ ошо ынтылыш беҙҙе аҡса табыуҙың төрлө юлдарын эҙләргә, һис юғы, эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнергә мәжбүр итә. Тик эшҡыуар исемен йөрөтөү үҙ эсенә ҙур яуаплылыҡ, көсөргәнешлек, хәүеф-хәтәрҙе алыуын күптәр аңлай, һәм был тармаҡ нисек кенә рекламаланмаһын, бар донъяһын онотоп был өйөрмәгә инеп китергә теләүселәр һаны артыҡ күп түгел. Уңышлы эшҡыуар булыуҙың тағы ла бер шарты - ирекле аҡсаның, йәғни башланғыс капиталдың булыуы ла мөһим икәнлеген күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Ә башланғыс капиталға эйә булмаған, йәки эшҡыуарлыҡ "ҡамытын" кейергә теләмәгәндәр нисек аҡса эшләй һуң? Берәүҙәр ҡул ҡаушырып, "ғәҙелһеҙ" донъяны әрләп ултырыуҙы хуп күрһә, икенселәр яратҡан шөғөлөнән, тәбиғәт биргән байлыҡтан, ғөмүмән, үҙҙәренең эшһөйәрлеге, етеҙлеге, зирәклеге ярҙамында аҡса эшләү мөмкинлеге таба. Яңы рубрикабыҙҙа нәҡ шундай кешеләр тәжрибәһе хаҡында һөйләйәсәкбеҙ. Шулай уҡ һеҙ ҙә, хөрмәтле гәзит уҡыусыларыбыҙ, эргә-тирәгеҙҙәге ошондай ҡул аҫтындағыһын аҡсаға әйләндерә белгән унған таныштарығыҙ, туғандарығыҙ, дуҫтарығыҙ хаҡында яҙып ебәрегеҙ. Тәүге һүҙҙе Әбйәлил районынан Гөлсирә СОЛТАНОВАға бирәбеҙ.**

- Бөгөн бөтә йәмғиәт тарафынан эшҡыуарлыҡ күккә күтәрелә, көн дә гәзит-журналдар, телевидение һәм радио был тармаҡтың ниндәй уңышлы булыуы һәм кешегә ҙур файҙа килтереү мөмкинлеге хаҡында белдереп кенә тора. Шулай уҡ дәүләт тарафынан күрһәтелгән ярҙамдың да тос булыуы эшҡыуар булып китергә өҫтәмә стимул бирә төҫлө. Тимәк, беҙгә эшҡыуарлыҡҡа тотонорға бер нәмә лә ҡамасауламай кеүек. Ләкин төпкәрәк төшөп ҡарайыҡ әле. Эшҡыуар булыу, тимәк, үҙ өҫтөңә өҫтәмә һалымдар, йырып сыҡҡыһыҙ отчеттар алыу, тигән һүҙ. Шуға күрә беҙ "еңелерәк" юлдан атлауҙы хуп күрәбеҙ.

Мәҫәлән, беҙ Магнитогорск ҡалаһына алып барып, йәйен - емеш-еләк, көҙөн бәрәңге-бәшмәк һатабыҙ. Урман-ялан тулып үҫкән шифалы үләндәрҙе йыйып алып барһаң да, үҙҙәренең һаулығын ныҡ ҡайғыртҡан ҡала кешеләре "һә" тигәнсе алып бөтә. Бер көн ҡыҙыҡ өсөн ҡомалаҡ алып барҙым. Тәүҙә иҫтәре китмәне, берене ҡыҙыҡһынып һатып алғайны, сират булып китте хатта. Бына шулай, тик торғанда 500 һум аҡса эшләнем. Ошондай юл менән, миҙгеленә ҡарап, 50-шәр меңләп аҡса эшләргә була. Мәҫәлән, быйыл күршем еләк һатыуҙан эшләгән аҡсаһына өйөнә тулыһынса ремонт эшләне. Ғөмүмән, әҙме-күпме аҡса эшләү мөмкинлеге һәр саҡ бар, тик ялҡаулыҡты ғына еңергә кәрәк. Балаларға ла, тәмле ашар, матур кейенер өсөн ҡыбырларға, тырышырға кәрәк, тип өйрәтәм. Шулай уҡ мул табыш артынан ҡыуып, сит-ят тарафтарҙа ҡағылып-һуғылып йөрөгәнсе, тыуған тупраҡ биргән байлыҡты дөрөҫ ҡуллана белергә өйрәнеү яҡшыраҡтыр, тип уйлайым.

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА яҙып алды.**

✓ **Нисә бала уҡыһа ла - берәүме, унаумы - мәктәптә һаҡларға кәрәк, сөнки быйыл берәү булһа, киләһе йыл, ихтимал, ун бала уҡырға килер - тормош бит, уға оптимистик ҡараштa булайыҡ.**



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Мәктәптәрҙең ябылыуы, әшһеҙлек, халыҡтың күпләп ҡалаға күсенеүе ауылдарыбыҙҙың бөтөүенә алып килмәсме? Ауылдың киләсәген нисек күҙаллайһығыҙ?

(Башы 1-се биттә).

*Марат ИШЕМҒОЛОВ, Ауырғазы район хакимиәте башлығы:* Күңел менән нисек кенә ҡабул итеү ауыр булмаһын, ахыр сиктә барыбер танырға мәжбүрбеҙ: ауыл ерендә йәшәүселәр һаны артабанғы йылдарҙа ныҡ кәмейәсәк. Теләйбеҙме, юҡмы - беҙ ауылда йәшәү формаһынан яйлап ҡотолорға мәжбүр буласаҡбыҙ. Сәнәғәт үҙ нәүбәтендә барыбер урбанизация процесын тиҙләтеүгә булышлыҡ итәсәк. Икенсе мәсьәлә: ауылдарҙы нисек һаҡларға һуң? Улар ниндәй булырға тейеш: ҙурмы, бәләкәйме? Беҙҙең Ауырғазы районында 142 ауыл иҫәпләнә, шуларҙың 33-ө үткән быуаттың 20-се йылдарында яңы колхоздар ойошоу нигеҙендә барлыҡҡа килгән. Ана шул яһалма рәүештә барлыҡҡа килгән ауылдар әлеге көндә таралып, юҡҡа сыға башланы. Тимәк, кешеләрҙең үҙ-ара гармониялы мөнәсәбәттәре нигеҙендә барлыҡҡа килгән тамырлы ауылдарҙың ғына киләсәге барлығын аңлата был хәл. Шулай итеп, нисек кенә үкенесле булмаһын, барлыҡ ауылдарҙы ла һаҡлап ҡалыу мөмкин булмаясаҡ. Шул уҡ ваҡытта ауыл кешеләренең ҡалаларға китеп бөтөүен теләмәнәк, ашығыс саралар күрергә бурыслыбыҙ. Кешене социаль стандарттарға яҡынайтырға кәрәк. Биологик индивид булараҡ, һәр бер кешенең, һәр бер урында йәшәгән кешеләр кеүек үк, социаль шарттарға, йәшәү унайлыҡтарына хоҡуғы бар. Ә бөгөнгө ауыл кешеһе ана шундай социаль стандарттарҙан мәхрүм. Кәрәк ваҡытта дауаханаға, кәрәк ваҡытта аптекаға, кәрәк ваҡытта парикмахерға йә булмаһа төрлө тауарҙар һатылған магазиндарға бара алмай. Кәрәк икән, ауыл кешеһе туфли кейеп, урамдағы асфальттан йөрөргә тейеш һ.б. Шулай булғас, беҙгә ауылдарыбыҙҙы һаҡлап ҡалыр өсөн уларҙы бергә ҡушып, социаль шарттар тыуҙырыу мөһим роль уйнаясаҡ. Социаль стандарттарҙы беҙ һәр 10-20 йортло ауылдарҙа тәҙеп бөтөрә алмаясаҡбыҙ, был ҡимматҡа лә төшәсәк. Ауылдарҙы ҙурайтыуҙың ундағы мәктәптәрҙе һаҡлап ҡалыу өсөн дә мөһим икәнлеген онотторға ярамай, сөнки бөгөн бик күп мәктәптәр балалар һанының аҙ булыуы арҡаһында ябыла йәки статусы үҙгәртелә. Шул уҡ ваҡытта ауылдар унда йәшәгән кешеләр бер-берһен белмәслек хәлгә еткәнсе артыҡ ҙурайырға, ҡала рәүешен алырға тейеш түгелдер, тип иҫәпләйем.

*Рауил БИКБАЕВ, Башҡортостандың халыҡ шағиры, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты:* Ауыл килемле булыуҙан туҡтаны һәм ахырғы көндәрен йәшәй тигән хата фекерҙе йыш ишетергә тура килә. Көн һайын өҫтәлебеҙҙә күргән хуш еҫле икмәк, ит, сифатлы һөт - былар күбеһенсә ауыл халҡының хеҙмәт емеше түгелме? Яңыраҡ мин Шишмә районында, ә йәй тыуған яғым Ырымбур өлкәһендә булғайным. Быны тигән йорттар һалып, умарта тотоп, мал аҫырап йәшәүсе хәлле генә фермерҙарҙы осраттым. Ауылдар ҙа, маҡталған мегаполистар ҙа тап улар арҡаһында йәшәп килә әлегә. Һәм, ғөмүмән, үҫешкән илдәрҙең бөтә иктисады ана шул ауыл хужалығынан башланып киткән дә инде. Нефттең бер заман бөтөүе лә ихтимал, ә ер, аграр закондарҙы ҡулланып эшләгәндә, даими рәүештә яңыра барасаҡ һәм йылдан-йыл мул уңыш бирәсәк.

Әле ауылдар бик ауыр хәлдә. Элекке колхоз төҙөлөшө емерелде, ә халыҡ үткән быуаттың 30-сы йылдарынан алып бергәләшеп йәшәргә һәм эшләргә күнеккәйне. Яңы шарттарға ҡыйынлыҡ менән күсәбеҙ. Күптәр эш юҡлыҡҡа зарлана. Быларҙы, мин уйлайым, ялҡауҙар һәм әрәмтамаҡтар әйтә, ундайҙар совет осоронда ла етерлек ине. Төпкөлдә аҡса эшләү мөмкинлеге бик күп, тик күберәк үҙ аллылыҡ, әүҙемлек күрһәтергә кәрәк. Тағы бер ауыртҡан тема мәғариф учреждениеларын оптималләштереү тип атала. Мәктәп - уҡыу, белем туплаған урын ғына түгел, мәҙәниәт үҙәге лә ул. Ауылда мәктәп ябыла икән, ауылдың киләсәгенә лә юл ябыла. Мәктәп юҡ икән - ауыл да юҡ.

Әлеге ваҡытта Рәсәйҙә йыл һайын тиҫтәләгән мең ауылдар юҡҡа сыға - хас та һуғыш ваҡытындағы һымаҡ. Был бик ныҡ ҡайғыға һала. Мин барыбер, йәш быуын үҫеп етер, мәсьәләне үҙ ҡулына алыр, тип өмөтләнәм. Ауылдарһыҙ ил көн күрә алмаясаҡ.

*Жәлил МӨХӘМӘТЙӘНОВ, Архангел районы Арх-Латыш ауылы хакимиәте башлығы:* Урбанизация йоғонтоһонан ҡасып булмай, әлбиттә, ул тәбиғи процесс, ләкин ауылдар йәшәргә тейеш. Улар һаҡланып ҡалһын өсөн иң тәүҙә төрлө дәрәжәләге етәкселәрҙең ауылға йөҙ менән боролоуы төп шарт, минеңсә. Уларҙың да бит күпселеге шул уҡ ауылдан сыҡҡан кешеләр, әммә китеп, ҙур етәкселәр булып алалар ҙа... ауылдарын "танымай" башлайҙар. Шул уҡ юлдар мәсьәләһе үҙәккә үтә. Ауыл халҡының да бит ҡала кешеләре кеүек үк яҡшы, унайлы тормошҡа хаҡы бар. Ауылда йәшәү өсөн елкә кәрәк, сөнки бында киске сәғәт 5-6- нан һуң өйгә ҡайтып, диванда телевизор ҡарап ятып булмай. Өйҙәге хужалыҡ эштәре: мал ҡарау, утын, бесән йүнләү, һыу ташыу - икеләтә эш башҡарырға кәрәк. Шуға күрә тормошто бер аҙ еңеләйтеү өсөн ауылдарҙы социаль-мәҙәни йәһәттән үҫтереү, ауыл кешеһенә түбән процентлы ссуда биреү, субсидия бүлеү кеүек мәсьәләләрҙе ҡайғыртырға ине. Ауылда мал тотмайынса йәшәп булмауы һәр кемгә билдәле. Шәхси хужалыҡтарҙа етештерелгән ит, һөт, йәшелсә һ.б. аҙыҡ-түлекте халыҡтан һатып алыу тейешлесә, етештереүсе өсөн бер аҙ файҙаһы булырлыҡ шарттарҙа ойошторолһон ине. Юғиһә, ауыл кешеләренең ыҙалап аҫраған мал-тыуарын ситтән килеп, арзан ғына хаҡҡа алып китәләр.

Ауыл тормошона йәм һәм йән биреүсе тағы бер мөһим мәсьәлә - ул мәктәп. Нисә бала уҡыһа ла - берәүме, унаумы - мәктәптә һаҡларға кәрәк, сөнки быйыл берәү булһа, киләһе йыл, ихтимал, ун бала уҡырға килер - тормош бит, уға оптимистик ҡараштa булайыҡ. Элек-электән беҙ уҡытыусы абруйына өйрәнгәнбеҙ. Шуға күрә, бигүк унышлы сағыштырыу булмаһа ла, уҡытыусыһыҙ ауылды көтөүсеһеҙ ҡалған өйөр менән сағыштырғым килә.

Етәкселәр килеп-китеп торор, сәйәсәт тә шуға ярашлы үҙгәреп тороусан булыр. Бөгөнгө менән генә йәшәмәйек, көн күргән төйәгебеҙ - изге ватаныбыҙ башланған, кендегебеҙҙе киҫкән еребеҙҙе - ауылдарҙы һаҡлайыҡ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА**
**яҙып алды.**

КЕМ АЛЫҠ!

# БҮЛӘККӘ - "ДИНИ КАЛЕНДАРЬ"



**Мөхтәрәм милләттәшебеҙ! Бына тағы һине лә, баҫмабыҙҙы ла, ошо баҫманы ижад итеүселәрҙе лә һынау мәле етте. Гәзитебеҙҙе уҡыусы милләттәш туған телдәге баҫманы ниндәй дәрәжәлә һанлай һәм баһалай? Уның үҙ милләтенә, туған теленә ҡарата аң, рух, ихтирамы ниндәй кимәлдә? Баҫмабыҙҙағы һүҙ ҡеүәһе, фекер үткерлеге уның күңелен арбай, сәмен һәм гәмен уята алырлыҡмы?**

Бына шулай, **2012 йылдың беренсе яртыһына гәзитебеҙгә яҙылыу башланыуын иғлан итеп**, уҡыусыбыҙ һәм үҙебеҙ алдына ошо һорауҙарҙы ҡуябыҙ. Һәр ваҡыттағыса, уҡыусыны ылыҡтырыр вәғәҙәләребеҙ ҙә бар: күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, ниндәйҙер ауырлыҡтарға юлыҡҡанда уларҙы еңер сара, борсолоуҙар мәлендә - йән тыныслығы, күңел төшөнкөлөгө булғанда - рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле баҫма алаҫаҡһығыҙ ҡулдарығыҙға.

**Бынан тыш**, әлбиттә, оптимистар өсөн **бүләктәр ҙә** булмай ҡалмаясаҡ. Оптимистар өсөн, тибеҙ, сөнки гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларҙың "Мин барыбер бүләкһеҙ ҡалмайым!" тигән кешеләрҙән генә килеүен яҡшы беләбеҙ. "Киске Өфө"нө уҡыусыларҙың барыһының да оптимист булыуын теләйбеҙ, уларҙың ошондай сифаттарын уятыуҙы маҡсат итеп ҡуябыҙ. **Ә сентябрь айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 30 кешегә 2012 йыл өсөн "Дини календарь" ебәрәбеҙ.**

**Әйткәндәй...** 2012 йылдың тәүге яртыһы өсөн июль-августа уҡ яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәргә бүләктәр вәғәҙә иткәйнек. Бүләктәребеҙ: башҡортса **"Ҡөрьән-Кәрим"**- Баймаҡ районы Шүлкә ауылынан **Юламан Раев**, Ишембай районы Һайран ауылынан **Ғәлимйән Яҡупов**, Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылынан **Сәләх Әхмәтов**, Бәләбәй ҡалаһынан **Мәбрүрә Йәнбухтина**, 2012 йыл өсөн **"Дини календарь"** - Салауат районы Малаяҙ ауылынан **Хәбирә Сабирова**, Әбйәлил районы Дәүләт ауылынан **Х. Хисмәтуллина**, Баймаҡ районы Ҡуянтау ауылынан **Мәғүзә Мырҙабулатова**, Архангел районы Аҙау ауылынан **Гөлфинә Ғәлина**, **Люциә Сөләймәнова**, **Хәмдиә Ғәлина**, Күгәрсен районы Мәксүт ауылынан **Юлиә Вафина**, Баймаҡ ҡалаһынан **Н. Ильясова**, Өфө ҡалаһынан **Фәнүзә Заһиҙуллина**, Ғафури районы Сәйетбаба ауылынан **Вилдан Шәрипов**, Ҡырмыҫҡалы районы Ҡырмыҫҡалы ауылынан **А. Ҡусҡарова**, Балаҡатай районы Айҙаҡай ауылынан **С. Мөхәмәтшина** өлөшөнә сыҡты.

**Шулай итеп**, 2012 йылдың тәүге яртыһына гәзитебеҙҙең 50665 индекслыһына **348 һум 24 тингә**, 50673 индекслыһына (юридик шәхестәр өсөн) **378 һум 24 тингә** яҙыла алаһығыҙ.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓"Берҙәм Рәсәй" сәйәси партияһының булып үткән республика конференцияһында Халыҡ программаһы формалашыуына йомғаҡ яһалды. Билдәләнеүенсә, Халыҡ программаһына беҙҙең республиканан 312 тәкдим индерелгән. Уларҙың 43 проценты - социаль сәйәсәткә, 20 проценты - иҡтисад үҫешенә, 12 проценты - дәүләт, бизнес һәм йәмғиәттең үҙ-ара килешеп эшләүенә, 10 проценты - йәшәү сифатына, 7 проценты - төбәк үҫешенә, 3 проценты - сәйәси системаның эшләүенә, 2 проценты милләт-ара мөнәсәбәттәргә ҡағыла.

✓Мәскәүҙә 23-24 сентябрҙә үтәсәк "Берҙәм Рәсәй" партияһының XII съезында Башҡортостан төбәк бүлексәһенән 16 делегат ҡатнашасаҡ. Делегация составы Өфөлә үткән берҙәм рәсәйлеләрҙең республика конференцияһында билдәләнде. Делегация составына йәнә съезд ҡунаҡтары сифатында сайлап алынған 30 кеше -Дөйөм Рәсәй халыҡ фронты вәкилдәре, праймеризда ҡатнашыусылар ҙа инәсәк.

✓Краснодар крайында "Сочи-2011" X Халыҡ-ара инвестиция форумы асылды. Сарала Башҡортостандың республика Президенты етәкселегендәге рәсми делегацияһы ла ҡатнаша. Форумда Башҡортостан Республикаһының 2020 йылға тиклем үҫеше, инвестицион проекттар һәм төбәк инновациялары күрһәтелгән күргәҙмә экспозицияһы ҡуйылды. Шулай уҡ унда республика предприятиелары үҙҙәренең продукцияһы, инновацион ҡаҙаныштары менән таныштырасаҡ.

✓Йыл башынан Рәсәйҙәге банктар иҫәбе 19-ға кәмегән. 2011 йылдың 1 ғинуарына илдә 1012 банк иҫәпләнһә, хәҙер уларҙың һаны 993 тәшкил итә. Филиалдар һаны 102 берәмеккә - 2926-нан 2824-кә кәмегән. Йыл эсендә - 2010 йылдың 1 сентябренән 2011 йылдың 1 сентябренә тиклем - илдә банктар иҫәбе 43-кә кәмегән. Башҡортостанда бөгөнгө көндә 78 кредит ойошмаһы эшләй. Йыл башында уларҙың һаны 77 ине.

✓Уҡытыусыларҙың эш хаҡы 30 процентҡа артасаҡ. Был хаҡта "Берҙәм Рәсәй"ҙең Башҡортостан төбәк бүлексәһенең сәйәси клубы ултырышында Дәүләт Думаһы депутаты, "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Мәғарифты модернизациялау" проекты координаторы Николай Булаев хәбәр итте. Яңыса эш хаҡын педагогтар октябрҙә аласаҡ, тип күҙаллана.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ИНҺӘҢ - ИЛ,

## сыҡһаң - яу...

**Был әйтемдең бер варианты итеп "Айырылғанды - айыу ашар, бүленгәнде - бүре ашар" әйтемен килтерергә булыр ине. Ысынлап та, илеңдән, ғаиләңдән, милләтеңдән, дуҫтарыңдан айырылып, бүленеп, яңғыҙ ҡалһаң, айыу-бүрегә тамаҡ булаһың инде ул. Был хәл "Берҙәмлектә - көс" әйтеменең тап киреһен аңлата. Әммә был әйтемдәр "Инһәң - ил, сыҡһаң - яу" тигәндең бер сифатын, бер мәғәнәһен генә аса төҫлө, сөнки тәүгеһенең мәғәнәһе тағы ла тәрәнерәк тойола. Миңә ҡалһа, унда халҡыбыҙҙың барлыҡҡа килеү тарихы ла, берҙәй үк милләтте, кешелекте һаҡлап-яҡлап ҡалырлыҡ милли идея булырлыҡ фекер ҙә бар.**

Бынан алты йыл элек "Киске Өфө" гәзите редакцияһы коллективы менән Бөрйән районында урынлашҡан Башҡортостан дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығында булғанда унда эшләүсе хеҙмәткәрҙәр үҙҙәренең ҡыҙыҡлы бер күҙәтеүе хаҡында бәйән иткәйне. Был хаҡта беҙ гәзиттә бер тапҡыр яҙып сыҡҡайныҡ инде, был юлы ул хәл тураһында икенсе маҡсатта ҡабатлап һүҙ алып барабыҙ.

Хеҙмәткәрҙәр һөйләүенсә, ҡурсаулыҡ территорияһынан ситтә йөрөүсе боландар, һунарсылар ҡамауға алып, ауларға итһә, бар көсөнә сабып-йүгереп, ҡурсаулыҡ территорияһына ҡасып инәләр икән. Әлбиттә, ҡурсаулыҡтың сик һыҙығында бер ниндәй ҙә билдә йә кәртә юҡ, ҡурсаулыҡ менән уның янындағы территория бер яғы менән дә айырылмай: ике яҡта ла бер үк төрлө ағастар, үләндәр үҫкән урман, йылғалар, үҙәндәр, тауҙар, ҡаялар. Әммә йылдар буйына ошолай ҡурсаулыҡ эсенә һыйыныу юлы менән "ике аяҡлы эт-ҡоштан" ҡотолоп ҡалыусы малҡайҙарҙың ҡанына ошо хәл инстинкт рәүешендә һеңешеп бөткән икән. Тағы ла шуныһы ҡыҙыҡлы: ҡурсаулыҡ территорияһына аяҡ баҫҡандан һуң боландар ҡапыл эркелешеп сабыуынан туҡтап, кире боролоп килеп, үҙҙәрен баҫтырып килеүсе һунарсыларҙы үсекләгәндәй: "Йә, шәп булғасығыҙ атығыҙ беҙгә, ә-ә-ә, хоҡуғығыҙ юҡ шул һеҙҙең беҙгә атырға",- тигән һымаҡ тегеләргә текәлеп, баштарын һелкәләр икән. Ғәжәп, малдың малы яҡланғанлығын аңлай һәм үҙенең ошо хоҡуҡи хәлен ҡыланып күрһәтә белә. Ҡурсаулыҡ эсендә урынлашҡан ауылдарҙа йәшәүселәр ҙә айыуҙарҙың көтөүҙән ҡайтып килеүсе үгеҙ-һыйырҙарға эйәреп килеп, ауыл ситенә еткәс, тороп ҡалыуҙары хаҡында мәҙәк итеп һөйләне. Улар һөйләүенсә, хатта көтөүҙәге малдар ҙа был хәлгә өйрәнеп бөткән, йәғни бер төрлө йән эйәләренең һаҡланыу инстинкты икенселәренә лә йоғонто яһай. Быһа инһә мөғжизә!

Былар барыһы ла кешеләрҙең тәбиғәтте һәм ундағы тереклекте һаҡлау маҡсатында уйлап сығарған закондарҙың хайуандар һәм йәнлектәр тормошонда сағылыуын, инстинкт кимәлендә нисек нығыныуын күрһәтә. Ни өсөн ҡурсаулыҡ территорияһында боландар һәм айыуҙар үҙҙәрен иркен тота ала? Ни өсөн һәр тере йән өсөн тәбиғи булған ҡурҡыу тойғоһо тап ошо территорияла ҡапыл юҡҡа сыға һуң? Сөнки был территорияла, икенсе төрлө итеп әйткәндә, ошо ил эсендә уларҙы закон һаҡлай. Шул уҡ ваҡытта был илдең ситенә бер аҙым аяҡ баҫтыңмы, ҡаҡ маңлайыңа йәҙрә килеп бәрелеүен көт тә тор. Йәҙрәнең үҙ ҡануны - ул көбәктән сығып ысҡындымы, бер ниндәй ҡанундар ҙа закон һыҙығынан ситкә баҫканды һаҡлай алмай. Сөнки боландың маңлайына "Был ҡурсаулыҡ малы, уны ауларға ярамай" тип яҙылмаған. Ҡыҫҡаһы, "Инһәң - ил, сыҡһаң - яу" әйтеменең төбөнә йәшерелгән бер мәғәнә тап ошондайҙар тип уйланыла.

Хайуандарҙа һәм йәнлектәрҙә күҙәтелгән был хәлде кешеләргә ҡарата ҡулланғанда уны "ил тойғоһо" тип атарға мөмкин булыр ине. Ысынлап та, ил тойғоһо кешенең күңелендә үҙ иленә, халҡына, уның тарихына, диненә, теленә, еренә ҡарата ғорурлыҡ тойғоһо уята, уны яҡлаулы һәм һаҡлаулы итә, ижадҡа, хеҙмәткә илһамландыра, башҡалар араһында тиң булып, лайыҡлы йәшәргә өндәй. Үҙ ерендә йәшәүсе халыҡтың, ундағы граждандарҙың ирекле үҫеше, хоҡуҡтарының тейеләгеһеҙ шарттарҙа һаҡланыуы өсөн кәрәк ундай закондар. Төптән уйлап ҡарағанда, кешелек өсөн ил, милләт өсөн дәүләт зарурлығы ла тап ошоға бәйле.

Беҙ йыш ҡына тәңкитләргә яратҡан Америка Ҡушма Штаттарында һәр штаттың, федераль кимәлгә ҡараған закондарынан тыш, тик үҙҙәренә генә ҡағылған закондары бар. Шуға күрәлерме, бер штат территорияһында "эш боҙған" американлы, яҙанан ҡотолорға теләһә, бындай хәл енәйәт тип һаналмаған штатҡа һыпырта. Хәҙерге резервацияла йәшәүсе Америка аҫабаларының хоҡуҡтары хәҙерге Рәсәй Федерацияһы составында үҙ ерҙәрендә йәшәүсе аҫабаларҙыҡынан киңерәк тиҙәр. Был хәл дөрөҫмөләр-юҡмылыр, әммә башҡа штаттарҙа йәшәүсе американлыларҙың резервация еренә инеп, ундағы бер япраҡҡа ла тейә алмауы факт. Шул уҡ ваҡытта башҡа штаттарға сығып "эш боҙоусы" индеецтарҙың яҙанан ҡасыу өсөн резервацияға дөбөр-шатыр йүгереүҙәре хаҡында ишеткәнебеҙ бар.

Беҙҙә иһә, урман-күлдәребеҙ ситтәргә аукционда һатыла, 49-шар йылға ҡуртымға бирелә. Был осраҡта урындағы халыҡ бер нәмә лә эшләй алмай, барыһы ла закон нигеҙендә тормошҡа ашырыла. Дөрөҫөн әйткәндә, халыҡтың йәшәйешенә, уның йолатрадицияларына, тарихына, менталитетына бәйле ер-һыуын ситтәргә һатырға йә ҡуртымға бирергә рөхсәт иткән закон сығарыусы дәүләт үҙ-үҙенә ҡаршы эшләй. Шуға күрәләр ҙә, РФ Дәүләт Думаһы ҡабул иткән "Ер кодексы" күпселек халыҡ тарафынан "енәйәтсел кодекс" тип атала ла инде. Был кодекс - Рәсәй Федерацияһын киҫәктәргә бүлеп-бүлеп, донъя капиталына өләшергә "йәшел урам" асыусы кодекс. Илебеҙ киҫәктәргә бүленеп, һатылып бөткәс кенә аңларбыҙ был хәлде, әммә терһәк, һәр саҡтағыса, ауыҙға яҡын булмаясаҡ. Ә инде был саҡта илебеҙ ер-һыуын ситтәргә һатыусылар һәм был хаҡтағы законды сығарыусылар илебеҙҙе һатҡан аҡсаға алған диңгеҙ-океан уртаһындағы утрауҙарында ҡомда ҡыҙыныр. Үкенескә ҡаршы, беҙҙә илде һатыу бизнес кимәленә күтәрелгән шул.

"Инһәң - ил, сыҡһаң - яу" әйтеменең икенсе төп мәғәнәһен аңлатыу өсөн башҡорт милләтенең барлыҡҡа килеүе тарихын яҙырға кәрәк булыр ине. Уйлап ҡараһаң, ошо дүрт кенә һүҙгә халҡыбыҙҙың бар тарихы һыйған кеүек. Быны аңлар өсөн гәзитебеҙҙең 33-сө һанында баҫылған тарихсы һәм тележурналист Салауат Хәмиҙуллиндың "Көслөгә һыйыналар, көсһөҙҙән - тайшаналар..." тигән сығышын тағы бер тапҡыр уҡыу ҙа етә:

"Башҡорт милләте бик күп ырыуҙарҙан торған суперэтнонсты тәшкил итә. Милләт составына ингән теге йәки был ырыуҙың Ер шарының теге йәки был төбәгендә ҡандаш милләте йә дәүләте бар. Минеңсә, башҡорт - этноним ғына түгел, бер үк ваҡытта полиэтноним да, йәғни төрлө ырыу-ҡәбиләләрҙе берләштереүсе политик термин. Ысынлап та, күп кенә ұҙаллы көслө ырыуҙарҙы, ҡәбиләләрҙе ниндәй көс башҡорттарға ҡушылырға мәжбүр иткән һуң? Миҫалға һәлийоттарҙы ғына алайыҡ. Алтын Урҙала һәлийоттар күп өҫтөнлөктәргә эйә ҡәбилә һаналған. Улар Сыңғыҙхан ырыуы менән ҡандаш. Әммә улар ике китғаны яулаған Сыңғыҙ хандың тоғандары булыуға ҡарамаҫтан, башҡорт милләтен ҡабул итә. Бынан шул күренә: башҡорт булып аталыу ул ваҡытта оло ғорурлыҡҡа, ҙур абруйға тиңләнгән, тимәк. Шундайын затлы, аҫыл тамырлы ырыу-ҡәбиләләр башҡортлоҡто үҙҙәре теләп ҡабул итеп алғас, ул заманда башҡорт булыуы оло мәртәбәгә тиңләнгәнен аңлауы ҡыйын түгел.

Һәлийоттар ғына түгел, Алтын Урҙаның алтын бағаналары һаналған ниндәй ҡеүәтле һәм киң тармаҡлы табын, мең, меркет ырыуҙары ла башҡорт милләтенә күсә, уның телен, йолаларын үҙ итә. Мәҫәлән, Алтын Урҙа тарафынан ҡыйратылған Дәште Ҡыпсаҡ империяһы ярсыҡтары ҡотолор юл эҙләп төрлө яҡҡа һибелгән. Уларҙың бер өлөшө Венгрияға китә һәм ауыр яҙмышҡа дусар була. Был илдә венгр короллдәре уларҙы католик диненә көсләп күсергә мәжбүр итә. Грузияға киткән ҡыпсаҡтар ҙа шундай уҡ яҙмышҡа тарый. Күптәре Ислам дине хөкөм һөргән мосолман илдәренә, бер өлөшө Башҡорт иленә килеп һыйына. Башҡорт иле ҡыпсаҡтарҙы ғына түгел, бында һыйыныр урын эҙләп килгән һәр кемде ҡабул итә. Образлы итеп әйткәндә, "Ирекле кешеләр республикаһы" ролендәге Башҡорт иле килеүселәргә йәшәргә урын бирә, уның имениеген тәьмин итә. Килеүселәр үҙ нәүбәтендә урындағы ҡәүемдең телен, диненә, йолаларын, бер һүҙ менән әйткәндә, милләтен ҡабул итә. Ирекле ырыуҙар федерацияһын тәшкил иткән халыҡ составындағы эре ҡәбилә менән бәләкәй генә ырыу ҙа дөйөм Башҡорт ҡоролтайында бер тигеҙ тауышҡа эйә була. Халыҡтың яҙылмаған ҡануны буйынса эре ҡәбилә бер ваҡытта ла бәләкәй ырыуҙы кәмһетмәгән, йәберләмәгән. Халыҡ йәшәйешенең тап ошо тигеҙлек һәм тиң хоҡуҡлылыҡ принцибы ситтәрҙе Уралтауға - Башҡорт иленә ымһындырып әйҙәп торған да инде. "Инһәң - ил, сыҡһаң - яу" әйтеменә Салауат Хәмиҙуллин килтергән бына ошо аңлатманан да төпләрәк аңлатма табып булмаҫ.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**



## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республикабыҙҙа 2012 йылда - йәйге биатлон буйынса донъя чемпионаты, 2013 йылда - йәштәр араһында хоккей буйынса донъя чемпионаты, 2013 йылда - Халыҡ-ара ҡышҡы балалар уйындары, шулай уҡ 2021 йылда олимпия уйындарына индерелмәгән һәм милли спорт төрҙәре буйынса бөтә донъя уйындары үткәреләсәк. Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәт йортонда вице-премьер Зөһрә Рәхмәтуллина етәкселегендә ошо ҙур спорт саралары мәсьәләләре тикшерелгән эш кәңәшмәһе үтте. Башҡортостандың масштаблы ярыштар үткәреү буйынса ҙур тәжрибәһе, шулай уҡ матди-техник базабыҙ булыуы билдәләнде. Беҙҙә 2006 йылдан алып туғыҙ донъя һәм Европа чемпионаты үткәрелгән. Барлыҡ спорт саралары ла юғары кимәлдә үткән.

✓Илебеҙҙең өлкән класс уҡыусылары финанс баҙары буйынса Бөтә Рәсәй олимпиадаһында ҡатнашырға саҡырыла. Ғаризалар ҡабул итеү 17 октябрҙә тамамланасаҡ. Ҡатнашыу өсөн олимпиада сайтында теркәлеү мотлаҡ. Уның ойоштороусылары - Рәсәйҙең Финанс баҙарҙары буйынса федераль хеҙмәте һәм Фонд баҙары. Ярыштың тәүге ике туры ситтән тороп ҡатнашыусылар өсөн: бында онлайн режимда тест үтергә һәм һайланған темаға ижади эссе яҙырға кәрәк буласаҡ. Конкурстың өсөнсө этабы - финал. Ул 2012 йылдың мартында Мәскәүҙә үтәсәк һәм тест үтеүҙе, яҙма имтиханды һәм блиц-уйынды үҙ эсенә ала.

✓Күпселек Рәсәй студенттарының стипендиялары быйыл 29 процентҡа артасаҡ. Был хаҡта "Берҙәм Рәсәй"ҙең Башҡортостан төбәк бүлексәһенең сәйәси клубы ултырышында Дәүләт Думаһы депутаты Николай Булаев хәбәр итте. "Беренсенән, стипендия 9 процентҡа индексацияланды, - тип комментарий бирҙе ул. - Икенсенән, стипендия фонды 20 процентҡа арттырылды. Был юғары уҡыу йорттары кәрәк тип тапҡан студенттарға стипендияны үҙҙәре арттыра алһын өсөн эшләнде". Илдә стипендия фонды бындай күләмдәрҙә һуңғы 15 йылда арттырылмаған. Улар һуңғы тапҡыр 2008 йылда индексацияланған.

✓Башҡорт режиссерының "Енмеш" тип аталған ҡыҫҡа метражлы фильмы халыҡ-ара мосолман киноһы фестивалендә иң яҡшыһы тип табылған. Был фильм төрлө конкурстарҙа призлы урындар яулаған була. Уның авторы - Санкт-Петербург дәүләт кино һәм телевидение университеты студенты Айнур Асҡаров.

**✓ Ҡала буйынса картуфҡа хаҡты түбәнәйтеү маҡсатында Ауыл хужалығы министрлығы менән берлектә картуф һатыуҙы быйыл ун ике урында ойошторасаҡтар. Бер килограмын быйыл 10-15 һумға алып буласаҡ.**



ӘЙТӘГҮР!

# ТЕХНИК ӨЛКӘЛӘ...

## белгестәр арта

**Бөгөнгө хеҙмәт баҙарында һәләтле, белемле, йүнсел белгестәргә өҫтөнлөк бирелеүе бер кемгә лә сер түгел. Һөнәрҙе дөрөҫ һайлау киләсәктә уңышлы кеше булыуҙың нигеҙе икәнен хәҙер ата-әсәләр генә түгел, ә мәктәп балаһы ла яҡшы аңлай. Ошондай заман талаптарына яраҡлы уҡыусылар тәрбиәләү менән шөғөлләнеүсе интернаттарҙың күбеһе баш ҡалала урынлашҡан һәм был белем усаҡтарында, ысынлап та, балалар төрлө яклап камиллаша, лайыҡлы белем ала. Быйылғы уҡыу йылын тамамлаусылар ниндәй һөнәрҙәргә өҫтөнлөк биргән? Ошо турала Өфөнөң башҡорт гимназия һәм лицейҙары директорҙары яуап бирә.**

**Әлфир ҒАЙСИН, Р.Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты директоры:** 2010-2011 уҡыу йылында беҙҙең гимназияны 170 бала тамамланы. Уларҙың күбеһе республикала урынлашҡан юғары уҡыу йорттарына уҡырға инде, шулай уҡ 44 бала Мәскәү, Санкт-Петербург, Силәбе, Магнитогорск вуздарында белем ала. Гимназия тарихында беренсе мәртәбә 4 уҡыусыбыҙ Астанала урынлашҡан Йәсәүи исемендәге Ҡаҙаҡ-төрөк университетының юридик, мәғлүмәти технологиялар факультеттарына уҡырға инде. Бөгөнгө көнгә улар тураһында мәғлүмәт туплана һәм уҡыусыларыбыҙҙың 99 проценты вуздарға уҡырға ингән, тип әйтә алабыҙ. Техник һөнәр алыусылар күп, быйыл, мәҫәлән, уҡыусыларыбыҙҙың 68 проценты техник вуздарға китһә, 15 проценты медицина буйынса һөнәр үҙләштерә, ә ҡалғандары гуманитар профилдә белем ала.

Ғөмүмән, гимназияны тамамлаған уҡыусыларыбыҙ бер ҡасан да һынатмай, уларҙың күбеһе төрлө стипендиаттар исемен йөрөтә, уҡыу йорттарын ҡыҙыл дипломға тамамлай, спорт, йәмәғәт эштәре менән шөғөлләнә. Быйылғы уҡыу йылы беҙҙең өсөн тағы ла яуаплыраҡ, сөнки киләһе йыл гимназияны 220 бала тамамлаясаҡ.

**Юлай СОЛТАНГӘРӘЕВ, Республика иҡтисад лицей-интернаты директоры:** Быйыл лицей-интернат 90-ға яҡын уҡыусыһы менән хушлашҡайны, уларҙан шатлыҡлы хәбәрҙәр килеүен дауам итә, иң мөһиме, барыһы ла юғары уҡыу йорттарына уҡырға инә алды. Уҡыусыларыбыҙ республика вуздарынан тыш, Мәскәү, Санкт-Петербург университеттарын һайлай. Егеттәр күберәк уҡый беҙҙә, ҡыҙҙар һан яғынан аҙыраҡ. Уларҙы айырым уҡытабыҙ. Лицейҙа социаль-иҡтисади һәм физика-математика профилендә белем бирелә, был уларға һөнәр һайлауға ла булышлыҡ итә. Һәр уҡыу йылы башында сығарылыш уҡыусылары менән әңгәмәләр үткәрәбеҙ, хеҙмәт баҙарындағы хәлде лә иҫәпкә алабыҙ. Илдә иҡтисадсылар кәрәгенән күпкә артыҡ булған сакта иҡтисад йүнәлешендә белем алырға теләүселәр кәмемәй. Уҡыусыларыбыҙ әйтмешләй, илдә иҡтисадсылар күп, әммә яҡшы иҡтисадсылар юҡ. Беҙ уҡыусыларыбыҙ менән тулыһынса килешәбеҙ һәм республикабыҙҙы юғары үрҙәргә күтәрерҙәй белгестәр әҙерләүгә ҙур көс һалабыҙ. Иҡтисад белеме бигерәк т э бөгөнгө заманда барыбер ҙә бар һөнәрҙәрҙең нигеҙе ул.

**Фәнил НУРИЕВ, Башҡорт республика лицей-интернаты директоры:** Йыл һайын юғары уҡыу йорттарына инеү буйынса яҡшы күрһәткестәргә өлгәшәбеҙ. Быйыл лицейҙы 62 уҡыусы тамамлағайны, бөгөн уларҙың 97 проценты - вуз студенттары. Өфө дәүләт нефть техник университеты менән Өфө дәүләт авиация техник университетын һайлаусылар күберәк булды, шулай уҡ Мәскәү, Санкт-Петербург вуздарында белем алыусылар байтаҡ ҡына. Ситтә юғары белем алыуҙың өҫтөнлөктәрен хәҙер ата-әсәләр ҙә яҡшы аңлай һәм балаларының теләгенә ҡаршы килмәй. Үҙебеҙҙең бик яҡшы вуздар бар, әммә республиканан ситтә белем алған белгестәр донъяға ҡарашы киңерәк була, ҡыйыуыраҡ булырға, һәр ситуациянан сығыу юлдарын табырға өйрәнә. Шуға ла быға шәхсән үҙем дә ҡаршы түгелмен.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ЕНӘЙӘТТӘР КӘМЕҮГӘ...

## интернет сәбәпсеме?



**Өфө ҡалаһында теркәлгән енәйәттәрҙең дөйөм һаны былтырғы йылдың ошо осоро менән сағыштырғанда 3,4 процентҡа кәмегән. Ошо көндәрҙә Өфө ҡала эске эштәр идаралығы начальнигы Илгиз Садиҡов журналистар менән осрашып, баш ҡалалағы криминоген хәл һәм уны тотороҡландырыу өсөн ҡулланылған саралар менән таныштырҙы.**

Илгиз Камил улы белдереүенсә, оператив-профилактика эштәре һөҙөмтәһендә йәмәғәт урындарында башҡарылған енәйәттәр 11 процентҡа, урамда ҡылынғандары - 16, баҡсаларға һәм дачаларға "төшөү"ҙәр - 26, кеше үлтереү - 30, кеше талау - 13 процентҡа, граждандарҙың милкен ҡулға төшөрөү менән бәйле енәйәттәр 126 осраҡҡа кәмегән. Дәүләт власына ҡаршы 518 енәйәт осрағы (шуларҙың 259-ы ришүәт менән бәйле) теркәлгән. Илгиз Садиҡов әйтеүенсә, автомобиль "менеп ҡасыу"ҙар 30 процентҡа артҡан. Быңдай енәйәттәрҙе иҫкәртеү маҡсатында ҡаланың эске эштәр идаралығы тарафынан бөтә офицерҙарҙы йәлеп иткән төнгө рейдтар ойошторолған. 20 көн дауам иткән шундай сираттағы рейдтың береһендә 200-ҙән ашыу тәртип һаҡсыһы ҡатнашҡан. Сара ваҡытында 36 енәйәт асыҡланған, шул иҫәптән 9 автомобиль ҡыуып алып китеү, 15 автомобиль урлау һәм тағы ла 12 кеше талау осрағы асыҡланған. Енәйәт өҫтөндә тотолған 22 кеше ҡулға алынған.

Кәңәшмәлә: "Граждандарҙың мәҙәни кимәле үҫә", - тиелде. Был ысынлап та шулайҙыр. Полиция хеҙмәткәрҙәренең быңдай баһаһы ҡала халҡының иҫәбенә бер мәрәй булып яҙылған икән, яҡшы бит. Был яңылыҡтар менән уртаҡлашҡас, урта йәштәрҙәге бер ағай: "Хәҙер ҡала урамдары тыныслана төштө, урамда эсеп-иҫереп йөрөүселәрҙе бөтөнләй осратмаҫһың, тиерлек. Бөгөнгө ҡала менән уның 10-20 йыл элекке сағын сағыштырырлыҡмы? Үсмерҙәр, йәштәр урам ҡыҙырып йөрөмәй, кемделер тукмап, аҡса һығыу улар өсөн ҡыҙыҡ та түгел - барыһы ла интернет, телевидение ярҙамында бөтә донъя мәғлүмәт системаһында "донъя гиҙә", аралаша. Бөгөнгө йәштәр интернеттан үҙҙәренең үҫеше өсөн яңы идеялар таба, сит илдәрҙәге йәшәү рәүешен өйрәнеп, уларҙың тәртибен, ҡыланышын ҡабатларға, яҡшы идеяларын алып ҡалырға, тормошта ҡулланырға тырыша. Йәғни, мәғлүмәт заманында йәшәгән кешенең енәйәттәр менән булышырға теләге юҡ", - тип, үҙ фекерен белдерҙе. Ысынлап та, енәйәттәрҙең кәмеүендә бөгөнгө замандың үтә ҡыҙыҡ, үтә тиҙ үҙгәреүсән булыуы ла роль уйнамаймы икән? Ҡағыҙҙа булараҡ, эш менән мәшғүл кешенең боҙоҡлоҡ уйларға ваҡыты ҡалмай түгелме?

# ЙӘРМИНКӘЛӘРҘӘ...

## ризыҡ арзан һәм сифатлы

**Ошо көндәрҙә Өфө ҡала округы хакимиәтенең ҡулланыусылар баҙары идаралығы начальнигы урынбаҫары Зөлфиә Ижбулатова журналистар менән осрашып, көҙ айҙарында үтәсәк ауыл хужалығы йәрминкәләре тураһында мәғлүмәт еткерҙе.**

Кәңәшмәлә билдәләнеүенсә, 20 йылдан ашыу үткәрелеп килгән йәрминкәләр ҡала халҡы өсөн көтөп алынған сараға әйләнгән. Быйыл көҙгө йәрминкәләр төрлө ваҡытта 20 урында - башлыса ҡала халҡы өйрәнгән Йәштәр һәм Спорт һарайҙары, С. Орджоникидзе исемендәге парк һәм Профсоюздар йорто алдарындағы майҙанда, шулай уҡ эре сауҙа комплекстары эргәһендә ойошторола саҡ. Был ярҙа Спорт һарайы алдында Башпотребсоюз тарафынан ойошторолған йәрминкә үтә.

Кәңәшмәлә хаҡтар тураһында ла һүҙ булды. "Былтыр йәрминкәләрҙә балдың 1 килограмы 350-450 һум тәшкил итһә, быйыл хәлдең ыңғай яҡҡа үҙгәреүе күҙгә ташлана - балдың бер килограмы өсөн 300-400 һум һорайҙар", - тине Зөлфиә Әлим ҡыҙы.

"Йәрминкәләр ҡаланың аҙыҡ-түлек магазиндарындағы йәшелсәләргә хаҡтарҙы 10-20 процентҡа арзанайта. Ҡала буйынса картуфҡа хаҡты түбәнәйтеү маҡсатында Ауыл хужалығы министрлығы менән берлектә картуф һатыуҙы быйыл ун ике урында ойошторасаҡтар. Был саралар ярҙамында картуфтың бер килограмын быйыл 10-15 һумға алып буласаҡ", - тигән фекерҙә ҡулланыусылар баҙары идаралығы начальнигы урынбаҫары.

Кәңәшмә һуңында ҡала халҡының йәрминкәләргә йөрөү-йөрөмәүен тикшергән социологик һорау алыу һөҙөмтәләре ишеттерелде. Уның буйынса Өфө халҡының 64 проценты йәрминкәләрҙе ҡалдырмай йөрөй. Сағыштырыу өсөн, 2006 йылда ундайҙар 56 процент булған. Респонденттарҙың 69 процентын йәрминкәләрҙәге хаҡтарҙың түбән булыуы, 58 процентын - магазиндарҙа һатылған продукцияға ҡарағанда сифатлыраҡ булыуы, 45 процентын - урындағы продукция булыуы, 43 процентын киң ассортиментта булыуы ылыҡтыра.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Совет районы хакимиәте, был аҙнала Йәштәр мәҙәниәт һарайы алдындағы майҙанда ойошторған йәрминкәлә Шишмә, Өфө, Ауырғазы, Архангел, Ҡариҙел, Ҡырмыҫҡалы райондары вәкилдәре һатыу итәсәк, тип хәбәр итә. Шулай уҡ Комсомол (18-се йорт эргәһендә), Менделеев (171-се йорт эргәһендә), Ленин (100-сө йорт эргәһендә) урамдарында картуф һатыу ойошторола саҡ.**

**Илгизәр БУЛАТОВ әҙерләнә.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө халҡы власть органдарына интернет аша былтырғыға ҡарағанда өс тапҡырға йышыраҡ мөрәжәғәт итә башлаған. Мөрәжәғәттәрҙең электрон формаһы популярлығы 6 проценттан 18-гә тиклем артҡан. Шулай ҙа халыҡтың интернетҡа ҡарата ышансы ҙур түгел. 34 процент осраҡта өфөләләр - яҙма рәүештә, 22 процент осраҡта телдән мөрәжәғәт итеүҙе өҫтөн күрә. Һорау алыу барышында шулай уҡ өфөләләрҙең ҡалала үткәрелгән төҙөкләндереү буйынса сараларға ҡарата мөнәсәбәте билдәләнгән. Урамдарҙы яҡтыртыуҙы, юлдарҙың таҙалығын, туктальштарҙы торошон 70-93 процент халыҡ ыңғай баһалаған. Юл буйындағы реклама хаҡында халыҡ насарыраҡ фекерҙә.

✓Үткән ял көндәрендә Өфөлә уҙғарылған бал йәрминкәләрендә яҡынса 60 миллион һумлыҡ бал һатылған. Был хаҡта Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев оператив кәңәшмәлә хәбәр итте. Билдәләнеүенсә, ике көн эсендә ҡаланың Орджоникидзе һәм Совет райондарында ойошторолған йәрминкәләрҙә 900-ҙән ашыу бал һатыусы ҡатнашҡан. Балға хаҡ килоһына 300-400 һум самаһы булыуға ҡарамаҫтан, яҡынса 169 тонна бал һатылған - былтыр көҙ үткәрелгән беренсе йәрминкәләрҙәге күрһәткескә ҡарағанда был ике тапҡырҙан ашыуға күберәк.

✓Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты йәштәр араһында сәләмәт йәшәү рәүешен нығытыу, милли сәнғәткә, йолаларыбыҙға иғтибар һәм ихтирам тәрбиәләү маҡсатында аҙна һайын башҡорт йәштәре дискотекаһы үткәреүҙе планлаштыра. Тәүге сара "Аҡбуҙат" ипподромы эргәһендәге "Бульвар" трактирында 22 сентябрҙә 20 сәғәттә үтәсәк. Программала - башҡорт эстрадаһы йондоҙҙары сығышы, төрлө конкурстар. Башҡорт кухняһы аштарынан ауыҙ итергә мөмкин буласаҡ.

✓РФ Федераль миграция хеҙмәтенең республика идаралығы мәғлүмәте буйынса, сентябрь башында Башҡортостанға 300-ҙән ашыу сит ил студенты килгән. Был Башҡорт дәүләт университеты, Өфө дәүләт нефть техник һәм Башҡорт дәүләт медицина университеттарының беренсе курс студенттары. Йәмғеһе Өфө вуздарында 1241 сит ил кешеһе белем ала, улар башлыса Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Төркмәнстан, Тажикстан, Әзербайжан, шулай уҡ Төркиә һәм АҠШ граждандары.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ХӘЛӘЛ РИЗЫҠ ЕЙЕҮ...

## ғибәҙәткә тиң ғәмәл



**Уҙған аҙнала баш ҡалабыҙҙа беренсе "Ufa Halal 2011" төбәк-ара хәләл продукция конкурс-дегустацияһы булып үтте. Конкурсҡа республикабыҙҙың район-ҡалаларынан тыш, сит өлкәләрҙән дә хәләл ризыҡ етештереүсе предприятие, ойошмалар килгәйне. Улар халыҡ иғтибарына "хәләл" стандарттарына ярашлы итеп етештерелгән ит ризыҡтары, шулай уҡ һөт, кондитер аҙыҡтары, бал, еҫле майҙар тәҡдим итте.**

- Хәләл продукцияның башҡа ризыҡтарҙан айырым өҫтөнлөгө бар, - тип билдәләп үтте Башҡортостан Республикаһының Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау буйынса дәүләт комитеты етәксеһе Илдар Әхмәтшин. - Уны етештереүҙә кешенең сәләмәтлегенә зыян килтерерлек төрлө ҡатнашмалар, химик матдәләр, тәмләткестәр ҡулланыу рөхсәт ителмәй.

Башҡортостан предприятиелары хәләл продукция сығарыу менән 2010 йылда ҡыҙыҡһына башлай. Беренсе сиратта, был тенденция ит эшкәртеү сәнәғәтендә сағыла. Ошо уҡ йылда Дүртөйлә ит комбинатында шәриғәт ҡанундарына ярашлы колбаса ризыҡтары һәм ярым фабрикаттар етештерелә башлай. Шулай уҡ "Турбаслы бройлерҙары", "Башҡорт", "Өфө" ҡошсолоҡ фабрикалары продукцияһы ла "Хәләл" стандартына тап килеүгә сертификат ала. Бөгөн республикабыҙҙа бөтәһе 45 предприятие хәләл ризыҡ етештереү менән шөғөлләнә. Бәлки, кемдәрҙәлер, был ризыҡтарҙың хәләл булыуына нисек ышанырға була, тигән һорау тыуыр. Был йәһәттән шикләнергә урын юҡ, сөнки Башҡортостан Республикаһы мосолмандары Диниә назараты ҡарамағындағы "Хәләл" комитеты хәләл ризыҡ етештереүселәрҙе даими рәүештә тикшереп тора, был эштең нескәлектәрен аңлата. Конкурсҡа ҡатнашыусы ойошма етәкселәре әйтеүенсә, хәләл ризыҡтар махсус урындарҙа етештерелә һәм һаҡлана, һатыуҙа ла хәрәм ризыҡтар менән йәнәшә урынлаштырылмай, йәғни был ризыҡтарҙы ҡурҡмайынса ашарға мөмкин.

- "Беҙ нимә ашайбыҙ, организмыбыҙ шуны тәшкил итә", тигән бер ғилем әйәһе. Хәрәм ризыҡ ашап, беҙ үҙебеҙҙең һаулыҡҡа ғына түгел, балаларыбыҙҙың сәләмәтлегенә лә зыян һалйбыҙ, йәғни нәҫелебеҙ тамырына үҙебеҙ уҡ балта сабабыҙ. Тимәк, беҙҙең һәр беребеҙ сифатлы, йәғни хәләл ризыҡ менән туҡланырға ынтылырға тейеш, - тине Башҡортостан Республикаһы мосолмандарының Диниә назараты ҡарамағындағы "Хәләл" стандарты буйынса комитет етәксеһе Тимур Шәнгәрәев. - Икенсе яҡтан, хәләл ризыҡ ашау - Аллаһ ҡушҡанды үтәү, йәғни ғибәҙәткә тиң ғәмәл булып та тора.

Конкурс продукттарҙың бер нисә төрө буйынса үткәрелде: ҡош ите продукттары, ит ярымфабрикаттары, кондитер һәм һөт ризыҡтары, башҡа төрлө продукциялар. Иң яҡшы хәләл ризыҡтарҙы билдәләр өсөн тәғәйенләнгән махсус экспертиза төркөмө конкурсҡа тәҡдим ителгән продукцияны билдәле экспертиза ярҙамында баһаланы. Еңеүселәр дипломдар менән бүләкләнде һәм үҙҙәренең тауарҙары тышлығында конкурс ярлығын ҡулланыу хоҡуғына эйә булды.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Нәйлә ВӘЗИТОВА, Турбаслы ҡошсолоҡ фабрикаһында хисап буйынса белгес:** Беҙ хәләл ризыҡтарҙы 2001 йылдан сығара башланыҡ. Эшебеҙ Башҡортостан Республикаһы мосолмандарының Диниә назараты күҙәтеүе аҫтында башҡарыла. Хәләл стандарты буйынса эшләй башлағас та эшкә дини белемле шәкерттәрҙе алдыҡ. Уларға эш урынында тәһәрәт алыу, биш тапҡыр намаҙ уҡыу өсөн бөтә шарттар булдырылған. Хәләл ит ризыҡтарының өҫтөнлөгө нимәлә һуң? Беренсенән, тауыҡтар доға ҡылып, дини шарттарға ярашлы итеп салына, һуйғанда уларҙың ҡаны тулыһынса сығып бөтә. Шуға күрә иттең тәме яҡшы, тышҡы йөҙө лә бик матур була. Икенсенән, хәләл продукция етештерер өсөн айырым техник шарттар булдырылған, иң беренсе таҙалыҡ күҙ уңында тотола. Өсөнсөнән, "хәләл" итен етештереү өсөн ҡулланылған ҡоштар экологик яҡтан таҙа аҙыҡтар менән туҡландырыла, уларға гормональ өҫтәмәләр бирелмәй. Үҙебеҙҙең фабрикала хәләл ризыҡтар етештерә башлау менән килем күләме лә артты, сөнки бөгөн хәләл ризыҡтарҙы мосолмандар ғына түгел, ә бөтә кеше лә һатып алырға тырыша. Хәләл ризыҡ күпкә сифатлыраҡ, тәмлерәк, ти улар үҙҙәре лә. Беҙҙең продукцияны республикабыҙҙа ла, башҡа төбәктәрҙә лә теләп алалар.

**Ирек ЗАРИПОВ, Дүртөйлә ит комбинатының генераль директоры:** Дүртөйлә ит комбинаты бөгөнгө көндә республиканың ит етештереү өлкәһендә алдынғы урындарҙы алып тора. Беҙ һәр ваҡыт халыҡ ҡыҙыҡһыныуын күҙ уңында тотоп эшләйбеҙ. Һуңғы йылдарҙа динебеҙгә ҡайтыусы кешеләр күҙгә күренеп артты, улар, әлбиттә, базарҙарҙа һатылған ғәҙәти ит ризыҡтарынан баш тартты. Уларҙың ҡыҙыҡһыныуҙарын яҡлап, беҙ үҙебеҙҙең комбинатта хәләл ризыҡтар етештерергә булдыҡ. Сығарылған продукцияның ассортиментын даими рәүештә яҡшыртып, үҙгәртеп торабыҙ, ә дөйөм алғанда, комбинатта 35 төрлө хәләл продукция етештерелә. Бешерелгән колбаса (тултырма), сосиски, деликатестар, ярымфабрикаттар һәм башҡа мосолман диненә ярашлы итеп әҙерләнгән ризыҡтар Башҡортостан Республикаһы мосолмандары Диниә назараты контроле аҫтында етештерелә. Хәләл продукция етештерелгән ерҙә сусҡа иттәре ҡуйылмай, таҙалыҡҡа ҙур иғтибар бирелә. Үҙебеҙҙең ауыл халҡының мал-тыуары таҙа һыу эсеп, саф һауа һулап, таҙа үлән ашап үҫә, шуға күрә хәләл ит комбинатында республикабыҙҙа үҫтерелгән малдар, ҡош-ҡорттар ҡулланыла. Өфө, Дүртөйлә, Нефтекама, Ағиҙел, Бөрө, Белорет ҡалаларында беҙҙең һатыу нөктәләре киң таралған. Шулай уҡ үҙебеҙҙең продукцияны Татарстандың алты ҡалаһында ла һатыуға сығарабыҙ. Әйткәндәй, улар беҙҙән тик хәләл продукцияны ғына һатып ала. Дөрөҫ, хәләл ризыҡтар ҡиммәтерәк, ләкин халыҡ сифатлы ризыҡ өсөн өҫтәп түләргә лә риза.

**Салауат АМАНОВ, "Рәхмәт" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт директоры:** Хәләл тигәндә бөтәһе лә шунда уҡ ит ризыҡтарын күҙ алдына килтерә. Әммә бөгөн баҙарҙарҙа ит ризыҡтары ғына түгел, хәләл майонез, кетчуп, кондитер әйберҙәрен дә һатып алырға мөмкин. Күптән түгел беҙ хәләл стандарттарына яуап биргән көнсығыш тәмле-татлыларын етештерә башланыҡ. Ни өсөн беҙ кондитер аҙыҡтарына тотонорға булдыҡ? Бөгөн баҙарҙа һәр бер теләгән ризыҡты бер ниндәй шикләнеүһеҙ алып булмай. Ә мосолмандар өсөн ризыҡтың ниндәй шарттарҙа, нимә ҡушылып эшләнеүе бигерәк тә мөһим. Икмәк, булка, ҡумәс кеүек ябай ҡамыр ризыҡтарын өй шарттарында үҙебеҙ ҙә бешерә алабыҙ, ә бына көнсығыш ризыҡтарын әҙерләргә һәр кем йөрьәт итмәй. Беҙ был эшкә күптән түгел генә тотондоҡ һәм әлегә тик пахлава ғына етештерәбеҙ. Был татлы ризыҡ ҡатлы-ҡатлы итеп әҙерләнә, мәҫәлән, бер төрлө пахлава 40 ҡатлы булырға тейеш. Ә һәр бер ҡаттың ҡалынлығы 1 мм тәшкил итә. Был эшкә яңы ғына тотонһаҡ та, продукциябыҙҙы халыҡ бик теләп ала, һораусылар күп. Беҙҙең эшселәр динебеҙ ҡанундарын яҡшы белә, ризыҡтарҙы әҙерләгәндә таҙа ҡулдар менән, намыҫлы эшләй. Аҙыҡ составына бер ниндәй ҙә өҫтәмәләр ҡушылмай, бында тик он, шәкәр, май, йомортҡа, сәтләүек кеүек үҙебеҙ белгән, яраҡтан таҙа продукттар ғына ҡулланыла. Үҙем көнсығыш кухняһын яратам, киләсәктә ассортиментты тағы ла киңәйтербеҙ, халыҡҡа күп төрлө хәләл тәмле-татлыларын еткерербеҙ, тип уйлайым.

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА** яҙып алды.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Баш әйләнһә



Ҡуҙаҡлы ҡыҙыл әсе борос баш әйләнеүенән ҡотҡара. Бер стакан йылы һыуға бер семтем борос һалып болғатығыҙ һәм бәләкәй генә йотомдар менән эсегеҙ. Һыу һәм борос ҡанды "ҡыҙҙырып" ебәрә һәм ҡан яҡшыраҡ йөрөй башлай, шуға ла үҙегеҙҙе яҡшыраҡ тоя башлаясаҡһығыҙ.

### Гемоглобин күтәреү

150-әр грамм кишер, мүк еләге (клюква), торма (редька) һутын бергә болғатып, ҡараңғы төҫтәге тимер шешәгә ҡойоғоҙ һәм һыуытҡыста һаҡлағыҙ. Көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан 1-әр ҡалаҡ эсергә.

### Депрессия

Көнөнә бер банан ашағыҙ, был емеш составындағы үҙенсәлекле матдә - мескалин кәйефте күтәреү һәләтенә эйә. Биш уртаса ҙурлыҡтағы алманы әрсеп, ҡабығын ярты литр һыуға һалып, ҡайнап сыҡҡансы көтөргә һәм утты һүндереп, төнөтмәне 1 сәғәткә ҡалдырырға. Аҙаҡтан һөҙөп, көн дауамында эсергә. Дауаланыу курсы - ике аҙнанан ике айға тиклем. Барыһы лы сирленең хәленән тора.

### Дерматит

Юл үләне япрағын йыйып, һыуҙа йыуығыҙ һәм ит турағыс аша үткәрегеҙ. Марляға һалып, һутын һығып алғас, һутты таҙа һауытҡа һалып, һыуытҡысҡа ҡуйығыҙ. Ошо һут менән тиренең дерматиттан зарарланған урындарын тәүлегенә 2-3 тапҡыр һөртөп торороҙ. Ғәҙәттә, бер аҙнанан хәлегеҙ күпкә яҡшырыр. Дауалау курсы - бер ай.

### Диатез

Сабыйығыҙ диатез менән яфаланһа, картуф крахмалы ваннаһы ҡулланығыҙ. Һыу температураһы 37 градус булырға тейеш. 100 грамм крахмалға бүлмә температураһындағы һыу ҡойоп, иҙеп алырға һәм 10 литр һыуға ҡойорға. Баланы 10-15 минутҡа ошо ваннала яткырғандан һуң, тирелә крахмал ҡалһын өсөн уны һөртөндөрмәй генә урап һалып торорға.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

БЕҘҘЕ АЛДАЙҘАР!

# МУТЛАШЫУСЫЛАР ӨСӨН...

## яңы миҙгел асылды

**Хәҙерге заманда кеҫә телефоны һәр кемебеҙҙең тормошона шул тиклем үтеп ингән, унһыҙ бер көндө лә күҙ алдына баҫтырыуы ауыр. Иртән йоҡонан уята, сәғәтте теүәлләй, калькуляторында һанайбыҙ, яратҡан көйҙәребеҙҙе яҙҙырабыҙ, уның аша радио тыңлайбыҙ... Кеҫә телефондарының һуңғы моделдәре хатта хужаһының аҙымдарына һиҙгерлек күрһәтеп, уларҙы километрҙарға әйләндерә, имеш... Шулай ҙа уларҙың иң мөһим функцияһы - араларҙы яҡынайтыу, бәйләнеш булдырыу. Тик ҡайһы бер "аҡыллы баш"тар уны аҡса эшләү, килем алыу сығанағына әйләндереү юлын да таба.**

Йәй урталарында күп кеше "яҡындары"нан проблемалар килеп сығыуы, уларҙы хәл итеү өсөн ят телефон номерына билдәле суммала аҡса күсерергә кәрәклеге тураһындағы смс-хәбәр алды. Был турала ваҡытлы матбуғат баҫмаларында ла халыҡты иҫкәртеү мәҡәләләре сыҡҡылай.

Сентябрь башланыу менән меңәрләгән ата-әсә балаларын ситкә уҡыуға оҙатты. Улар араһында мәктәпте яңы тамамлаған балаларын ҙур ҡалаға оҙатыусылар һаны бихисап. Быны яҡшы белгән мутлашыусылар өсөн "яңы сезон" асылдымы ни! Балаларының хәүефһеҙлеге, именлеге өсөн борсолған ата-әсәләрҙең психологияһын улар үҙ мәнфәғәттәрендә файҙаланып ҡалырға тырышты: бала исеменән ят номерға билдәле суммала аҡса күсерергә кәрәклеге тураһындағы смс-хаттар ата-әсәләргә адресланды. Был смс-хәбәрҙәрҙең "ҡорбан"дары ла юҡ түгел.

Баш ҡаланың юғары уҡыу йорттарының береһенә уҡырға ингән ҡыҙын оҙатып, бер-ике көн үткәс тә, бер танышым шундай хәбәр ала. Смс-хатта шылтыратмаҫҡа ҡушылһа ла, ул иң тәүҙә ҡыҙының телефон һандарын йыя - һүндерелгән! Күрһәтелгән номерға шылтырата - алмайҙар. Ниндәй генә уйҙар үтмәй әсәнең башынан: нимә булған? Нимәгә кәрәк булған ул тиклем сумма? Ятағына түләргә етмәгәнме? Берәй бәләгә тарығанмы? Телефонын алдырғанмы? Ҡала ҡыҙҙары аҡса таптырамы? Булыр, униһы ла булыр хәҙерге заманда... Балаһына нисек тә ярҙам итергә теләгән әсә ҡалған ғына аҡсаһын күрһәтелгән номерға күсерә. Тик аҙаҡтан ғына был мутлашыусыларҙың эше икәне, ә ҡыҙының беренсе курс студенттары өсөн ойошторолған осрашыуҙа булыуы, шуға телефонын һүндереп ҡуйыуы асыҡлана. Бына шулай, бер ҡатлы ауыл кешеһен ышандырыуға күп тә кәрәк булмай...

Әсәлек хисен оҫта файҙаланып, күпме аҡса эшләнә икән шул оятһыҙҙар? Күрһәтелгән телефон һандарының хужалары кем? Мутлашыусылар язаға тарттырылырға тейештер бит?..

**Гөлкәй СӘМЕРХАНОВА.**

**Редакциянан:** Ысынлап та, телефон менән бәйле мутлашыуҙар бөгөн йыш осрай һәм улар күп төрлө. Мутлашыусылар ярты йылға бер тапҡыр яңы төр мутлашыу юлы уйлап таба һәм кеҫәләрен ҡалынайта. Гәзит-журнал, телевидение һәм радио, интернет селтәре ошо хаҡта күп тапҡырҙар белдереү һәм киҫәтеүҙәр эшләһә лә, ышаныусан һәм йомшаҡ күңелле кешеләр был ҡармаҡҡа ҡабыуҙарын дауам итә. Мутлашыусыларҙы яуапҡа тарттырып буламы? Хоҡуҡ белгестәре белдереүенсә, ғәҙәттә, бындай юл менән "байығыуҙы" төрмәлә ултырыусылар киң ҡуллана һәм бер үк сим-карта бер-нисә кешегә "эшләүе" мөмкин. Мутлашыусы асыҡланған хәлдә лә, телефон иҫәбенә күсергән сумманың сағыштырмаса әҙ булыуы (ғәҙәттә 100-500 һум) һәм хоҡуҡ боҙоуҙы иҫбат итеү еңелдән булмау сәбәпле, уны яуапҡа тарттырыу ауыр. Еңәйәти язаға тарттырыу бары тик ҡурҡытыу һәм мутлашыу арҡаһында кемгәләр ҡулакса (5 меңдән алып) бирреп ебәргәндә генә мөмкин. Шуға күрә был осраҡта бары тик үҙегеҙҙең уяу һәм һаҡ булыуығыҙ ғына талап ителә.

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

**Һәр халыҡтың тарихы уның күренекле шәхестәре эшмәкәрлеге, тормошо аша сағыла. Тарихта яҡты эҙ ҡалдырған шәхестәр менән ғорурланабыҙ, уларҙың атҡарған эштәре һәр быуынды рухландырып тора. Башҡортостандың һәр төбәгендә бар ундай шәхестәр. Тик бына төньяҡ-көнбайыш башҡорттары араһынан сыҡҡан данлы шәхестәр менән хәл бер аҙ ҡатмарлыраҡ тора. Ғөмүмән, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының тарихи үткәне ентекләберәк өйрәнеүҙе, халыҡҡа ысынбарлыҡҡа тап килгән тарихты еткереүҙе талап итә.**

# СЫРТЛАНОВТАР -

## Шланлыкүл ауылынан сыҡҡан данлы нәҫел

Ысын тарих, тигәндә, беҙ ҡәтғи рәүештә архив сығанаҡтарына таянып яҙылған тарихты күҙ унында тотабыҙ. Сөнки бөгөн төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының милли асылын нисек тә булһа, хатта фәнни булмаған юлдар, төрлө уйҙырмалар, гипотезалар аша татар халҡына алып барып тоташтырырға тырышалар. Хатта тарих фәндәре докторы исемен йөрөткән ҡайһы бер "ғалимдар" ҙа ысын тарих фәненән алыҫ торған хеҙмәттәр, икенсе һүҙ менән әйткәндә, бер ниндәй факттар менән дә раҫланмаған һүҙ бутҡаһы аша төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының тарихын үҙҙәренә уңайлы итеп яҙыу менән шөғөлләнә. Миҫал өсөн йыраҡ йөрөргә кәрәк түгел. Ут күршеләребеҙҙә сыҡҡан китаптарҙағы, интернет селтәрендәге башҡорт баҡсаһына таш атҡан мәҡәләләрҙең һәр береһендә бер үк "тарих" бәйән ителә. Архив сығанаҡтарында, башҡорт, тип теркәлгән төньяҡ-көнбайыш башҡорттары, "башҡорт сословиеһына" күскән татарҙар, имеш. Бер һүҙ менән әйткәндә, башҡорт, типтәр кеүек үк, милләт түгел, ә сословие булған, тигән фекер алға һөрөлә. Ошо юҫыҡтан сығып, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының тарихы бәйән ителә. Мәҫәлән, "От служилых татар к татарскому дворянству" тигән китапта (И.Р.Ғабдуллин. 2006 йыл, Мәскәү) төньяҡ-көнбайыш башҡорттарынан сыҡҡан дворяндар йә татарҙар тип яҙылған, йә булмаһа, башҡорт сословиеһында булған татарҙар, тип аталған. Ошо рәүешле Минзәлә башҡорттарынан сыҡҡан данлы нәҫелдәр - Мутиндар, Солтановтар татарҙар булып киткән. Бөгөнгө Бүздәк районының Шланлыкүл ауылынан сыҡҡан башҡорт дворяндары, башҡорттоң ҡаңлы ырыуына ҡараған данлы нәҫелдәрҙең береһе - Сыртлановтарҙы ла "башҡорт сословиеһындағы татарҙар", тип теркәгән ут күршеләр.

Ә бит Сыртлановтар нәҫеленең үткәне, тормошо, эшмәкәрлеге, һөйләгән һүҙҙәре, Дәүләт думаһындағы сығыштары уларҙың башҡорт икәне тураһында ап-асыҡ һөйләй. Шланлыкүл ауылы - борон-борондан ҡаңлы ырыуының аҡтау түбәһе башҡорттары йәшәгән төбәк. Билдәле ғалим Әнүәр Әсфәндийәров яҙыуынса, 1795 йылда Шланлыкүл ауылында 12 башҡорт (78 кеше), 14 типтәр (103 кеше) һәм 4 мырҙалар йорто (47 кеше) теркәлгән булған. Типтәр тигәндәре 1738 йылда килешеү буйынса ҡаңлы башҡорттарынан ер алып килеп ултырған Минзәлә өйәҙенең Йәнәй улысы башҡорттары. 1917 йылда бында 54 башҡорт (ҡаңлылар), 585 типтәр (йәнәйҙәр), 961 мишәр йәшәгән. Ә инде 1920 йылғы халыҡ иҫәбен алыу ваҡытында бөтәһе лә татар һәм типтәрҙәр тип теркәлгән, тип яҙа Әсфәндийәров. Шланлыкүлдең ошондай тарихы төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының һәр бер ауылының яҙмышына ауаздаш. Бик ябай тарих: башҡорт ауылына килешеү буйынса мишәрҙәр, татарҙар, типтәрҙәр килеп ултырған, артабан бөтәһе лә, шул иҫәптән башҡорттар ҙа, татарға әүерелгән, дөрөҫөрәге, татар тип теркәлгән.



Шаһихәйҙәр Сыртланов.

Әсфәндийәров яҙыуынса, Сыртлановтар нәҫелен башлап ебәреүсе Сыртлан Айыткол Шланлыкүл һәм Сыртланлыкүл (хәҙерге Сыртлан ауылы) ауылдарына нигеҙ һалған. Архив документтарынан күренеүенсә, 1816 йылда Шланлыкүл ауылында йәшәүсе указлы мулла Ишбулды



2-се Дәүләт думаһының бер төркөм мосолман депутаттары. Беренсе рәттә һулдан икенсе Шәһихәйҙәр Сыртланов ултыра. Санкт-Петербург, 1907 йыл.



Ғәлиәскәр Сыртланов.

Сыртланов (1757 йылғы) телгә алына. Уның дүрт ҡатынынан 9 малайы тыуа (береһе йәшләй үлә). Иң өлкән улы Шиһабетдин (1793 йылғы) Башҡорт ғәскәрендә хеҙмәт итә. Поход яһаулы (походный есаул - капитан) дәрәжәһенә үҫеп етә. 1812 йылда французлдарға ҡаршы һуғышҡа китеп, 1813 йылда яу ҡырында һәләк була. Икенсе улы Шаһиәхмәт тә (1797 йылғы) хәрби хеҙмәттә йөрөй. Поход яһауылы дәрәжәһендә 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнаша. Шаһимарҙан (1803 йылғы) исемле улы Ҡанлы улысы старшинаһының ярҙамсыһы булып хеҙмәт итә. Аҙаҡ Шланлыкүл ауылында указлы мулла вазифаһын башҡара. Ғимаҙетдин (1805 йылғы) тигән улы ла дин юлын һайлай. 6-сы улы Мифтахетдин зауряд-хорунжий (хәҙергесә, кесе лейтенант), Ғәбделваһап (1816 йылғы) менән Шиһабетдин (1818 йылғы, яуҙа һәләк булған иң өлкән улының исемен ҡушҡандар, күрәһең) - урядник дәрәжәһендә Башҡорт ғәскәрендә хеҙмәт итәләр.

Ишбулды Сыртлановтың 8 малайы араһында 4-се улы Шаһигардан (1804 йылғы) үҙенең зирәклеге, тырышлығы арҡаһында ҙур дәрәжәләргә ирешә. 17 йәшенән хәрби хеҙмәттә йөрөй. Алты йыл хеҙмәт иткәндән һуң 1828 йылда уға урядник чины бирелә, 1835 йыл хорунжийға күтәрелә, тағы дүрт йылдан сотник, 1842 йылда - яһауыл, һуңынан инде ғәскәри старшина (войсковой старшина - подполковник) дәрәжәһенә күтәрелә. 1835 йылдан алып 1863 йылда кантон идаралығы бөтөрөлгәнсе, йәғни 28 йыл буйы 12-се, 21-се башҡорт кантондары башлығы булып хеҙмәт итә. Хәрби хеҙмәттәре өсөн "1853-1856 йылдарҙағы һуғыш иҫтәлегенә" исемле миҙал менән бүләкләнә.

Шаһигардан кантондың уландары ла атаһының юлынан китә. Өлкән улы Арыҫланбәк (1830 йылғы) 18 йәшенән хәрби хеҙмәттә була. 12-се, 13-сө башҡорт кантондарында хеҙмәт юлын үтә. Зауряд-сотник (хәҙергесә - лейтенант) чинын ала. Аҙаҡ 21-се башҡорт кантоны башлығы ярҙамсыһы булып хеҙмәт итә. 3-сө улы Шаһисолтан (1834 йылғы) Ырымбур ҡалаһындағы кадет корпусында уҡый. Артабан Башҡорт ғәскәрендә хеҙмәт юлын үтә. 1861 йылда 20-се башҡорт кантоны башлығы итеп тәғәйенләнә. Күрһәткән хеҙмәттәре өсөн "1853-1856 йылдарҙағы һуғыш иҫтәлеге" миҙалы менән бүләкләнә, атанан-улға күсәгелешле дворянлыҡ хоҡуғы алыуға ирешә. Уның Бәләбәй өйәҙендә ҙур ғына ер биләмәләре була. Атаһы Шаһигардан менән бергә һыу тирмәне, йылҡы заводы тота. Шаһисолтан Сыртланов губерна һәм өйәҙ түрәләре, кантон башлыҡтары араһында ҙур абруй ҡаҙана.

Сыртлановтар нәҫеленең данын Шаһигардан кантондың иң кесе улы Шаһихәйҙәр (1846 йылғы) тағы ла юғарыраҡ үрҙәргә күтәрә. Ул ағаһы Шаһисолтан кеүек, Ырымбур кадет корпусын тамамлай. Унан һуң туғыҙ йыл буйына Төркөстанда, Сәмәрҡәнд ҡалаһында хеҙмәт итә. Капитан чинында отставкаға сығып, тыуған ягына ҡайта. 1877 йылдан Бәләбәй өйәҙенең һәм Өфө губернаһы земстволарының (урындағы үҙидара органдары) гласный (депутат) һәм мировой судья (халыҡ судъяһы) булып эшләй. 1906, 1907 йылдарҙа Рәсәйҙең 1-се һәм 2-се Дәүләт думаларына Бәләбәй өйәҙе башҡорттарынан депутат итеп һайлана. Ул Иттифаҡ әл-мөслимин, йәғни Рәсәй мосолмандары союзын, Дәүләт думаһында мосолман фракцияһын ойоштороуҙа әүҙем ҡатнаша. Шаһихәйҙәр Сыртланов Санкт-Петербург ҡалаһында Дәүләт думаһы трибунаһына сығып, башҡорт халҡының аҫабалыҡ хоҡуғын яҡлап сығыш яһай. Башҡорттоң ерҙәрен күпләп тартып алыу, кантон осоронда башҡортҡа ҡарата батша хөкүмәтенең үтә лә ғәҙелһеҙ мөнәсәбәте тураһында әсенеп һөйләй: "Господа! Я представитель Уфимской губернии, выбранный тамошними коренными жителями, башкирами. Я желаю сказать кое-что из того, чем этот народ обижен в разное время бывшим правительством. Башкиры приняли подданство России 400 с лишним лет тому назад, - это не завоеванный народ. При принятии их в подданство им было обещано, что не тронут ни земли их, ни имущества, ни религии, ни обычаев, ни быта... Со временем башкир обратили в казачье войско - они участвовали в отечественных войнах и оказали известные заслуги, а затем из казачьего войска, хотя они числились казаками, башкир вызывали на службу не как кавалеристов, а в виде рабочих с подводами, и, как бы в наказание, заставляли их вести каторжный труд. Их трудами выстроили Оренбургскую крепость, а затем срыли ее все степные крепости до самого Сыр-Дарье. Их заставляли возить на верблюдах и лошадях в степные города за 1000 и больше верст, и за все это башкирам платили 3 копейки в день на содержание с лошадью, вследствие этого много лошадей у башкир погибали от голода... Но все-таки еще можно было терпеть до тех пор, пока не начались хищения башкирских земель... ". *(Ш. Сыртланов үҙенең сығышында хөкүмәт тарафынан башҡорт ерҙәре тартып алыныуы башҡорт халҡына ҙур зыян килтереүен һыҙыҡ өҫтөнә ала).*

Шаһихәйҙәр Сыртлановтың улы Ғәлиәскәр ҙә (1875-1912) юғары дәрәжәләргә өлгәшә. Ырымбурҙағы кадет корпусын, Мәскәүҙең Александр хәрби училищеһын, һуңынан Санкт-Петербургтың Хәрби-юридик академияһын тамамлай. Санкт-Петербургта батша ғәли йәнәптәренең Литва лейб-гвардия полкында эскадрон командиры булып хеҙмәт итә. Академияны тамамлағандан һуң, Рәсәй Хәрби министрлығының Баш хәрби-суд идаралығында, һуңынан Санкт-Петербургтың хәрби судында адвокат булып хеҙмәт итә. 1906 йылда подполковник чинында отставкаға сығып, Петербургта адвокат булып эшләй. Бәләбәй өйәҙе башҡорттары уны Рәсәйҙең 3-сө Дәүләт думаһына (1907-1912) депутат итеп һайлай. Рәсәй мосолмандарының, шул иҫәптән башҡорттарҙың, мәнфәғәтен яҡлап Думала әүҙем сығыш яһай. Әйткәндәй, Ғәлиәскәр Сыртланов мосолман депутаттары араһынан Думаның Дәүләт оборонаһы комитеты ағзаһы итеп һайлана. Был уның абруйы тураһында асыҡ һөйләй. Хәрби хеҙмәттән киткәс, Рәсәй империяһының баш ҡалаһы Санкт-Петербургта үҙен талантлы адвокаттарҙың береһе итеп таныта. 1905 йылда рус-япон һуғышында еңелгәндән һуң бөтә ғәйеп вице-адмирал З.П.Рожественский, адмирал Н.И.Небогатов һәм генерал-лейтенант А.М.Стесселгә төшә. Хатта улар өҫтөнән суд эше башлана. Судта ошо генерал, адмиралдарҙы адвокат булараҡ Ғәлиәскәр Сыртланов яҡлап сығыш яһай. Әммә уның ғүмере фажиғәле рәүештә өҙөлә. 1912 йылда Өфөгә ҡайныһы янына ҡунаҡҡа килгән саҡта уны ҡайнағаһы атып үлтерә. Полиция тикшеренеү үткәреп, яңылыш атҡан, тигән һығымта яһай. Мосолмандарҙың хоҡуҡтарын яҡлап сығыш яһаған абруйлы, талантлы адвокатты өнәп бөтмәгәндәр әҙ булмағандыр, шул иҫәптән батша власы ла. Шуға күрә Сыртлановтың үлеме шул уҡ полицияның эше булыуы ла ихтимал.

Шаһихәйҙәр Сыртлановтың Рауил исемле улы подполковник дәрәжәһендә, Беренсе донъя һуғышында полк менән етәкселек итә. 1916 йылда яуҙа һәләк булған, тиҙәр. Йосоп тигәне лә хәрби хеҙмәт юлын һайлай. Офицер дәрәжәһендә була. 1918 йылда Башҡортостан автономияһы өсөн көрәшкән Башҡорт милли армияһында хеҙмәт итә. Зәки Вәлиди уны үҙе саҡыртып ала.

Совет власы осоронда дворян нәҫелдәрен эҙәрлекләү, ҡыҫырыҡлауға ҡарамаҫтан, Сыртлановтар династияһы һүнеп ҡалмай. Был нәҫелдең данын яңы быуын ир-уҙамандары күтәреп сыға. Советтар Союзы Геройы Муллайәр Сыртланов, Башҡортостандың халыҡ, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы, Башҡорт дәүләт драма театры тарихында яҡты эҙ ҡалдырған сәнғәт эшмәкәрҙәренең береһе Рим (ысын исеме Рәхимйән) Сыртланов, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған нефтсеһе, Рәсәйҙең Инженер һәм тау академиялары академигы, байтаҡ йылдар "Башнефть" компанияһының генераль директоры булып эшләгән Ампир Сыртлановтарҙың исемдәре ошо хаҡта һөйләй.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

ХӘТЕРКИТАП



# НАҘҒА ТӨРӨНӨП ҮҪЕҮ...

## көслө итә бит кешене

**Шағирәбеҙ Тамара Ғәниеваның "Ватандаш" журналында баҫылған "Бәхетле булғанмын икән" тигән эссеһын уҡығанда һәр кем, моғайын, үҙенең бала сағын, үҫмер, йәшлек йылдарын хәтеренә алғандыр.**

Һәр иртә һайын ғәзиз әсәйебеҙҙең "Тор, тор, балам, йоҡоң туйғандыр инде", тигән тауышын ишетеп үҫеү әләкмәнә балалар йортонда тәрбиәләнгәндәргә. Дежур тәрбиәсе коридорҙар, бөтә бүлмәләр буйлап ҙур ҡыңғырауын доңғорлатып үтә. Хәтеремдә, ул көндө бухгалтер ағайыбыҙ дежур ине. Ул бүлмәбеҙгә килеп инде лә, ҡыңғырауын доңғорлата башланы, балалар һикерешеп тороп ултырҙы, ә мин, 5-се синыфта ғына уҡыһам да, эске күлдәк кейгән көйө ир кеше алдына барып баҫмаҫ өсөн, одеялыма нығыраҡ уранып, күҙемде йомоп урынымда ята бирәм. Ағай быны күреп, минең карауатым янына килеп, ҡыңғырауын ҡолаҡ төбөмдә доңғорлатты. Мин дә бирешмәйем, йоҡлайым, ишетмәйем, имеш. Йөҙөм дә тып-тыныс. Бухгалтер ағайға кескәй генә ҡыҙыҡайҙың нығыш булыуы оҡшанымы: "А, эта оказывается спящая красавица!" - тине лә, бүлмәбеҙҙән сығып китте. Ул киткәс тә һикереп торҙом. Ҡыҙҙар гөр килешеп көлөштө. Мин дә йылмаям. Кемдең "красавица" булғыһы килмәһен инде.

Тамара Ғәниеваның яҙмаларынан аңлашылыуынса, ул ата-әсә йортонда һөйөүгә, наҙға күмелеп, ҡәҙерле булып үҫкән. Шуға ла үҙ өйөнән айырылып, ситкә уҡырға киткәс, был юҡһыныу, һағыныу хисе уны ғүмер юлы һуҙымында оҙата барған. Ә минең бер кемем дә юҡ ине, шуға ла ундай һағыныу, юҡһыныу хисе кисермәгәнмендер, тим. 6-сы синыфта уҡығанда бер ҡыҙыҡ ваҡиға булды. Мине балалар йортонан ике туған бер ағайым эҙләп тапты. Ул Өфөгә шоферҙар курсына уҡырға килгән икән. Ял көнө ул мине үҙе туҡтаған фатирға ҡунаҡҡа алып барҙы. Тап-таҙа тыныс бүлмә, ап-аҡ ашъяулыҡ ябылған өҫтәл, әле генә бешерелгән һурпа еҫе. Ағайым мине өҫтәл артына ултыртты ла алдыма хуш еҫле аш ҡуйҙы. Мин ул ашты бер ҡалаҡ ҡына ҡаба алдым. Тамағыма бер ҡаты төйөр килеп тығылды ла, күҙҙәремдән йәш аға башланы. Илағанымды күрһәтмәҫ өсөн мин ҡарашымды ситкә төбәнем дә, ҡатып ҡалдым. Ағайым бер ни ҙә аңламай: "Аша, ҡарындаш, аша инде",- тип инәлә. Бер һүҙ ҙә әйтерлек хәлдә түгелмен, тамаҡтағы төйөрҙө йотоп булмай. Шулай ояҡа ҡалып ҡайтып киттем. Был хәл бик сәйер күренеш булғас, уны аҙаҡ иҫкә алмаҫҡа, онотorға тырыштым. Әллә саҡ ҡына аҡыл етешмәйме икән минә, тип тә уйлағайным ул саҡ. Бик күп йылдар үткәс, олоғайғас, ҡапыл ул 12 йәшлек ҡыҙыҡайҙың хәлен аңланым. Аҡылым камил, тик хистәрем генә бик нескә булған икән, тип үҙемде тынысландырҙым. Ҡәҙер күрмәй, тоймай үҫеү сәбәп булған тамағыма төйөр тығылыуына. Ағайым да аңларлыҡ зат булмағандыр. Бүтән килмәне ул минең яныма...

...Ә шағирәнең эссеһын уҡып, ғаиләһендә бәхетле бала булып үҫеүе уны тормошта ауырлыҡтарҙы еңеп йәшәрлек көслө зат иткәндер, тип аңланым. Минең синыфташтарым иһә 1-се һанлы мәктәпкәсә балалар йортон һағынып иҫкә ала. Беҙ ҙә ул йортта бәхетле булғанбыҙ. Беҙ ысын бәхетте - ғаиләлә, ата-әсә янында татыла торған бәхетте белмәйбеҙ шул...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

# XIX быуат башҡорт

## Юҡ, ул быуат вәлидиҙәрҙе

**Тарихсылар тормошто ысынбарлыҡ яһай, тиҙәр. Үткәнен белмәгәндең киләсәге лә булмай, тип әйтәләр. Бик хаҡ һүҙҙәр. Тарих фәндәре докторы, профессор, Башҡорт дәүләт университетының археология, боронғо һәм урта быуат тарихы кафедраһы мөдире, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре Нәҙир Мырҙабай улы ҠОЛБАХТИНдың әңгәмәһен тыңлағанда тап ошо һүҙҙәр иҫкә төшә.**

### Яҙмыш тарихсы итте

Мине тарихҡа яҙмыш алып килде. Сөнки тарих факультетына уҡырға килгәнгә тиклем тарихсы булырым бөтөнләй уйымда ла юҡ ине. Юлдарым урау-урау булды. Мәктәптә уҡығанда, әлбиттә, тарихҡа битараф түгел инем. Ҡырмыҫҡалы районының Шәрипкүл ауылында тыуып үҫтем. Тарих уҡытыусыбыҙ Ленинград институтын тамамлап килгәйне. Мин дәүләт имтиханы биргәндә ул: "Колбахтин, һин бушҡа ваҡыт әрәм итмә, барыбер "бишле"нән кәм белмәйһең", - тип сығарып ебәрҙе.

Атайым ябай колхозсы булды, гәзит-журналды күп уҡыны, ләкин тарихсы булып китеүемдә атайымдың йоғонтоһо булды, тип әйтә алмайым. Мин ике өләсәйем менән үҫтем, әсәйем бик уҡымышлы зат ине. Әсәйем Ҡөрьәнде уҡығанда ундағы һәр бер фразаны тәфсирләй торғайны. Был уның фарсы, ғәрәп телдәрен яҡшы белеүе хаҡында ла һөйләй. Иҫләмәйем, ниндәйҙер бер доғала "Нәҙирем, нәҙирем" тигән һүҙ бар. Әсәйем: "Был, улым, һинең турала, һин Ҡөрьәнгә ингәнһең, һин дин юлына килергә тейешһең, яуап бирергә әҙерһеңме?", тип әйтер ине. Мин 4-5 йәшемдә уҡырға өйрәндем. Мәктәптә уҡыған апайымдың урыҫ телендәге китабынан Египет фараондары тураһында уҡығаным хәтеремдә. Ҡыҫҡаһы, бала сағымда тарихсы булырыма ишаралар булған, тимәк. . Октябрьскийҙа нефть техникумында уҡығанда сәнғәткә ылыҡтым. Етәксем миңә: "Һинең тауышың ике ярым октавалыҡ тенор, спектаклдә комик планда ла, трагик планда ла уйнай алаһың. Һин бәхетеңде сәхнәлә табырһың, моғайын", - тип әйткәйне. Сәнғәткә ылығыуым әсәйемдән килгәндер. Беҙ халыҡ йырсыһы Флүрә Ноғоманова менән өләсәләш туған. Әсәйем "Ашҡаҙар"ҙы бик моңло итеп йырлар ине. Мине уҡырға төшкәнсе мәжлестәргә саҡырып йырлата торғайнылар. Әсәйем миңә: "Йырлауыңды һораһалар, берҙе генә йырла, бик ныҡ һораһалар, икене йырла, артығын йырлама. Нисек кенә матур йырлаһаң да, кешене арытма, йырҙан биҙҙермә",- тип әйтә торғайны. Йәшерәк саҡта башҡарған йырҙарым Башҡортостан радиоһы фондында ла һаҡлана. Унда башҡорт халыҡ йырҙары "Урал", "Сибай", "Илсе Ғайса", "Ҡолой кантон", "Тәфтиләү"бар. Барлыҡ музыка ҡоралдарында ла уйнай беләм, тик бына нисек кенә тырышһам да, ҡурайҙа уйнарға өйрәнә алманым. Күрәһең, унда уйнар өсөн айырыуса һәләт кәрәктер. Ул йылдарҙағы артистарҙың барыһының да биографияларын яттан белдем, улар тураһында гәзит-журнал материалдары, фотоһүрәттәрен йыя торғайным. Материал туплауҙың был ысулы ла тарихсыға хас бит. Шуға күрәлерме, нефть техникумында уҡығанда мине "аяҡлы энциклопедия" тип атап йөрөтәләр. Уҡыуым менән бер рәттән, халыҡ театрында ла спектаклдәрҙә ҡатнашып йөрөнөм. Мәжит Ғафуриҙың "Ҡара йөҙҙәр", Әсхәт Мирзаһитовтың "Утлы өйөрмә", Мостай Кәримдең "Ҡыҙ урлау" спектаклдәрендә уйнаным. Уйнауымды оҡшаттылар, Өфө сәнғәт институтынан килгән кеше мине актер бүлегенә уҡырға саҡырҙы. Тап шул йылда беҙҙә Советтар Союзы буйынса йүнәлтмә менән эшкә тараттылар. Минең өлөшкә Сахалин сыҡты. Актерлыҡҡа уҡырға барырға теләүемде белдергәс: "Беҙ һине артислыҡҡа уҡытмаҡыҡ, тыуған илең ҡайҙа ебәрә, шунда бар",- тип, йүнәлтмә алған еремә барырға ҡуштылар. Нишләргә, Башҡортостандан китке килмәй.

Шул ваҡыт "Башнефть" ойошмаһында эшләүсе таныш башҡорт апайы ярҙамы менән "Аксаковнефть"кә эшкә барып, унда дүрт йыл эшләнем. Шулай, 1966 йылда тарих факультетына килеп ингән саҡта миңә 25, Мәскәүгә аспирантураға барған саҡта 35 йәш ине.

### Толерантлыҡ

Бөгөн Рәсәйҙә һәм бар донъяла толерантлыҡ хаҡында күп һөйләйҙәр. Нимә генә тимә, киләсәктә төрлө милләттәге, төрлө диндәге кешеләрҙең бер дәүләттә, бер илдә, бер ҡитғала, бер донъяла һыйышып, бер-береһен аңлап йәшәүе өсөн кәрәк был төшөнсә, был тойғо. Был йәһәттән Башҡортостанды Рәсәйҙәге иң толерантлы республика тип атайҙар, Владимир Путин хатта уны "тамсыла сағылған Рәсәй" образына ла тиңләне. Тарихи яҡтан ҡарағанда, беҙҙең республикалағы толерантлыҡтың нигеҙендә уның төп халҡы булған башҡорттарҙың бәләгә ҡалған башҡаларҙың хәлен аңлап ҡарау, тәбиғи киң күңеллелеге ята. Башҡорт урыҫын да, татарын да, сыуашын да, марийын да үҙ йортонда ҡабул иткән. Мәҫәлән, бер башҡорт ауылына биш сыуаш йә биш татар ғаиләһе килә икән, ти. Башҡорттар уларға өй һалырға ер күрһәтә. Икенсе йылға бишәүҙең береһе ҡайтып китә лә, тағы ла бишәүҙе эйәртеп килә. Өсөнсө йылына тағы бишәү ҡайтып, илле кешене эйәртеп килә. Өфө провинциаль канцелярия фондын энәһенән-ебенә тиклем тикшереп сығып, XVIII быуатҡа ҡараған бик күп документтарҙы өйрәндем. Ситтәр башҡорт ерҙәрен шулай үҙләштергән: тәүҙә барыһы ла законлы рәүештә башланған да, ун йылдан һуң 10 йортлоҡ башҡорт ауылы янында 50 йортлоҡ сыуаш йә татар ауылы барлыҡҡа килгән. Ситтән килеүселәр: "Беҙгә башҡорттар 10 йыл элек биш ғаиләлек ер биргәйне, хәҙер беҙ күпкә арттыҡ, беҙгә ер кәрәк", - тип губерна канцелярийына хаттар яҙып, өҫтәмә ер бүлеп алыу башлана. Бында ла бер һүҙһеҙ башҡорттоң менталитеты күренә.

Шулай итеп, башҡорт еренең ситтәр тарафынан күпләп үҙләштерелеүендә тәбиғи фактор мөһим роль уйнаған. Мәҫәлән, Белорет заводына урыҫтар 360 мең дисәтинә ер һатып алалар. Был үҙенә күрә бәләкәй бер дәүләттең ере тип әйтерлек. Минең иҫәп буйынса, бер дисәтинә урмандың хаҡы 1,1-ҙән алып 1,001 тингә тиклем төшкән. Был осраҡта башҡорт: "Тик ятҡан урмандан йылына 20 тәңкә алып ятыу ҙа кәсеп", - тип уйлаған. Тәбиғәт байлығының сикһеҙ мул булыуы башҡортто яйлап-яйлап ерһеҙ ҡалдырған да инде. Әлбиттә, бындай хуш күңеллелек һәм тешһеҙлек башҡорттоң тәбиғи менталитеты түгел.

Бөгөн беҙ тарихтан уҡып белгән юлдар һәм ысулдар менән халыҡты яҡлап булмай. Заманы ундай түгел. Бөгөн милләттең хоҡуҡтарын яҡлауҙың иң дөрөҫ юлы - цивилизациялы ысулдар. Беҙгә гуманитар йүнәлештә үҫешкән шәхестәр кәрәк. Әгәр ҙә 90-сы йылдарҙы беҙ үҙаллылыҡ өсөн көрәштең өсөнсө этабы тип алһаҡ, беҙ унда күп нәмәгә өлгәштек һәм ул уңыштарҙы юғалтабыҙ. Үкенескә ҡаршы, беҙҙә толерантлыҡ бер яҡлы ғына. Әгәр ҙә ғәрәп илдәрендә барған сыуалыштар беҙҙең яҡҡа килеп етһә, шартлау булмаҫ тимә. Индустриаль яҡтан үҫешкән Башҡортостан бөгөн урындағы халыҡҡа түгел, Мәскәү һәм Санкт-Петербург олигархтарына эшләй. Ошо буламы инде толерантлыҡ? Киләсәктә еребеҙҙе, телебеҙҙе, динебеҙҙе һаҡлап ҡалыу өсөн беҙгә ғилемле, аҡыллы, киң ҡарашлы юлбашсылар кәрәк. Беҙҙең бурыс - ана шундай шәхестәрҙе тәрбиәләү.

### Башҡорт ышығында...

Башҡорт ихтилалдары осорон тарихсы Ирек Аҡманов халҡыбыҙ тарихының героик осоро тип атай. Петр Беренсе хакимлыҡ иткән саҡта 1704 йылдан алып 1711 йылға тиклем ете йыл буйына шундай армияға ҡаршы тороп ҡара әле. Екатерина Икенсе заманында Рус армияһы донъяның иң көслө армияһы иҫәпләнгән. Шундай армияға ла ҡаршы көрәшеп ҡара. Хәҙер крайҙы өйрәнеүселәр 1773-1775 йылғы һуғышты Крәҫтиәндәр һуғышы түгел, сираттағы башҡорт ихтилалы тип әйтә. Идеологик йәһәттән был һуғышты башҡорт ихтилалы тип атап булмаһа ла, минең иҫәп буйынса, был һуғышта төп көстөң яртыһынан күберәген башҡорт яугирҙары тәшкил иткән. Яу башлыҡтарының да яртыһынан күберәге башҡорт батырҙары. 1773-1775 йылғы күтәрелеш башҡорттар ҡатнашлығындағы иң ҙур хәрәкәт. Шул уҡ ваҡытта XVII, XVIII быуаттарҙағы, был героик осорҙа беҙ аҫабалыҡ хоҡуғын һаҡлап, ирегебеҙҙе, динебеҙҙе, телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе һаҡлап алып ҡалғанбыҙ. Крепостной крәҫтиән хәленә ҡалмағанбыҙ. Шул уҡ ваҡытта башҡорттар араһында йәшәүсе мариҙар үҙҙәренең асылын, йәғни мәжүсилеген һаҡлап алып ҡалған. Улар мариҙар ихтилалы һөҙөмтәһендә түгел, башҡорт ихтилалы ярҙамында милләт булараҡ һаҡланып ҡалған. Аспирант сағымда мин бер материал тапҡайным, үкенескә ҡаршы, уны юғалттым. 3-сө һәм 5-се ревизия материалдары буйынса Ҡаҙан губернаһында 250 мең самаһы мосолман татары, 50 меңләп керәшендәр теркәлгән. 5-се ревизияға күҙ һалһаҡ, ундағы татарҙарҙың күпселеге Ырымбур губернаһына, йәғни беҙҙең араға күсеп бөткән. Тимәк, татарҙарҙың мосолманлығы, асылда, башҡорт ерендә һаҡланып ҡалған. Ә Ҡаҙан губернаһында ҡалғандарҙың күбеһе керәшенгә әйләнеп бөткән. Йәғни татарҙар динен, телен, ғөрәф-ғәҙәттәрен батырҙарса көрәшкән башҡорт араһына ышыҡланып һаҡлап алып ҡалған. Бына шуның өсөн дә татарҙарға ихтилалдар кәрәкмәгән.

Социализм осоронда "берҙәм көрәш", "дөйөм көрәш" хаҡында күп яҙҙыҡ (ҡайһы берәүҙәр һаман да яҙа), әммә һәр бер ихтилал башында башҡортҡа барыһы ла ҡушылған да, карателдәр отряды көсәйһә, барыһы ла ҡасыу яғын ҡараған. Һәм, һәр ваҡыттағыса, һуңынан башҡорттар бер үҙе тороп ҡалған. Батырша яуы ла, 1773-1775 йылғы Крәҫтиәндәр һуғышы ла тап ошо характерҙа. Крәҫтиәндәр һуғышының 3-сө осоронда, дөрөҫөн әйткәндә, башҡорт йәмғиәте эсендә граждандар һуғышы башлана. Икенсе төрлө әйткәндә, Дон казактарына ҡушылып, башҡорт Крәҫтиәндәр һуғышын башлай ҙа, шул һуғышты башҡорт тамамлап ҡуя. Ҡаранай Моратов Пугачев тотолғандан һуң да, Салауат тотолғандан һуң да һуғышып йөрөй.

### Әлибай Мырҙағолов, Ҡасҡын Һамаровтар...

Ғилми хеҙмәтемдә 1773-1775 йылғы Крәҫтиәндәр һуғышында дипломатик эш алып барыусы Әлибай Мырҙағолов менән Ҡасҡын Һамаровты яҡлап сығыш яһаным. Салауат бик йәш, ярһыу батыр, уңды-һулды ҡарамай, ҡылыс болғап яуға әйҙәгән. Ә Нуғай даруғаһы баш старшинаһы Әлибай Мырҙағолов 1774 йылдың август айҙарында: "Батша беҙҙән Мәскәү яғына китте, был ҡан ҡойошто туҡтатығыҙ, көтөп торайыҡ, Бүгәс батша еңерме, Әбей батшамы, иген урыр ваҡыт етте, халыҡҡа иген урырға мөмкинлек бирегеҙ. Быйыл да иген урмаһағыҙ, ҡыш көнө аслыҡтан үлеп бөтәсәкбеҙ... " - тигән оран ташлап, барлыҡ Нуғай юлын йөрөп сыға. Ул был хаҡта Ҡәнзәфәр Усаевҡа хат яҙа, башҡа старшиналарға хәбәр итә. Күреүегеҙсә, Әлибай Мырҙағолов бик алыҫҡа күҙ йүгертеп эш иткән.

Ә Ҡасҡын Һамаров яҙ көнө Татищев крепосы һәм Һаҡмар ҡаласығы эргәһендә генерал Фрейманға килеп, 300 кешелек отряд менән самозванец Пугачевты эҙәрлекләргә рөхсәт һорай. Генерал уға рөхсәт итеп, ҡағыҙ яҙып бирә. Ҡасҡын ошо ҡағыҙҙы тотоп, Тамъян улысына ҡайтып, ғәскәр йыя ла, Пугачевты яҡлап һуғыша башлай. Үҙе Өфөгә "с повинной" кешеһен ебәрә. Һөҙөмтәлә ул Өфө властарын да, генерал Фрейманды ла алдап, уларҙың рәсми рөхсәте менән уларҙың үҙҙәренә ҡаршы ғәскәр туплауға өлгәшә. Ә беҙҙең тарихсылар "Апрель айында Ҡасҡын Һа-

> ***Башҡорт урыҫын да, татарын да, сыуашын да, марийын да үҙ йортонда ҡабул иткән. Мәҫәлән, бер башҡорт ауылына биш сыуаш йә биш татар ғаиләһе килә икән, ти. Башҡорттар уларға өй һалырға ер күрһәтә. Икенсе йылға бишәүҙең береһе ҡайтып китә лә, тағы ла бишәүҙе эйәртеп килә. Өсөнсө йылына тағы бишәү ҡайтып, илле кешене эйәртеп килә. Өфө провинциаль канцелярия фондын энәһенән-ебенә тиклем тикшереп сығып, XVIII быуатҡа ҡараған бик күп документтарҙы өйрәндем. Ситтәр башҡорт ерҙәрен шулай үҙләштергән: тәүҙә барыһы ла законлы рәүештә башланған да, ун йылдан һуң 10 йортлоҡ башҡорт ауылы янында 50 йортлоҡ сыуаш йә татар ауылы барлыҡҡа килгән.***

**✓ Бында хәл аңлашыла: башҡорттарға Башҡортостанды һаҡлар өсөн Рәсәйҙе һаҡларға кәрәк булған. Башҡаларға үҙ ере лә, Рәсәй ҙә кәрәкмәгән. Улар иһә, беҙҙең ергә килеп байып, үрсеп тик ятҡан.**



# ӨСӨН ЮҒАЛҒАНМЫ?

## үҫтереп сығарған...



***XIX быуат мосолман донъяһында иҫке мосолман мәктәбен йәҙитселек мәктәбенә үҙгәртеп ҡороу менән тамамлана. Һөҙөмтәлә был мәктәп нигеҙендә халҡыбыҙҙы автономия яулау өсөн көрәшкә етәкләүсе Әхмәтзәки Вәлиди һыны ҡалҡып килеп сыға. Вәлиди һәм яңыса шарттарҙа көрәште етәкләүсе тотош быуын етәкселәр XIX быуат тәрбиәһенән үҫеп сыға. Тимәк, XIX быуат башҡорт өсөн бушҡа үтмәй. Тик ҡылыс күтәреп сығып, халыҡты ҡырҙырыуҙың мәғәнәһеҙлеген аңлаған атай-олатайҙарыбыҙ ошо юлды һайлай һәм яңылышмай.***

маровтан Өфөгә гәйебен таныуын белдереп кеше килгән, Ҡасҡын һатылған, үҙ халҡына хыянат иткән", тигән һығымта яһай. Беҙгә был йәһәттән тарихыбыҙҙы ныҡлап тикшереп, һәр фактты тәфсирләп өйрәнеп эш итергә кәрәк.

## Күпмегә артҡанбыҙ, күпмегә кәмегәнбеҙ?

XVIII быуат башында башҡорттар 450 мең кеше тәшкил итеп, быуат аҙағында уларҙың һаны 200 меңгә лә етмәгән. Икенсе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы секцияһында яһаған докладымда мин был хәлде "Батшалыҡтың башҡорттарға ҡарата үткәргән геноцид сәйәсәте" тип атаным. Ысынлап та, бер быуат эсендә халыҡтың яртыһынан күберәге ҡырылып бөткәс, был хәлде башҡаса нимә тип атайһың инде? Минең фекер менән риза булмаусылар яныма килеп, быға үҙ мөнәсәбәтен белдерҙе. Документтар һәм ундағы һандар күп нәмә хаҡында һөйләй: тәбиғи үсеште иҫәпкә алмаған хәлдә лә бер быуат эсендә 250 мең башҡорт юҡ ителгән.

XIX быуатҡа килгәндә, 1812 йылғы Ватан һуғышын иҫәпкә алмағанда, башҡорт был быуатта тынып торған кеүек. 1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорттарҙың 28 полк менән ҡатнашыуы шулай уҡ хайран ҡалырлыҡ. 35 йыл элек ирҙәре дарҙарға аҫылып, ҡатындары, бала-сағалары ҡол ителгән, ауылдары яндырылған халыҡ шул үҙен язалаусыны яҡлап һуғышҡа бара. Бында хәл аңлашыла: башҡорттарға Башҡортостанды һаҡлар өсөн Рәсәйҙе һаҡларға кәрәк булған. Башҡаларға үҙ ере лә, Рәсәй ҙә кәрәкмәгән. Улар иһә, беҙҙең ергә килеп байып, үрсеп тик ятҡан.

Шулай ҙа ни өсөн 28 полк төҙөрлөк халыҡ тотош быуат буйына "шымып" ҡалған һуң? Ҡайһы бер урыҫ ғалимдары был хәлде Крәҫтиәндәр һуғышында башҡорттоң ҡанһырауы, яңынан ихтилалға күтәрелерлек хәле ҡалмауы менән аңлатырға теләй. Был дөрөҫ фекер түгел. Берҙән, Екатерина Икенсе 1773-1775 йылғы Крәҫтиәндәр һуғышынан һуң мосолмандарҙы көсләп суҡындырыу сәйәсәтен туҡтата. Батшалыҡтың дәүләт аппараты муллаларҙы, дини етәкселәрҙе тап XIX быуат башында халыҡтан айыра, уларға өҫтөнлөктәр бирә, яҡшы тормош шарттары тыуҙыра башлай. Өфөлә диниә назараты ла халыҡтың рухи етәкселәрен халыҡтан айырыу маҡсатында төҙөлә. Мөфтөйҙөң йөҙө был осраҡта Петербург яғына борола, ә халыҡ юлбашсыһыҙ тороп ҡала. Бер Гусейнов мөфтөйҙөң генә Боҙаяҙ, Атъетәр ауылдары янында 6 мең, әлеге Благовещен ҡалаһы ултырған ерҙә 10 мең дисәтинә ере була. Ябай мосолмандар уға ялланып эшләй.

Беҙ Алдар-Күсем яуҙарын милли хәрәкәт тип әйтергә ҡурҡып, феодализмға ҡаршы күтәрелеш тип атау яғындабыҙ. Ә бит тик Крәҫтиәндәр һуғышында ғына айырым башҡорт яу башлыҡтары рәсми ғәскәри дәрәжәгә күтәрелә, ә уға тиклемге ихтилалдарҙа етәкселәр барыһы ла старшиналар, дини руханиҙар булған. Кантон системаһы индерелгәс, уларға офицер званиелары, дворян титулдары бирелеп, ихтилал етәкселәре халҡынан айырыла. XIX быуатта башҡорттарҙың "шымып" ҡалыуының сере бына ҡайҙа ята. Был быуатта башҡорт ҡанһырамаған, ул бары үҙенең юлбашсыларын һәм идеологтарын юғалтҡан.

Шулай ҙа XIX быуат беҙҙең халыҡ өсөн бушҡа үткән быуат булған тип әйтә алабыҙмы? Юҡ, әлбиттә. Яңыраҡ беҙҙә бер аспирант "Башҡортостанда XIX быуат аҙағында, XX быуат башында мосолман мәктәбе реформаһы" тигән темаға диссертация яҡланы. Бына шул хеҙмәттә беҙ халҡыбыҙ өсөн "юғалған" тип иҫәпләнгән быуаттың асылын аңлайбыҙ ҙа инде. XIX быуатта Башҡортостанда һәм Ҡаҙағстанда нығынғас, Рәсәй батшалығы үҙенең төп иғтибарын Урта Азияға һәм башҡа мосолман илдәренә йүнәлтеп, геосәйәсәтен киң масштабта үткәрергә тотона. Был осорҙа беҙҙең атай-олатайҙар Салауат кеүек ҡылыс күтәреп сапмай, бөтә мосолман донъяһы менән бер байраҡ аҫтында көрәшкә әҙерләнә. Шуның өсөн дә башҡорт милләтле Аҡмулланы башҡорттарҙан тыш, татарҙар ҙа, ҡаҙаҡтар ҙа үҙҙәренең шағиры тип иҫәпләй.

Шулай итеп, XIX быуат мосолман донъяһында иҫке мосолман мәктәбен йәҙитселек мәктәбенә үҙгәртеп ҡороу менән тамамлана. Һөҙөмтәлә был мәктәп нигеҙендә халҡыбыҙҙы автономия яулау өсөн көрәшкә етәкләүсе Әхмәтзәки Вәлиди һыны ҡалҡып килеп сыға. Вәлиди һәм яңыса шарттарҙа көрәште етәкләүсе тотош быуын етәкселәр XIX быуат тәрбиәһенән үҫеп сыға. Тимәк, XIX быуат башҡорт өсөн бушҡа үтмәй. Тик ҡылыс күтәреп сығып, халыҡты ҡырҙырыуҙың мәғәнәһеҙлеген аңлаған атай-олатайҙарыбыҙ ошо юлды һайлай һәм яңылышмай.

Милли хәрәкәттең яңыса балҡыуы XX быуат башына тура килә. Был балҡыштың бер сәбәбе ул саҡтағы батша Рәсәйендәге социаль-сәйәси шарттарға бәйле булһа, икенсеһе үткән быуат Зәйнулла ишан Рәсүлев, Ғабдулла ишан Сәиди, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев, Мифтахетдин Аҡмулла, Шәмсетдин Зәки кеүек күп һанлы башҡорт руханиҙарының һәм мәғрифәтселәренең милли хәрәкәт етәкселәрен әҙерләүенә бәйле.

Һөҙөмтәлә автономия ла яулана, әммә үткән быуаттарҙағы ихтилалдарҙағы һымаҡ башҡорттар тағы ла атҡа атлана, үҙенең ғәскәрен төҙөй һәм ун йылдан ашыу ваҡыт эсендә 1 миллион 100 мең кешеһен юғалта. 1917 йылдың йәйендә Ваҡытлы хөкүмәт халыҡтың иҫәбен ала. Башҡорттар ул саҡта 1 миллион 700 мең кешене тәшкил итә. Ә 1927 йылда Совет власы үткәргән халыҡ иҫәбен алыуҙа башҡорттар 600 мең кешегә тороп ҡала. Беҙ башта "юғалған" тип иҫәпләнгән XIX быуатта милләтебеҙ 1 миллион 500 мең кешегә артҡан.

## Ете ҡат үлсәп...

Совет осоронда фәндә цензура көслө булды. Яҙырға ярамаған нәмәләр бигерәк күп ине. Хәҙер килеп киң билдәлелек шарттарында мөмкинлектәр бирелгәйне, кем нимә хаҡында нисек теләй, шулай яҙа башланы. Иҡтисади көрсөк хәҙерге йәш ғалимдарҙың мөмкинлектәрен ныҡ сикләне, уларға донъяның башҡа архивтарына барыр өсөн командировка түләнмәй. Мин, мәҫәлән, күп аспиранттарымды үҙемдең иҫәптән Мәскәүгә, Пермгә, Екатеринбургҡа командировкаға ебәрәм. Шулай итеп, кандидатлыҡ диссертацияһын күптәр үҙәк архивтарҙың нимә икәнен дә белмәйенсә яҙа. Мин шулай иҫәпләйем: фәндә ниндәйҙер бер фекер әйтер өсөн бер түгел, ә бер нисә сығанаҡ, документ, статистик материал өйрәнеп, шуларҙы сағыштырып сығырға кәрәк. Юғиһә, бер ғалим шулай һүҙ һөйләй: йәнәһе, XIX быуатта рус армияһында милли айырма булмаған. Баҡтиһәң, офицер булып хеҙмәт итеүсе бер урыҫ офицерының ҡатыны ирен ташлап башҡорт офицерына кейәүгә сыға. Ошо берҙән-бер осраҡтан сығып, тарихсы дөйөмләштереү яһай. Был юл менән тарих яҙып буламы инде? Сөнки тотош быуатҡа бөтә армияға бер генә тапҡыр булған хәл-ваҡиға объектив факт була алмай. Үкенескә ҡаршы, йәш ғалимдарҙың хеҙмәтендә ошоға оҡшаш иҫбатлауҙар йыш осрай. Халҡыбыҙ юҡҡа ғына "Ете ҡат үлсәп, бер ҡат киҫ", тимәгән.

## Фаразлау - маҡсат ҡуйыу

1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышын өйрәнгән саҡта мин, нишләптер, Ҡаранай Моратов Алдар батыр Иҫәкәевтың ейәне булырға тейеш, тип фараз иткәйнем. Сөнки 1730 йылғы ихтилалда Алдар Морат улының ҡатнашыуы билдәле. Йәштәрен самалап ҡарағанда ла, Ҡаранайҙың Мораттың улы булыуы ҡуҙаллана ине. Был фаразымды дәлилләр өсөн документтар эҙләп ҡараным, Раил Кузеевҡа ла мөрәжәғәт иттем, әммә иҫбатларлыҡ дәлил таба алманым. Әле килеп, ғалим Салауат Таймаҫов шәжәрәләрҙе тикшереп, Ҡаранай Моратовтың Морат Алдаровтың улы, Алдар батырҙың ейәне икәнлеген иҫбат итте.

Шунан һуң мин Рәсәй Үҙәк архивында Нарынбай атлы полковник хаҡында берҙән-бер документ таптым. Нарынбай ҡыш буйына Орск ҡәлғәһен ҡамап тота. Генерал Станиславский етәкләгән 2 меңлек батша ғәскәре бер нәмә лә эшләй алмай, ҡәлғәлә Пугачев ҡулға алынғанға тиклем бикләнеп ятырға мәжбүр була. Нарынбай шунан һуң ҡайҙалыр юғала. Һуңынан пугачевсыларҙы язаға тарттырған тикшереү комиссияларында ла уның исеме юҡ. Мин шундай фараз ҡылдым: уның Орскиҙа булыуына, Пугачев менән йыш осрашыуына ҡарағанда, ул түңгәүер ырыуы башҡорто булырға тейеш. Пугачев ғәскәре ҡыйратылғандан һуң, күрәһең, ул тынысланғандыр, тип уйланым. Өс йыл элек Өфөнөң 136-сы башҡорт лицейында беренсе синыф уҡыусыларыны "Шәжәрә байрамы"н үткәрҙеләр. Ейәнем ул синыфта уҡығас, байрамға мин дә барҙым. Шунда бер ҡатын шәжәрәһе тарихы буйынса сығыш яһап, үҙенең түңгәүер ырыуы, ҡартатаһы Пугачев полковнигы Нарынбай хаҡында мәғлүмәт еткерҙе. Нарынбайҙың атаһы бик бай кеше булып, Пугачев ҡыйратылғандан һуң ул урындағы властарҙы саҡырып һыйлап, күп итеп мал биреп, улы Нарынбайҙы язалауҙан алып ҡалған икән. Шулай итеп, минең ҡасандыр яһаған фаразым шәжәрә материалдары, документтар менән килеп расланып ҡуйҙы.

Өсөнсө фаразым: Төркмән Йәнсәйетов атлы бөрйән ырыуы старшинаһы хаҡында. Мин төрлө документтарҙы өйрәнеп, Крәҫтиәндәр һуғышы яу башлығы булған Төркмән батыр атылмаған да, аҫылмаған да, моғайын, XIX быуатта ла йәшәгәндер, тип фаразлағайным. Бер ваҡыт миңә Әхтәр Боҫҡонов: "Нәҙир ағай, һин бит минең олатайымды тапҡанһың, миндә уның хаҡында 1810 йылғы документтар бар", - тип, минең фаразды расланы.

Тағы бер фаразым Яйыҡ казактары тураһында. Уларҙы һәр ваҡыт урыҫтарға бәйләнеләр, ә мин бындай иҫбатлауға шикләнеп ҡарай торғайным. Әле тарихсы Владимир Иванов Ырымбур өлкәһендәге казак станицаларын өйрәнеп, Яйыҡ казактарының мосолман сығышлы булыуын раҫланы. Уларҙың араһында башҡорттар ҙа бар. Үҙем иһә Яйыҡ казагы башҡорт Изеүкәй Байметов хаҡында документтар таптым.

Ғөмүмән, фаразлау булмайынса, тарих фәнен алға алып барып булмайҙыр ул. Фаразлаған саҡта ғалим үҙенә маҡсат ҡуя һәм шул фаразын дәлилләр өсөн ғилми эшен башлай. Маҡсат ҡуйыу - үҙе фаразлау ул.

## ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Тарихи фактарға ҡарата ошондай һаҡсыл һәм үҙенсәлекле ҡарашлы ғалим Нәҙир Ҡолбахтинға ошо көндәрҙә 70 йәш тула. Ошо унайҙан уға шундай һүҙҙәр әйтке килә: "Тарихҡа юлығыҙ урау-урау булһа ла, үҙ юлығыҙҙы, тормоштағы тәғәйен үҙ урынығыҙҙы тапҡанһығыҙ, Нәҙир Мырҙабай улы. Сөнки һеҙ үҙегеҙҙең хеҙмәтегеҙ менән мендәрсә милләттәшебеҙҙең тарихҡа күҙен асаһығыҙ, уларҙы киләсәкле итәһегеҙ. Юбилейығыҙ мөбәрәк булһын!"**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**

Элекке колхоздың ҡаҙанлығын был малайҙар - Нур менән Алик йәйгеһен үк үҙ "штаб"тарына әйләндереп алырға йөрөй ине. Һин дә мин һәйбәт кенә эшләп, идараны, мәктәпте, магазинды, гараждарҙы йылытып, уларға йән өрөп торған ҡаҙанлыҡ үҙгәртеп ҡороу касафатын күтәрә алманы. Әллә аяуһыҙ замана елдәре һүндерҙе уның утын, әллә түрә-ғара һүнергә ярҙам итте. Таш-тимерҙән ҡоролған булһа ла, әллә нисәмә кеше һыйынырлыҡ йылы биналарҙың "йөрәге" бит ул, ә һәйбәт кенә эшләп торған йөрәк үҙен үҙе юҡ итәме һуң? Оҙон йәйҙә ҡоролмаларын, мейестәрен барлап, төҙәтеп ҡараусы ла булмағас, көҙгөһөн берике кеше килеп, әллә нимәләрен туҡмаштырып, әллә нимәләрен ҡыйратыпмы, төҙәтепме йөрөгәнен күргән күрше-тирә, ана эшләп китә, бына төтәй башлай, исмаһам, ауылға ҡот инер тип өмөтләнһә лә, төтәмәне лә, һүнеп барған ауылға йәм дә өҫтәмәне. Ҡара көҙгә хәтлем, кешеләргә хәтере ҡалған һымаҡ, ҡараҫҡы кеүек тора бирҙе. Тәүге ҡар яуған көндәрҙең береһендә бер нисә машинала ҡупшы кейенгән ирҙамандар килеп төштө лә, ҡаҙанлыҡ бинаһы эргәһендә, эсенә инергәме, юҡмы, тигән кеүек, бер сәғәт тирәһе гәпләшеп тапанып торҙолар. Ниһәйәт, "котолдоҡ" тигәндәй, тараҡандар һымаҡ йыбырлашып, машиналарының тажый ҡорһағына һикерештеләр ҙә, ишектәрен шапшоп яба һалып, был тирәнән тайыу ягын ҡаранылар. Ҡаҙанлыҡ эсенә инергә ҡыймауҙары ботинкаларын йә затлы кейемдәрен бысратыуҙан ҡурҡыу булһа, ашыҡ-бошоҡ ҡасыуҙарының сәбәбе - кемгә ҡаршылыр хыянат йә ниндәйҙер уғрылыҡ ҡылыуҙарын таныу булғандыр.

Ойоп барған ауыл тормошонда яңы ҡыҙыҡ хәл-ваҡиғаларға һыуһаған малайҙар, малайҙар ғына түгел, хатта һерәйешеп торған өлкәндәр ҙә, ышаныстары аҡланыуына, ҡаҙанлыҡтың йүнәтелеренә төңөлөп, юҡ булдылар. Өлкәнерәк малайҙар, ирҙәр таралғас, улар баҫып торған урынды килеп байҡап сығырға йыбанманы: ҡаҙанлыҡ тирәһен тыштан урап сыҡты, ҡыҙыҡ бер нәмә лә тапмағас, эсенә инеп тикшеренде, ләкин уларҙың сос иғтибарын йәлеп итерлек бер генә үҙгәреш тә күренмәне. Тышта бер урында ата ҡаҙ һымаҡ тапанып торған ирҙәрҙән аяҡ эҙҙәре менән тәмәке төпсөктәре генә ҡалған. Ҡайһы бер малайҙарға уныһы ла хәтәр шәп булды, ауыл ирҙәре тәмәке тартҡан ерҙәрҙә күптән инде быының кеүек затлы һәм оҙон төпсөктәр табылғаны юҡ ине. Быларҙыҡыларҙың ауыҙға ҡапҡан остары төрлө төҫтә, яҙыуҙары алтын ялатып яҙылған кеүек. Тәмәке төпсөктәренә ҡарап ҡына ла ауылға "ҙур" ағайҙар килгәнен белергә була ине. Малайҙар бер нәмәгә аптыранды: анау хәтлем ерҙән күмәкләп йыйылышып тороп килгән өлкән кешеләр ниңә, исмаһам, ҡаҙанлыҡтың эсенә инеп ҡарап сыҡманы икән? Ғәжәп! Малайҙар уйлауынса, был - ҡунаҡҡа барып ишек төбөнән боролоп киткән кеүек, йә ауырыу эргәһенә хәл белергә барып уның янына инмәгән дә кеүек килеп сыға ла ҡуя. Аңламаҫһың был өлкәндәрҙе: йыйылышҡа барып, сәхнә артында йә эскәмйәләр аҫтында йәшенеп кенә ятып тыңлаһаң, райондан килгән түрәләр хәтәр аҡыллы хәбәр һөйләй, өлкәндәр уларҙы тын да алмай, ауыҙҙарын асып, иҫтәре китеп ултыра. Үҙҙәренә һүҙ бирһәләр, ыҡ-мыҡ итеүҙән башҡаға эшкинмәйҙәр, ә түрәләр ҡайтып бөткәс, тышҡа сығалар ҙа, тегеләрҙе үсекләп, әрләп үҙҙәре ғәләмәт аҡыллы була ла китәләр. Хәтәр ҡыҙыҡ был өлкәндәрҙең ҡылыҡтары.

Был хәлдән һуң берәй үҙгәреш булһа, күрмәй ҡалып ҡуймайым, тигән малайҙар ҡаҙанлыҡ тирәһенә көнөнә әллә нисә тапҡыр килеп әйләнеүҙе үҙҙәренә бер кәсепкә әйләндерҙе. Түбәнге ос, үрге ос малайҙары ла көнөнә бер нисә тапҡыр килеп ураны. Көндәр, аҙналар үтте, ләкин был тирәлә бер нәмә лә үҙгәрмәне. Дөрөҫөн әйткәндә, яҡшы яҡҡа үҙгәрмәне. Кемдәрҙер килеп ишектәрен шар асып китә, тышта торба, ҡалай киҫәге ятып ҡала. Тәүҙә эскә инергә ҡыймаған Нур менән Алик рөхсәтһеҙ ундай ерҙәргә инергә ярамағанлығын бәләкәй саҡтан белгәстәре, ҡыҙыҡһыныуҙан табандары ҡысынһа ла, эскә инеп тикшерә алманы. Әлбиттә, улар яйлап ҡына батырайҙы, тәүҙә муйындарын һоноп, ишек ярығынан ғына ҡарап та, ҡараңғыла бер нәмә лә айыра алмағас, бер-ике көндән, ҡурҡа-ҡурҡа ғына булһа ла, тупһаны ашаҡларға баҙнат итте. Бергилкем ишек төбөндә тапанып торҙолар ҙа, бер-береһен этеслэй-төрткөсләй дәртләндереп төпкәрәк үттеләр. Ҡәһәр һуҡҡыры, ҡыҙыҡһыныу ҡорто эсте тишеп алып бара бит, ҡалайтһындар. Ҡаҙанлыҡты эстән байҡап сыҡтылар. Иртәгәһенә, унан һуң да килеп йөрөнөләр. Бер инеп өйрәнгәс, үҙҙәренең ҡараңғы һарайҙарына ингән кеүек иркен йөрөргә күнектеләр. Хәҙер инеп ҡарап ҡына сығыу түгел, бөтә мөйөш-һәйешен, тишек-тошоғон төпсөнөп тикшереп, һәр кәкре-бөкөрө тимер-томорон, таш, кирбесен һәрмәп, ҡапшап сыҡтылар, әйтерһең уларға ҡаҙанлыҡтың ауырыуын асыҡлап, терелтеү сараларын табырға ҡушылған тип уйларһың. Эйе, малайҙарҙың өлкән ағайҙар кеүек белеме лә, тормош тәжрибәләре лә юҡ, берәй ҡарар ҡабул итер өсөн уларға үҙ маңлайҙарын төкөп, ҡулдарын сыйҙырып, саң, тупраҡ йотоп өйрәнергә тура килә. Ләкин улар һәр хәлде төбөнә төшөп, урынына еткереп белгәс кенә ҡарар ҡабул итә һәм уларҙың ҡарарҙары һәр ваҡыт ғәҙел була. Малайҙар эште ары-бире, ашыҡ-бошоҡ хәл итмәй. Шулайтып, ҡаҙанлыҡтың әүәлге халәтен асыҡлап йөрөгән арала улар эстәге һәр бер үҙгәреште күңелдәренән кисерҙе. Күрәһең, ҡаҙанлыҡҡа сығарылған хөкөмдө белгән кешеләр, ипләп кенә үҙҙәренә кәрәк нәмәләрҙе барлап, һәмсеп йөрөйҙәрҙер инде. Сөнки көн һайын йә бер тимерен аҡтарып алып китәләр, йә бороп, ҡупарып алған бер ялтыр нәмәнең урынында, һурып ташланған теш төбө кеүек, буш тишек ыржайып тороп ҡала...

Бурҙар! Бурҙар йөрөй, шик юҡ! Ошоно аңлауы малайҙар өсөн асыш булды. Хәҙер улар бында ҡотороп та, башҡа эштәре, кәсептәре булмағандан да түгел, ә шул бурҙарҙы фашлар өсөн йөрөй. Улар хәҙер разведчиктар! Әлбиттә, бер кем дә бойорманы, ләкин улар үҙҙәренең ауылдаштары өсөн изге эш эшләүенә шикләнмәне лә. Эштәре уңышлы тамамланһа, бәлки, уларға берәй бүләк тотторорҙар, тигән өмөт тә уянып ҡуйҙы. Үҙҙәренең яуаплы, хәтәр эш башлауын аңлауҙарына, берҙән, ғорурланһалар, икенсенән, ҡобаралары осто. Улар көн һайын ошонда сыуалышалар бит, уларҙы күптәр был тирәлә күргәне бар. Юғалған нәмәләрҙе уларҙан таптырһалар? Атайҙары белеп ҡалһа? Әгәр бурҙар быларҙың ниәтен һиҙеп ҡалһа? Килгәндәрен һағалап тороп, муйындарын бороп, берәй тишеккә тығып китмәҫтәр тимә! Бөттө баш, ҡалды муйын һерәйеп! Ошо сетерекле хәлдәрен аңлаған көндө малайҙар торған ерҙәренән арттарына ла ҡарамай өйҙәренә сапты. Бәләһенән баш-аяҡ! Антымшинтымдарын ҡайтып еткәнсе ҡабатлағандарҙыр, бахырҙар. Иртәгәнән был яҡҡа аяҡ баҫыу юҡ!

Эйе, шулайтмаһалар ярар ине! Улар - малайҙар бит! Уларға бөтәһе лә ҡыҙыҡ! Ҡурҡынысыраҡ, хәүефлерәк, серлерәк булған һайын ҡыҙығыраҡ! Бөтә йәндәрен ылыҡтырып алған нәмәнән нисек инде анһат ҡына баш тартһындар? Бер нисә көндән бөтәһе лә элекке хәленә ҡайтты барыбер. "Штаб"тары элекке серле, шомло төйәккә әйләнде. Үҙҙәре уйлап сығарған мажаралы уйындары дауам итте.

Әле мәктәпкә лә бармаған, сәпсим бәләкәй генә саҡтарында, аталарына эйәреп ошо ҡаҙанлыҡҡа килә торғайныҡтар. Клубтар ябылып бөтөп, кино күрһәтмәгәс, әртистәр килмәгәс, ҡышҡы һыуыҡтарҙа кешеләр ҡайҙа барып аралашһын, шул бер йылы урынға йыйылалар. Ирҙәр ошонда йыйылышып, ябай әңгәмә ыңғайында кәрт һуға. Уйнаған уйындары - "очко" булды. Бер ваҡыт аҡсаға уйнай башланылар. Уйнаған, откан, отолған аҡсалары шул бер-ике-өс тиндәрҙән генә торғандыр. Иң ҙур отоштары, күп тигәндә, бер ҡап тәмәкегә еткәндер. Икенсе килгәндә хәйләкәр ағайҙар, тәмәкеләре юҡҡа һылтанып, үткәндә откан кешенең тәмәкеһен тартырға тырышты, шулайтып, отолоштарын кире ҡайтаралар ине. Тәүге ҡарашҡа ябай, бер ҡатлы булып күренгән ауыл кешеһен анһат ҡына алдармын йә отормон тимә! Уның күңелендә әллә ниндәй аҡыллы баштарҙың уйына ла килмәгән уй-фекер, кисерештәр ҡайнай. Эш аҡсала ла, ҙур отошта ла түгел, эш - ғәмәлдә! Ошонда килеп күрешеп, һөйләшеп, күңел бушатып, яңылыҡтар ишетеп, күрше-күлән, иптәш-ҡорҙаштарҙың кәйеф-хәлдәрен белешеү үҙе бер йыуаныс.

Ҡайһы бер хәйләкәр бисәләр уландарын ҡотортоп, ирҙәренә эйәртеп ебәрә: улы эргәһендә булһа, атай кеше теләһә нимә менән булышмаҫ, донъяһын онотоп йөрөмәй, ваҡытында өйгә ҡайтыр, тип өмөтләнәләр, һәм дөрөҫ эшләйҙәр! Эйәреп килгән балаһын атаһы үҙенең артындағы һәндерәгә ултыртып ҡуя ла, кәсебенә керешә.

Малайҙар шул килеп йөрөүҙәрендә үк аталары үҙ кәсептәре менән мәшғүл булған арала бындағы бөтә тишек-тошоҡто мүкәйләп, тимер-томорҙо һәрмәп, соҡоноп тикшереп сыҡҡайны инде. Ялап ҡына ҡарамағандарҙыр. Шуға күрә бындағы серле мөхиттең айырым еҫе, сәйер һауаһы уларға яҡшы таныш.

Бурҙар нимә уйлағандыр, ә малайҙар ярымҡараңғы бинаға килеп ингәс тә үҙҙәрен серле донъяға күскән кеүек хис итте һәм килгән һайын яңы мажара, яңы мөғжизә көттө. Килеп йөрөй торғас, бындағы шарттарға, бындағы мөхиткә ҡәҙимге өйрәнеп, ҡайһы бер тишек-тошоҡтарына ҡараңғыла һәрмәнеп барып етергә лә күнектеләр, ҡайҙа нимә торғанын, нимә ятҡанын, уларҙы нисек ашаҡлап, урап йә шыуышып үтергә икәнен ятлап бөттөләр. Ҡәҙимгесә килеп йөрөргә ғәҙәтләнгәйнеләр, бер хәл ҡоттарын алды малайҙарҙың һәм ҡабат был урынға килеп йөрөмәҫлек итте...

Бер көндө ҡаҙанлыҡҡа килеп инеп, төйәктәрен байҡап сыҡтылар ҙа, бөтәһе лә әүәлгесә икәненә инанғас, тынысланып, ғәҙәттәгесә һәр кеме үҙ "эше" менән мәшғүл булды. "Шылт" итеп тимергә тимер һуҡҡан тауышҡа, ҡапыл тыштан төшкән яҡтыға һиҫкәнеп шып туҡтанылар, сөнки был улар сығарған тауышҡа ла, улар өйрәнгән яҡтылыҡҡа ла оҡшамаған. Әйтер һүҙҙәре телдәре осонда эленеп ҡалды, ҡулдары тотҡан нәмәләренә сат йәбеште, күҙҙәре ҡамашты, ҡолаҡтары ослайғандай булды. Торған ерҙәрендә, йомрандар һымаҡ, һерәйешеп ҡаттылар. Ул хәлдә күпме булғандарҙыр, әммә үҙҙәрен һаҡлау рефлексы ҡатҡан аяҡтарын етеҙ генә хәрәкәткә килтерҙе һәм аңдары нимәләр уйлап өлгөрөр-өлгөрмәҫтән, ниндәйҙер эске пружина тәндәрен үҙҙәре генә белгән иң хәүефһеҙ, иң уңайлы урынға ташланы. Эйе, ташланы, сөнки был хәрәкәттәре уйһыҙ, маҡсатһыҙ, ләкин тоғро һәм етеҙ эшләнде: күҙ асып йомған арала икеһе ике ҡаҙанлыҡ аҫтындағы "ояларында" ине. Унда иң ҡараңғы, иң ышыҡ урындары бар икәнен икәүһе генә белә. Тишектәренә инеп ятҡас ҡына йөрәктәре дарһылдауын ишетте улар. Тыштан ингәндәр ишетмәһен тип, устары менән түштәрен ҡаплаған булдылар.

Тәү ҡарауға ябай ғына күренеш ҡапыл шул хәтлем көсөргәнешле хәлгә әүерелер тип уйламаҫһың. Тыныс ҡына уйнап йөрөгән кеүек булһалар ҙа, эстән йән, аң көсөргәнеше тойған булғандар икән. Күпме ваҡыт үткәндер, бәлки, бер, ике секунд, бәлки, күберәктер, башҡа тауыш сыҡманы. Тағы ла тып-тын, яңы ғына йәнде тертләтерлек хәл булмаған да кеүек. Юҡ! Ана, ана, шыбырлашҡан тауыш ишетелә. Береһенең тауышы нәҙегерәк, ҡатын-ҡыҙ ахырыһы. Былар нимәнән ҡурҡа, ниңә бышылдашып, шыбырлашып ҡына һөйләшәләр? Улар ҙа тыйылған кәсептә йөрөйҙәрме? Әллә бурҙармы? Бурҙар көндөҙ бында нимә ҡараһын? Уғрылыҡҡа кеше төндә генә йөрөй. Улай тиһәң, көҙгө көндәр ҡыҫҡа ғына, тышта был мәлдә күҙ бәйләнерлек ҡараңғылыр ҙа инде... Былай ғына ингән кеше ҡараҡ һымаҡ ҡыланмаҫ ине. Инер ҙә, кәрәген ҡарар ҙа сығып китер ине. Кәрәген эҙләһә, ишектәрҙе шар асыр йә тәҙрәләге таҡталарҙы ҡайырып ташлар ине. Юҡ! Былар шыш-быш килеп, нимәлер эсә башланылар.

- Туҡта, ашыҡма! Исмаһам, ишегеңде сырма йә терәт, кеше килеп инһә...

- Хәҙер, берәй нәмә табып алайым да... Эй, инәң башы... - Берәй ерен төкөнөмө шул береһе, әллә нимәгә һуҡранды, шаптырлап йөрөп әллә нимәләр эшләне, - кил, ошонда уңайлыраҡ булыр...

- Ҡайҙа шул тиклем ҡабаланаһың, тын алырға ирек бир. Ҡалай ҡараңғы... - тине нәҙек тауышлыһы.

- Хәҙер күҙҙәр өйрәнә ул...

- Бөтәһен дә беләһең, килгәнең бармы әллә?

- Беҙҙең өсөн ҡараңғы булыуы хәйерлерәк, хе-хе-хе...

- Берәү килеп инһә, көлкөң яңырыр әле.

- Кем йөрөһөн был ташландыҡ ерҙә. Быны ысҡындырайыҡ...- ҡыштырлап әллә нимәлә соҡондолар, ишетелер-ишетелмәҫ әллә нимә һөйләнделәр.

- Улайтма, онтайһың бит!

- Ярай, бәлә һалма...

- Тарт, тарт, эйе, шул яҡҡа... Уй, Аллам, ошоға тиклем өйрәнмәгәс... - Ҡара һин уларҙы, вис кәрәк нәмәләрен алып килгәндәр. Нимәне ысҡындыралар икән?

- Ҡайҙан бөтәһен белеп бөтәһең? Яңынан-яңыны уйлап сығарып ҡына торалар. Үҙең ысҡындыр, шәп булғас...

- Ҡана, үҙем... Мә, билдәле ергә һал, аҙаҡтан табырлыҡ булһын...

Әһә, бурҙар, точно - бурҙар! Ишекте эстән бикләнеләр ҙә, нимәлер эҙләй башланылар. Нимәне урларға йөрөйҙәр икән? Айһай, бик ҡиммәтле нәмәне сәлдерергә уйлайҙарҙыр, юҡ-бар өсөн был хәтлем һағайып, һаҡланмаҫтар ине. Әгәр ҙә бурлыҡтарының шаһиттары бар икәнен һиҙеп ҡалһалар? Бөттө баш, ҡалды муйын һерәйеп! Ошо ятҡан тишектәрендә дөмөктөрөп китмәҫтәр тимә, эт менән дә эҙләп таба алмаҫтар. Сараһыҙҙан яуыз енә-






Урал МОСТАФИН

# БУРҘАР

(Хикәйә)

✓ *Ул хәтлем күп урларлыҡ нимә бар икән ул тирәлә? Мажаралы китаптарҙағы һымаҡ, стенаға йәшерелгәнме, әллә шул тәңгәлдә ергә күмелгәнме икән? Үҙҙәренә етерлеген алып, ҡалғанын кире йәшерҙеләрме? Күрергә кәрәк ине…*



йөттең шаһиты буласаҡтарын уйлап, малайҙарҙың ҡото үксәләренә китте, ирендәре дерелдәп, тын алырға ла ҡурҡты улар. Эләктеләр бит ҡотороп йөрөй торғас мажараға. Атай, әсәйҙе тыңлап, өйҙә генә ултырһалар, ни була инде. Юғалһалар, атай, әсәйҙәре ҡайғырышып илар, арыяҡ малайҙар донъя иркенәйҙе тип ҡыуаныр, илаҡ ҡыҙҙар илаған булыр инде...

- Шыл быңдараҡ. Эйе, эйе, ошонда унайлыраҡ...

- Эйе, хатта уңайлы! Тапҡанһың урын: дөм ҡараңғы, бысраҡ...

- Башҡа ышаныслыраҡ урының бармы? Үҙең, йоҙаҡ тутығып бөтә инде, тип теңкәне ҡоротаһың, үҙең һөйләнәһең... Һәйбәт тә инде!

- Юхаланма! Ындағы ҡоромға шайтандар һымаҡ буянып сығырбыҙ әле, - тип һаман һатыулышыуын белде нәҙек тауыш. - Оҡшамағас, ул яуызға ниңә эйәреп килде икән? Ҡайт та кит, шәп булғас, бер үҙе урлашып ҡараһын! Бер үҙенең генә хәленән килер эш түгелдер шул, улай булмаһа, табышы менән бүлешер кешеһен эйәртеп йөрөмәҫ ине. Бурҙы табышынан башҡа нимә йөрөтһөн?

- Әй, йылап торорға ваҡыт барҙыр шул...

- Ашыҡһаң, бар ҡайт!

- Ярай инде, үсекмә. Бергә килдек, бергә ҡайтырбыҙ...

- У-ух-ты, асҡысың шәп икән! Эшкинә-ә-ә...

- Шәп бумай һуң. Эшкинмәгән нәмә менән әллә нимә ҡыйратырһың... Хәҙер йоҙаҡты майлап тороп асабыҙ ҙа, бөтә байлыҡ беҙҙеке! - Әһә, әйттем бит! Точно, бурҙар! Ана, асҡыс-маҫҡыстарын рәтләп, әҙерләп алдылар ҙа, хәҙер йоҙаҡ-моҙағын асып, кәрәк нәмәләрен урлай башларҙар. Эх, нимәгә ҡаныҡтылар икән? Йоҙағы ҡайҙа икән? Бер күҙ менән генә ҡарарға кәрәк ине. Анау сәғәт һымаҡ ялтыр нәмәне әллә ҡасанан бире ысҡындырып алырға күҙҙәре ҡыҙып йөрөй ине малайҙарҙың, бөгөн шунан да ҡолаҡ ҡағалар инде. Бәлки, йоҙаҡ шундалыр? Моғайын, шуны урларға килгәндәрҙер, сөнки бында шунан да матурыраҡ, шунан да ялтырыраҡ нәмә юҡ, башҡа күҙгә күренерлек нәмәләрен әллә ҡасан шаҡарып, аҡтарып алып китеп бөттөләр.

- Бирсәткә кейҙеңме?

- Әй, шунһыҙ ғына булмаймы ни...

- Булмай! Ҡытайҙарҙың аламаһылыр әле...

- Американыҡы, этикеткаһын күрһәтәйемме әллә?

- Ярай, мыжыма, уның менән хәүефһеҙерәк...

- Улай һәйбәт булалыр шул. Ярай, хәҙер, ошолайыраҡ, әһә-һә, булды, шикелле.

- Булғас, ышаныслы булһын... Һаҡланганды Хоҙай һаҡлар...

- Былай ҙа һаҡлап, ҡәҙерләп кенә...

Oho-ho! Ғәләмәт тәжрибәле бурҙар. Ҡайһылай ипле ҡыланалар, бик ҡиммәтле нәмәгә ҡаныҡҡан был яуыҙҙар. Йоҙаҡтары стена буйындағы торбаламы, әллә ҡаҙанлыҡтың берәй ялтырауығындамы? Шулай анһат ҡына асып, ысҡындырып та алырҙармы икән? Йоҙаҡ һымаҡ нәмә бөтөнләй күҙгә салынманы, күренһә, малайҙар иң алда шуны онтап маташырҙар ине. Беҙ күрмәгән тағы ниндәй ул хәтлем ҡиммәт нәмә булыуы мөмкин? Бөтәһен дә һәрмәп, ҡапшап ҡарап беләбеҙ тигән булабыҙ. Белдең атаң башын! Ул ҡиммәт нәмәнең ысын хаҡын, бәлки, өлкәндәр генә беләләр.

- Ул хәтлем шаҡарма, һындыраһың бит!

- Ҡараңғы, бер нәмә лә күренмәй, йүнләп һиҙелмәй ҙә...

- Тәүге тапҡырмы? Усың менән һәрмә лә, бармаҡ буйлап ҡына...

- Былай ҙа шулайтам даһа... Бирсәткәһеҙ һәйбәтерәк булыр ине...

- Һөйләнмә. Йоҙаҡты боҙһаң, һин ыҙалайһыңмы, мине язалаясаҡтар!.. - Был һүҙҙәрҙән һуң малайҙар үҙҙәрен бөрсә кеүек кенә ҙурлыҡта бөршәйеп ҡалғандай тойҙолар: эш язалауға барып етһә, харап! Былай ҙа ары-бире генә тере йәндәр, хәҙер тын алыуҙы бөтөнләй онотто.

- У-у-уй, у-у-й, ипләберәк! Тороп тор, ашыҡма! - Йыш-йыш тын алдылар. Ух, һин уларҙы! Бер ауыр нәмәне ысҡындырып төшөрәләр, шикелле. Эх, һыңар күҙ менән генә ҡарарға кәрәк ине лә ҡурҡыныс шул...

Тынлыҡ урынлашты. Бинала бер кем дә юҡ тип әйтерһең: ике бур яңы ғына көсәнә-көсәнә яуызлыҡтарын ҡылды, ике тишектә ике йәндең ҡоттары осоп ята тип кем уйлаһын? Хәтәр ҙә, ғәжәп тә һынау-һабаҡтарың, Тәңрем! Бурлыҡтарын булдырҙылар ҙа, кинәнешеп, ҡыуанышып ултыраларҙыр инде, ҡараҡтар! Юҡ, улай тиһәң, асҡыс-маҫҡыстарын йыя һалып, тайыу яғын ҡарарҙар ине, ә былар ашыҡмаған кеүек. Ана бит, һаҫыҡ тәмәке еҫе таралды, "перекурға" ғына туҡтағандарҙыр. Был әсе еҫкә сөскөрөп ебәрмәһәм ярар ине, харап булырмын, тип уйланы малайҙарҙың һәр ҡайһыныһы. Бурҙарҙың береһе тағы ла урлаша башлайым тигәйне, шикелле, икенсеһе:

- Ярар, әйҙә, сығайыҡ, йә кеше килеп инер, - тип ашыҡтырҙы.

- Кем килһен, ишекте нығытып бикләнем, бында эт тә йөрөмәй. - Ю-у-у-ҡ, тиҙ генә сығып китергә йыйынмай былар.

- Әйтәм бит, үҙебеҙгә лә таҡытоконо әллә кем менән уртаҡлашаһыңдыр әле...- тине нәҙек тауыш.

- Ҡуй, юҡ менән баш ҡатырма, тәүгә килдем.

- Алдашма, урлашҡаныңды белһәм, тотторам. - Вәт, яуыҙҙар, бергәләп кәсепкә йөрөйҙәр, бер-береһен ҡапаҡлап ҡурҡыталар. Китаптарҙа енәйәтселәр бер-береһен алдайҙар, талайҙар, хатта табыш өсөн үлтерешәләр, тип яҙғандары ысын икән. Бер-береһен ҡурҡытып ҡына дуҫлашаларҙыр инде улар.

- Ярай, әйҙә сыҡтыҡ, танһыҡ ҡандырырлыҡ булды бит.

- Нимә ашығаһың? Тағы ҡасан киләбеҙ әле, әйҙә, бер килгәндә... - тип, башлағайны, икенсеһе уның һүҙен уҫал бүлде.

- Етәр, мыжыма, атыу барынан да ҡолаҡ ҡағырһың! Нимә ҡомһоҙланаһың, һуңғы тапҡырмы әллә?

Ә-ә-ә! Әйтәм бит, алыр нәмәләре тағы бар! Былар тағы килергә уйлай, тимәк, байлыҡтарын вис алып китмәйҙәр. Улар сығып киткәс, эҙҙәрен табырға кәрәк. Үәт, шунда үҙҙәрен ысын разведчиктар тип маҡтана алырҙар. Үәт, был, исмаһам, ысын разведчиктар уйыны!

- Ярай, инәлтмә! Миңә генә кәрәк нәмәләр шул...- Ҡайһылай яман һатыулашалар һуң әле, һуғышып китмәҫтәр тимә! Ул хәтлем күп урларлыҡ нимә бар икән ул тирәлә? Мажаралы китаптарҙағы һымаҡ, стенаға йәшерелгәнме, әллә шул тәңгәлдә ергә күмелгәнме икән? Үҙҙәренә етерлеген алып, ҡалғанын кире йәшерҙеләрме? Күрергә кәрәк ине...

- Йә, ҡаршылышма... Тағы берҙе... - Ҡайһылай енмеш береһе, әйткәнен ҡуймай, һаман ҡотортоуын белә, яуыҙ.

- Тегеләйерәк шыл, бында сөй сосайып тора... - Икенсеһен ризалаштырҙы шикелле. Әллә нимәне бер ерҙән икенсе ергә шылдырған кеүектәр. Шундағы торбаға йәшергән нәмәләрен соҡоноп эҙләйҙәрме?

- Эйе, эйе, саҡ ҡына тегеләйерәк... Әһә-һә-әә, былайыраҡ, былайыраҡ... Булды-ы-ы... - Ыһ-ыһ итеп тағы әллә нимәне шаҡара, ҡутара башланылар.

- Ипләп, сәсәп ҡуйма... - Эй, хәстрүштәр! Бер-береһенең һаулыҡ, имenlеген хәстәрләгән булалар, йәнәһе. Берәү ишетһә, ысын, тип уйлар. Әллә нимәне көсәнеп шылдырҙылар, стенанымы, иҙәндеме сапсынылар. Әллә нимәне көсәнеп этәрәләр, кемелер берәй ерен ҡыҫтырып ауырттырҙы микән, ыңғыраша башланы. Анау, кәшеүәрҙәр йоҡлап йөрөгән һәндерәне урынынан шылдырабыҙ тип һелкеткәнгә лә, бутҡа бешергән бакты типкеләгәнгә лә оҡшай. Был ят тауыш, сәйер ауаздарға малайҙарҙың иҫе китте.

- Ашыҡма, ҡолап китерһең... Берәү ҙә баҫтырмай ҙаһа. - Ҡайһылай иғтибарлылар, бер-береһен ҡайғыртҡан булалар, имеш.

- Һатыулашма! Мин генә ашығамдыр шул...

- Уй-уй... Ҡабаланма... Төшөрөп ебәрмә...

- Эйе, эйе, ярай һөйләнмә... - Бергә урлашып йөрөп өйрәнгән былар: разведчиктар һымаҡ, береһенә ҡыҫҡа, тос ҡына бойороҡ бирәләр, бер-береһен яҡшы аңлайҙар, оҫта, тәжрибәле бурҙар шулай булалыр, күрәһең.

- Эй, төшөп китте инде әллә, эшкинмәгән!

- Төшһә, ҡалайтайым... Күпме тотоп торорға була... - тип бупылдашып, ҡырталаштылар һаман. Әһә, туҡтанылар: эҙләгән нәмәләрен таптылар, шикелле. Айышһыҙ ғына әллә нимә мығырлашалар. Береһе һөйләйем тиһә, икенсеһе ауыҙын усы менән япҡан кеүек, һүҙҙәре артыйорто ғына ишетелеп ҡала. Эх, эшкинмәгәндәр, күҙҙәребеҙ упайышып йөрөгәнсе, яҡшыраҡ тикшереп сыҡһаҡ, ул хазинаны әллә ҡасан үҙебеҙ табып бүлешер инек. Улай тиһән, һәр мөйөштө, бөтә тишек-тошоҡто, стена, иҙәнде һәрмәп, еҫкәп кенә түгел, тараҡандар һымаҡ, түштәрендә шыуышып, танауҙары менән һөрөп сыҡтылар. Шунда ла табылмағас, ғәләмәт нык йәшерелгәндер инде! Йәлке! Ана, эшкингәндәр килде лә, кәрәк нәмәләрен хәҙер алып сыға ла китә инде. Малайҙарҙың бында хужа булараҡ ул байлыҡҡа хоҡуҡтары күберәктер, ләкин уларға - ҡуҡыш!

Тегеләр, тырҡ-пырҡ килеп, тағы әллә нимәләрен бүлешә алмай бурылдаша башланы. Бына һиңә кәрәк булһа, татыу ғына шырҡылдашып килеп ингән кешеләр, уғрылыҡ ҡылыуҙарынанмы, табыштарын ҡыҙғаныуҙанмы, ҡомһоҙлоҡтарынанмы, эт менән бесәй кеүек сапсышырға, ыҙылдашырға керештеләр. Шыбырлашып ҡына ла яман ирешеп була икән, быныһы малайҙар өсөн бигерәк ҡыҙыҡ булды. Ғәҙәттә, кешеләр башҡаларҙан да оялмай, үҙҙәрен дә тыймай, яман ҡысҡырышып ирешәләр, ә былар яуыз эштә йөрөгәндәрен ирешкәндә лә онотмайҙар - һаҡланалар! Күршеләрме, атай менән әсәй ирешә башлаһалармы, былай ҙа шомло, ҡурҡыныс булып китә, ә бында, йәшенеп ятҡанда, ғәләмәт ҡурҡыныс икән, сөнки сығып ҡасып ҡотолоп та булмай. Шаһиттар бар икәнен һиҙеп ҡалһалар, бөтә асыуҙарын уларға төшөрәсәктәр!

"Атаҡайым, әсәкәйем, башҡаса һеҙҙең һүҙегеҙҙән сыҡмайым, әйткәнегеҙҙе тыңлайым, алдашып, ҡасып-боҫоп та йөрөмәйем... Антым-шантым!" Шулай уйлап, Нур ятҡан ерендә төпкәрәк һеңгәндәй, тупраҡҡа ҡуша ҡатҡандай булды. Аңы, башҡа имен ҡотолоу юлдары юҡ икәнде аңлап, үҙен алдаштырып, серле көскә өмөтләнә, мөғжизә көҫәй башланы.

Ысынлап та, ниһәйәт, теләге ҡабул булды: ишек яғында ҡапыл шаҡылдаған тауыш уның әлегә был донъяла икәнен иҫенә төшөрҙө. Уйланып ятып, әллә ойоп киткән, әллә көсөргәнеп ҡыҫылып ятып, иҫен юғалтҡан, ошоға тиклем нимә булғанын белмәй ҙә ҡалды. Бинаның эсе яҡтырып, ишек шап итеп ябылыуынан тәне былйырап төштө, ятҡан тишеге хәтәр тар ғына икән. Бәләнән ҡотолоуына ышана алмай, бер килкем тып-тын ятты ла, ҡыбырлап ҡарайым тиһә, ҡулдарын да ҡуҙғата алманы. "Алик!" - тип ҡысҡырғайны, үҙенең тауышын да ишетмәне. Әллә ҡурҡыныштан тауышһыҙ, телһеҙ ҡалдымы икән? "Алик! " Әһә, тауышы бар икән. Ниңә иптәше яуап бирмәй? "Ишетмәйһеңме әллә? Һиңә ҡысҡырам бит!" Яуап юҡ, бына ғәжәп! Әллә уны ҡараҡтар тотоп алып киттеләрме? Әллә тишегендә дөмөктөрҙөләрме? Нисек булһа ла тишектән сығырға кәрәк. Тартҡылаша, тырнаша торғас, ятҡан урынынан ысҡынып сыҡты ла өңө эргәһендә бер талай иҫәңгерәп торҙо; боҫоп, бөршәйеп ятыуҙан, тәне түгел, тыны ла ҡатҡан икән, шуғылыр, аяғөҫтә баҫҡас, башы әйләнеп китте. Әҙерәк тора биргәс, үҙ хәленә килде, шикелле, күҙҙәрендәге томан таралды, аяҡ-ҡулдарын, кәүҙәһен һиҙҙе, тирә-яғын байҡаны. Ана, иптәше лә ҡарасҡы һымаҡ һерәйеп тора. Бер һүҙ ҙә өндәшмәйенсә генә бер яҡҡа, бурҙарҙан "таланған" ергә, ынғайланылар. Ике-өс аҙым эшләйҙәр ҙә, бер командаға буйһонған кеүек, туҡтап тыңлап алалар: шылт иткән тауыш та юк! Аҡтарылып, ҡутарылып, ҡыйратылып бөткәндер инде, тип уйлаһалар ҙа, ул мөйөштә бер ниндәй ҙә үҙгәреш һиҙелмәй! Эх, һуҡырҙар! Ҡасандан бирле ошонда йөрөйҙәр, шул өҫтә генә күренеп ятҡан затлы нәмәне лә күрмәгәндәр! Шулай инде, бер нәмәне лә емермәй генә урлашҡастары, байлыҡ өҫтә генә күренеп ятҡандыр. Эх, бешмәгән асыҡ ауыҙҙар, разведчиктар, имеш! Малайҙарҙың йөрәген үкенес, көнләшеү сәме өттө.

- Ҡасандан бире ошонда ҡорттар һымаҡ соҡонабыҙ, өҫтә генә ятҡан нәмәне лә күрмәгәсебеҙ, разведчик булып уйнауыбыҙға төкөрәйем, - тип мығырҙаны Нур. Дуҫы ла үҙен шулайтып ғәрләндергәндер ошо минутта, тиҡ өндәшмәне. Ысынлап шулай ҙа инде, бер бөртөк ыуалып төшкән таш, бер ус тупраҡ, бер сыйылған урын да күренмәгәс, ул шәп нәмә күренеп кенә ятҡандыр әле, ысҡындырып ҡына алырға кәрәк булған. Ана, урлар нәмәһенең ҡиммәтен белгән бурҙар килде лә йоҙағын асып алды ла киттеләр. Улар шуға ла ҡараҡ бит, бәлки, шулай эҙ яҙлыҡтыра беләләрҙер? Үәт һин уларҙы! Бәлки, үҙҙәре ҡасандыр урлап алып килеп йәшереп киткән нәмәләрен килеп алғандарҙыр. Оҫта бурҙар! Шулайтып үҙҙәрен йыуатһа ла, малайҙар барыбер бер урында тиҡ торманы: тирә-яҡтарын һәрмәнеләр, еҫкәнделәр, ҡулдары үҙҙәренән үҙҙәре стенаны, өҫтәлдә, һәндерәне ҡапшаны. Һәндерә аҫтында ҡулдарына буш шешә менән консерва банкаһынан башҡа нәмә эләкмәне.

- Таптым! - Дуҫы ҡысҡырып ебәреүҙән, Нур терт итеп ҡалды. Әһә, урланған нәмәләренән беҙгә лә өлөш төшөп ҡалған, тип уйлаүҙан уҡ йөрәге өлпөлдәп тибә, ирендәре дерелдәй башланы. Нур дуҫы эргәһенә өҫтәл аҫтына уҡталды.

- Ҡайҙа, күрһәт, нимә таптың? - Аликтың ҡулын табып, ундағы йоморо, оҙонса, шыма нәмәне усына алды. Нимә икән? Һәрмәп, еҫкәп ҡараны. Биллаһи, антым-шантым, тип әйтә ала, бында элек уның һымаҡ нәмә тапҡандары юҡ ине. Әллә патронмы икән, тип уйлауынан уҡ ҡото осто. Юҡтыр, патрон булһа, бер яғы осло булыр ине. Боронғо патрондарҙы Ҡыҙыл ярҙа тапҡандары бар ул. Ағайҙар осло башын ысҡындырып алып иретеп, ҡармаҡҡа батырғыс эшләй торғайнылар, ә эсендәге дарыһын ташҡа һалып ут төртһәләр, ғәләмәт шәп ышылдап тороп яна торғайны. Юҡ, еҫе лә патрондыҡы түгел, әллә ниндәй ыҫмаламы, буямы еҫе сыға. Тимәк, затлы нәмәһе эсендә, асып ҡарарға кәрәк! Ят, серле нәмәне ярымҡараңғыла тегеләй ҙә былай ҙа әйләндереп борғосланылар. Тегеләйтеп тә, былайтып та әйләндерҙеләр, телдәренә тейгеҙеп тәмләп тә, еҫкәп тә ҡаранылар. Тәки, нимә икәнен аңламағас, ишек эргәһенә килеп ҡарағайнылар... Э-э-й, пүстәк кенә нәмәгә иҫтәре китеп торған икән! Был бит зажигалка... Ул да булдымы байлыҡ! Был нәмә башҡа инеп-сығып йөрөгән кешеләрҙең кәсәһенән төшөп ҡалыуы ла ихтимал. Ҡараҡтар нимә урлап йөрөнөләр? Нисек, ҡайҙан белергә? Үҙҙәренең булдыҡһыҙлығына малайҙарҙың хәтере ҡалды. Һуңғы бер сәғәт тирәһендә йөрәктәрен тетрәндергән ваҡиғаның серен аңламауҙары баштарын шартлата яҙҙы. Был сәйер хәлдең айышына төшөнә алмауҙары күңелдәрен өттө. Ауыҙ тултырып, күҙҙәрҙе аҡайтып өлкәндәргә түгел, тиҫтерҙәргә шапырынып һөйләрлек тә ҡыҙыҡ нәмә тапманылар. Бигерәк ҡараңғы шул, бер нәмә лә йүнләп күренмәй. Иртәгә дәрестәрҙән һуң яҡтыла килеп эҙләнергә һүҙ бирешеп, ҡайтып киттеләр...

*✓ Велосипедта йөрөү, йөҙөү, йүгереү кеүек үк, циклик көсөргәнешкә ҡарай. Ул бигерәк тә йөрәк мускулдары өсөн файҙалы. Белгестәр шулай уҡ был спорт төрөнөң ябығыуы өсөн яҡшы сара икәнлеген дә иҫегеҙгә төшөрә.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ТЕЛЕФОНЫҢ ГЕЛ ЭРГӘНДӘМЕ?

## Тимәк, һиндә номофобия

■ Техник революция беҙгә яңы аралашыу һәм коммуникация саралары ғына түгел, ә яңы фобиялар ҙа алып килде. Мәҫәлән, бөгөн күп кеше мобиль телефон менән ҡуллана алыу мөмкинлеген юғалтып ҡуйыуынан ҡурҡа. Бик ҡыҙыҡ тойолһа ла, был фобияны медицина донъяһында күптән таныһандар һәм номофобия тип атаһандар. Номофобия менән яфаланыусылар бер ҡасан да өйҙәренән телефонһыҙ сығып китмәй, хатта бәҙрәф һәм ванна бүлмәһенә лә телефон менән йөрөй. Бындай кеше бәйләнеш булмаған зонаға эләкһә, ул мотлаҡ асыулана башлай. Донъяла шулай уҡ һигеҙ һанынан ҡурҡҡан кешеләр ҙә бар. Табиптар белдереүенсә, октофобия менән ауырыусы кешеләр телефондан һандар йыйырға ла, гәзит уҡырға ла, тәрлә техника менән ҡулланырға ла ҡурҡа. Тап уларҙа йышыраҡ тахикардия осрай ҙа инде.

■ Британия табиптары офис хеҙмәткәрҙәренә машинанан велосипедҡа күсеп ултырырға тәҡдим итә. Көнөнә 6 саҡрым ғына велосипедта йөрөү инфаркт ҡурҡынысын 50 процентҡа кәметә. Шуға ла Британия медицина ассоциацияһы тикшеренеүселәре ултырып эшләүселәрҙең барыһын да велосипедта йөрөргә саҡыра. Велосипедта йөрөү, йөҙөү, йүгереү кеүек үк, циклик көсөргәнешкә ҡарай. Ул бигерәк тә йөрәк мускулдары өсөн файҙалы. Белгестәр шулай уҡ был спорт төрөнөң ябығыуы өсөн яҡшы сара икәнлеген дә иҫегеҙгә төшөрә.

■ Бөгөн япон милли аш-һыуын үҙ итеүселәр ҙә аҙ түгел. Бигерәк тә дөгө, сей балыҡ, ылымыҡтар, махсус тәмләткестәр ҡушып эшләнгән ролдар киң популярлыҡ яулай бара. Диетологтар белдереүенсә, был аҙыҡ йоҙаға бай һәм ул ҡалҡан биҙе эшмәкәрлегенә ҙур зыян килтерә. Австралия диетологтары ассоциацияһы үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, япон аштарына өҫтөнлөк биреү ҡалҡан биҙе сирҙәренә килтереүе ихтимал.

■ Лондон университеты ғалимдары 88 ҡәһүә яратыусыны йыйып, тәжрибә үткәреп ҡараған. Экспериментҡа ҡатнашыусыларҙың барыһына ла кофеинлы ҡәһүә вәғәҙә иткәндәр, ә ысынбарлыкта ябай эсемлек эсергәндәр. Һөҙөмтәлә, барлыҡ ҡатнашыусыларҙың ла кәйефе күтәрелгән, улар юғары әүҙемлек күрһәткән. Тимәк, ғалимдар белдереүенсә, ҡәһүәнең артыҡ бер файҙаһы булмаһа ла, кеше уны эскәндән һуң көс өҫтәлеп китә, тип уйлай. Бындай ышаныс кәйеф күтәрелеүенә килтерә, кеше үҙен дәртләрәк тоя башлай.

■ Ҡиммәтле экзотик продукттарҙы файҙалы аҙыҡҡа алыштырығыҙ, тип кәңәш итә диетологтар. Балыҡ, брокколи, шпинат кеүек йәшелсә, алма, әфлисун, персик һәм ҡауын, зәйтүн майы магазин кәштәләрендәге экзотик йәшелсә һәм емеш-еләктән күпкә яҡшыраҡ. Ярайһы уҡ ҡиммәт торған күк көртмәләне виноград менән алыштырырға мөмкин, ул шулай уҡ антиоксиданттарға бай. Шулай уҡ төрләндереп ашау һәйбәтерәк.

■ Арҡаға ятып йоҡлау төнгө ял өсөн иң идеаль вариант һанала. Бындай торош арҡа һәм муйында ауыртыу барлыҡҡа килеүҙән һаҡлай, йыйырсыҡтар булдырмай. Шулай уҡ ҡабырғала йоҡлау яҡшы. Ауырлы ҡатындарға табиптар һул ҡабырғаларында йоҡларға кәңәш итә. Иң зарарлы торош - эскә ятып йоҡлау. Йыйырсыҡтарҙан тыш, муйын һәм арҡа йәрәхәте алыу ҡурҡынысы бар, бынан тыш, арҡа һәм быуындар бөтөнләй ял итмәй.

КӨН ҮҮРГӘН ШӨҒӨЛ

**Ошо көндәрҙә Иглин районы үҙәгендә республика кимәлендә умартасылар конкурсы үтте. Шулай уҡ үткән аҙнала Өфө ҡалаһында "Йәштәр һарайы" бинаһы алдындағы майҙанда һәм С. Орджоникидзе исемендәге парк янында бал йәрминкәләре ойошторолдо. Умарта тоторға теләүселәр ниндәй ҡағиҙәләрҙе яҡшы белергә тейеш? Башҡорт бал ҡортон тергеҙеү саралары ҡәнәғәтләндерерлекме бөгөн? Умартасылыҡ менән шөғөлләнеү отошломо? Ошо һорауҙарға яуап табыуҙы маҡсат итеп ҡуйҙыҡ Башҡортостан Ҡортсолоҡ һәм апитерапия фәнни-тикшеренеү үҙәге, баш ҡаланың Совет һәм Орджоникидзе муниципаль районлары хакимиәттәре ойошторған был сараларҙа ҡатнашҡанда һәр төрлө райондарҙан килгән умартасылар менән һөйләшеп, уларҙың фекерҙәрен белештек.**

# ҠОРТСОЛОҠҠА ИЛТИФАТ ИТЕП...

## төйәгебеҙҙе Балҡортостанға әйләндерәйек

**Салауат АРЫҪЛАНОВ, Ишембай районы:** Ярышта ҡатнашыуымдан ҡәнәғәт ҡалдым, сөнки бында килеп аралашып, башҡа умартасыларҙың эш алымдарын ҡарап ҡайтыу, минеңсә, умартасылыҡ буйынса фәнни китап уҡыуға бәрәбәр. Башҡортостанда бал ҡорто темаһын яҡтыртып яҙылған әҙәбиәт аҙыраҡ, минеңсә. Рәсәй гәзит-журналдарында ҡортсолоҡ темаһына мәҡәләләр, әлбиттә, баҫылып тора, ә беҙҙең республика матбуғатында был тема һирәк яҡтыртыла. Йәш умартасылар араһында бер-ике йыл умарта тотоп, мәғлүмәткә һыуһап, кемдән кәңәш һорарға белмәй аптырауселар күп. Шулай уҡ белер-белмәҫ белемдәре менән үҙҙәрен "атаҡлы умартасы" тип һанағандар ҙа юҡ түгел, әлбиттә, тик быныһы - икенсе тема.

Бал ҡорттары менән уңышлы эшләү өсөн иң тәүҙә уларҙың биологияһын өйрәнергә кәрәк. Шуниһыҙ, ҡорттарҙың холҡон, тормошон аңлап бөтмәйһең, ҡайһы берҙә көтөлмәгән хәлдәргә лә осрап ҡуяһың. Һауа торошо бик үк уңайлы булмаһа, мәҫәлән, нығ эҫе булһа, ҡоро көслө ел иҫһә, тирә-йүндә нектарға бай сәскәләр булмаһа, бал ҡорттары ярһыуға әйләнә. Шуның өсөн ул ваҡытта умартаға яҡын юламауың хәйерле. Әгәр ҙә көн йылы, аяҙ булып, тирә-яҡта сәскәләр күп булһа, умарталарҙы асып, төрлө эштәрҙе башҡарғанда ҡорттар һине күрмәгән, эшенде һиҙмәгән һымаҡ булыр. Ошо үҙенсәлектәрҙе хәтерҙә тотоу зарур. "Ас кешенең асыуы яман", тибеҙ. Ҡорттар менән дә шул уҡ хәл: улар ас икән, кәрәккән-кәрәкмәгәнгә умартаны асып ҡарап, борсорға ярамай. Ас ҡорттарҙың да асыуы яман. Улар ҙа кешеләр һымаҡ: уңайлы шарттарҙы, тәртипте, тыныслыҡты ярата.

Айырылған күс - тәбиғәт һымаҡ уҡ үҙаллы, ҡырағай көс: ауыҙлыҡлап булмай кеүек. Әммә был тәү ҡарашҡа ғына шулай күренә. Тәжрибәмдән сығып, шуны әйтәм: "күсеүселәр"ҙең иғтибарын йәлеп итә торған ҡорал - сәскә еҫе. Быны ҡулланырға кәрәк. Үҙем нисә йылдар инде мелисса үләнен алып, яңы умартаның стеналарына ышҡыйым. Сәскәнең еҫе бик көслө, шул уҡ ваҡытта йомшаҡ, шуға күрә умарта эсендә бал ҡорттарын йәлеп итә торған еҫ ҡала. Айырылған күс осоп китмәһен тиһәгеҙ, ошо үләндең еҫен һауаға таратығыҙ. Мул ғына тотамды күс янында елләтеп торһағыҙ, ҡорттар һеҙ әҙерләгән умартаны тағы ла еңелерәк әҙләп табасаҡ.

Кәйеф булмаған саҡта ла ҡорттар ҡарарға тура килә: бал ҡорттарының тип-тигеҙ итеп балауыҙ һуҙыуын, таҙалыҡ һәм тәртип яратыуын, гөж-гөж килеп бал ташыуын ҡарап тороуҙан һуң күңел күтәрелә. Бал ҡорттарын Аллаһы Тәғәлә кешеләргә дөрөҫ йәшәү, әүҙем эшләү һәм бер-береһе менән аңлашып, тығыҙ бәйләнештә йәшәү өлгөһө итеп яралтҡан, тиҙәр.

Бал яратаһығыҙ икән, балдың ысын хужаларының ҡаяуын да "тәмләргә" тура килә йыш ҡына. Дөрөҫөн әйткәндә, умартасы өсөн бал ҡортонан сағылыу - ғәҙәти күренеш. Минең үҙемә, мәҫәлән, йоҡо килгән саҡта сағылып алыу оҡшай - шунда уҡ йоҡо ла оса, кәйеф тә күтәрелә. Быуын ауырыуҙарынан да ҡорттан сағылыу ярҙамында дауаланырға мөмкин. Умартасылар араһында йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренең һирәк осрауы тап ошонон файҙаһы менән аңлатыла. Шулай ҙа һаҡлыҡ тураһында ла оноторға ярамай - саманан тыш сағылыу ғүмер өсөн ҡурҡыныс. Умартаны асҡан саҡта дорфараҡ ҡыланып, йә башҡа сәбәп менән нәҙекәй билдәрҙе ҡуҙғытып еҫәргәнһегеҙ икән, уларҙы тынысландырыу өсөн тәүҙә үҙегеҙгә тынысланырға, сәбәләнмәй генә төтөн ҡулланырға, шулай уҡ төтөн урынына һиптерткес флакон ярҙамында аҙ ғына һыу һиптереп алырға ла була. Ҡорттарға һыу ҙа кәрәк, шулай итһәгеҙ, һеҙ бер ыңғай ике ҡуянды атасаҡһығыҙ.

"Көҙ етте, сәскә балы бөттө инде", тип, тынысланырға ярамай. Сөнки был миҙгел - япраҡ балы йыйыу осоро. Япраҡ балы ҡорттар өсөн ҡыш ашарға яраҡһыҙ була: уны көҙгөһөн үк ҡыуып алырға һәм урынына йә шәкәр бирергә, йә сәскә балы рамдары ҡуйырға кәрәк. Моғайын, кемдәрҙер япраҡ балы тураһында ишеткәне лә юҡтыр. Аңлатып үтәйек. Япраҡ балы тип ағастарҙың япраҡтарында ҡалдырылған бөжәктәрҙең "аш ҡалдыҡтары"н атайҙар. Бал ҡорттары уларҙы ла йыя һәм, әйтергә кәрәк, ҡайһы бер сәскәләр һутынан йыйылған бал менән бергә ҡушылған япраҡ балы кешенең һаулығына бик яҡшы тәьҫир итә. Әлбиттә, тәме сәскә балына етмәй, ә бына шифаһы - артығыраҡ та. Иллә мәгәр сит илдәрҙә бындай бал бик юғары баһалана, тиҙәр.

Һуңғы йылдарҙа Ишембай районында умартасылыҡты үҫтереүҙә байтаҡ эштәр эшләнде. Умарта тотоусылар һаны ла, умарталар һаны ла бермә-бер артты. Тик был һаман да элеккесә 60-70-се йылдарҙағы кеүек киң таралған күренеш түгел. Мәҫәлән, ул йылдарҙа беҙҙең урамда умарта тотмаған ғаилә юҡ ине. Әлбиттә, хәҙер бал ҡорттары менән шөғөлләнеү бер ни тиклем ҡатмарлаша төштө, сөнки ҡорттар араһында бик көслө ауырыуҙар килеп таралды. Был ауырыуҙар ситтән килтерелгән ҡорттар арҡаһында барлыҡҡа килде. Тағы ла, умарталар һаны ҡала умартасылары иҫәбенә нығ арта. Ә ауылдарҙа әле бик яй ҡуҙғалалар. Ә шулай ҙа Ишембай районында "Ғүмәр ауылында умарта тотмау гонаһ булыр" тип иҫәпләгән Ғүмәр ауылы кешеләре кеүектәр һаны арта бара. Ысынлап та, яҙҙан башлап көҙгә тиклем сәскәләргә күмелгән Урал тауҙарының көнбайыш битләүендә урынлашҡан райондарҙа нимә умартасылыҡ менән ныҡлап шөғөлләнмәскә? Йүкәләктәр, сағанлыҡтар, болонлоҡтар, яландар аша үткән саҡта: "Был ерҙәрҙә бал ҡорто көтөргә Хоҙай үҙе ҡушҡандыр инде", - тип уйланыла.

Беҙҙең Башҡортостаныбыҙ Балҡортостанға әйләнергә мөмкин бит. Бал артыҡ күп булыр, тип ҡурҡабыҙмы? Әле бөтә йыйылған балды Рәсәйҙең һәр бер кешеһенә бүлгәндә лә йылына 300, 400 грамм ғына тура килә. Үҙебеҙ өсөн генә ҡулланғанда ла умарталар һанын 30-40 тапҡырға арттырырға, тағы, етештерелгән бал иҫәбенә һатыуға сығарылған балдың хаҡын да төшөрөргә мөмкин бит. Бөгөнгө балдың хаҡы ябай һатып алыусы өсөн арзан түгел.

Башҡортостан Умартасылыҡ һәм апитерапия ғилми-тикшеренеү үҙәге генераль директоры Әмир Ишемғолов башҡорт бал ҡортон тағы ла арттырыуҙы, умартасылыҡты, бал етештереүҙе тағы ла үҫтереү кәрәклеген билдәләне. Ҡортсолоҡто үҫтереү буйынса эштәр алға бара кеүек. Әмир Миңнеәхмәт улы ошо маҡсаттан сығып тағы ла йүкә ағастарының һанын арттырырға тәҡдим итте. Уның фекеренсә, һәр кеше үҙенең баҡсаһына 5-6 йүкә ағасы ултыртһа, республикабыҙҙа йүкә урмандары күпкә артасаҡ. Ә йүкә, сәсеп үҫтерелгән баллы сәскәләрҙән айырмалы рәүештә, йыл һайын сәсеүҙе, тәрбиәләүҙе талап итмәй. Минеңсә, әле үҫеп ултырған йүкә урмандарын ҡәҙерләп һаҡларға, көстө ошоға ла бүлергә кәрәк. Сөнки был ағасты бары тик сеймал урынына ҡулланыусылар ҡубәйҙе бөгөн. Үҫеп ултырған ағастарҙы һаҡлау механизмын яйға һалһаҡ, яңы үҫентеләр ултыртыуҙы ла ҡайғырта башларға мөмкин.

Төп мәсьәләләрҙең береһе - башҡорт бал ҡортоноң нәҫелен һаҡлап ҡалыу йүнәлеше дөрөҫ һайланған, эштәр башҡарыла, әммә, минеңсә, был юҫыҡта эштәр байтаҡ. Шуларҙың береһе, мәҫәлән, ҡорттар өсөн буфер зоналар булдырыу. Белеүебеҙсә, бер төрҙөң нәҫелен һаҡлап ҡалыу өсөн уны айырым зонаға урынлаштыралар. "Шүлгәнташ" ҡурсаулығы зонаһы айырым зона була аламы? Бал ҡорттары өсөн - юҡ. Сөнки улар өсөн бер ниндәй ҙә территория сиктәре сик була алмай. Унда башҡа райондарҙан да осоп барып еталәр, һәм урындағы ҡорттар менән ҡатнашалар. Был иһә башҡорт тоҡомло ҡорттарҙың төп үҙенсәлектәре юғалыуға килтерә. Сит илдәрҙән, сит төбәктәрҙән килтерелгән бер миҙгеллек күстәрҙең таралыуы башҡорт тоҡомло ҡорттарҙың нәҫел үҙенсәлектәрен юғалтыуға килтерә. Шулай итеп, һыуыҡтарға бирешмәгән, эшсән, ауы-




Әнүәр Дилмөхәмәтов йәрминкәгә ҡыҙҙары менән килде.

рыуҙарға ҡаршы тора алыусан башҡорт тоҡомо ассимиляциялана. Был хәлгә сик ҡуйыу өсөн Ишембай, Мәләүез, Баймаҡ, Әбйәлил, Белорет райондарында буфер зоналары булдырырға кәрәк. Йәғни, ҡурсаулыҡ менән сиктәш ауылдарҙағы халыҡҡа башҡорт тоҡомло ҡустәрҙе йә булмаһа инә ҡорттарҙы һатырға, ситтән килтерелгән пакеттарҙы Башҡортостанға алып инеүҙе һәм уларҙы һатыуҙы контролдә тоторға кәрәк. Ғөмүмән, башҡорт ҡортон үстереүгә арналған Дәүләт программаһы эшләргә тейеш.

**Фәнил ИБРАҺИМОВ, Хәйбулла районы Аҡъяр һөнәрселек училищеһы директоры:** Беҙҙең училищела райондың умартасылыҡ үҙәге булдырылған. Был идея хакимиәт башлығы Рөстәм Рәүҙәт улы Хәйруллин ярҙамында тормошҡа ашырылды. Ул әйткәндән һуң беҙ ныҡлап был эшкә тотондоҡ. Ҡустәр һатып алдыҡ, уларҙан мул ғына бал алып, бөгөнгө йәрминкәлә ҡатнашабыҙ. Училищеның 26 умартаһы бар. Белгән ятҡарыбыҙ, белмәгән яҡтарыбыҙ ҙа етерлек, әлбиттә, ҡытыршылыҡтар ҙа булды, әммә быйыл барыбер бал алыуға өлгәштек, шуға ҡәнәғәтбеҙ. Артабанғы ниәт - был үҙәкте тағы ла киңәйтеү. Аныҡлабыраҡ әйткәндә, башҡорт ҡортон үрсетеү, районда башҡорт тоҡомло ҡорттарҙы арттырыу. Уҡыусылар ҡабул итеп, ҡортолоҡ буйынса белгестәр әҙерләү теләге менән янып йәшәйбеҙ. Артабан училищела умарталар эшләү цехы булдырыу, ҡулыбыҙҙан килгән башҡа ҡортсолоҡ инвентарҙарын етештереп, район халҡына таратыу уйыбыҙ ҙа бар. Ошо эште ойоштороуға ғына өсөн район хакимиәте башлығына ҙур рәхмәтемде еткерәм.

Хәйбулла тиһәң, күптәрҙең күҙ алдына ҡылғанлы дала килеп баҫа. Әммә районыбыҙҙың яртыһы урманлы зона. Ҡортсолоҡто беҙҙең яҡта ла таратып була. Бөгөн күптәрҙе ғәжәпләндереп, Хәйбулланан Һаҡмар, Йылайыр йылғалары буйындағы тугайлыҡтарҙа үҫкән сәскәләрҙән йыйылған йүкә һәм сәскә балдары килтерҙек.

**Рәсүл ӘХМӘҘИЕВ, Ғафури районы:** Минең байтаҡ умартам бар. Йәйгеһен ваҡытым тик умартасылыҡ менән генә булышып үтә. Умартасы бал ҡорто менән бергә тандан тора, ҡорттар тынысланғас ҡына ял итеү форсаты тейә: бигерәк тынғыһыҙ, мәшәҡәтле эш. Шулай ҙа уның мәшәҡәте үҙен аҡлай. "Бал ҡортоноң наҙы бар", тип әйтәләр, уны һәр ваҡыт ҡарап торорға кәрәк. Ҡортто наҙлаһаң, бал була, наҙламаһаң - булмай.

Бөгөн эшһеҙ интегеүселәр күп. Егеттәр ҡалаға китеп, эт типкеһендә йөрөй. Ауылға ҡайтып, бал ҡорто, мал-тыуар аҫрау менән шөғөлләнһендәр ине.

Совет заманында бал ҡорто тотоу тыйыла ине: атайҙарҙың умарталары бейек үләндәр араһында йәшерен ултырған. Ә бөгөн уларҙы көтөр өсөн бер ниндәй ҙә тыйыуҙар юҡ, бары тик ялҡаулыҡ тигән "барин" ғына тыймаһа...

Элек-электән ауылда умарта тотоусылар иркенерәк йәшәне. Йыл ниндәй генә булмаһын, йүкә сәскә атҡан урманлы зоналарҙа һәр йылда ла табыш алырға була ул. Мин, мәҫәлән, үҙемдең 11 йыллыҡ тәжрибәмдән сығып әйтәм: бер йылда ла балһыҙ ҡалғаным юҡ. Әле быйыл йәрминкәгә лә килә алдыҡ. Йыл һайын йөҙ мең һум самаһы килем сыға ҡортсолоҡтан.

Әгәр ҙә умарталарыңды шул килеш һат, тиһәләр, ризалашмаҫ инем. Был шөғөл ҡанға һеңгән - унан айырылып булмай. Ауыл ерендә бал ҡорто аҫрап, унан йәм табып йәшәйбеҙ. Ҡустәнәскә бал биреп, туғандарымды, ҡунаҡтарымды ҡыуандырыу өсөн генә булһа ла был эш менән шөғөлләнеүҙе оло мәртәбәгә һанайым.

**Әнүәр ДИЛМӨХӘМӘТОВ, Бөрйән районы:** Солоҡсолоҡ менән олатайым шөғөлләнде, һуғышҡа тиклем атайым да шөғөлләнгән. Ул һуғышҡа киткәндә мин 12 көнлөк кенә булғанмын. Атайым был һуғыштан әйләнеп ҡайтманы. Бәләкәй сағымда оло бабайҙар менән урманда йөрөгәндә улар миңә: "Әйҙә, улым, беҙҙең менән солоҡ ҡарарға, үҫкәс, ҡорт көтөрһең", - ти инеләр. Миңә был эш бик оҡшаны, һәм мин олатайҙар һөнәрен артабан дауам итергә булдым. Солоҡсолоҡта эшләп, хаҡлы ялға сыҡҡас, үҙемдең урыныма улым килде. Мин бының менән ныҡ ҡәнәғәтмен - олатайҙар тапшыра килгән сылбыр өҙөлмәй, дауам итә әле. Бал ҡорто менән бәләкәй саҡтан ныҡ ҡыҙыҡһындым. Мәктәпте тамамлағас, 30 йыл ҡурсаулыҡта солоҡсо булып эшләнем. Пенсияға сыҡҡас, был эште тағы ла дауам итергә булдым һәм үҙемдең урамыма умарталар ултырттым. Оло йәштә булһам да, ҡортсолоҡто ҡуйырға йыйынмайым: 25 умартам, урманда 15 сологом бар. Йыл һайын йәрминкәләргә киләм, бал бында бик һәйбәт үтә. Үҙемдең 25 умартамдан, әгәр ҙә барыһын да һатһам, 200 мең тирәһе аҡса сығарам. Бал аҡсаһына ҡыҙыма ҡаланан фатир һатып алышырға ярҙам иттем, улыма еңел автомобиль һатып алыштым. Бөгөнгө йәрминкәлә солоҡ балын да, йүкә балын да бик теләп, хатта ҡумәртәләп тә алалар. Кешеләр күберәк үҙҙәре белгән умартасының продукцияһын алырға тырыша. Быйыл да бер һеңлекәш килеп: "Мин йәрминкә буйлап тик һеҙҙе эҙләнем", - тип, 5 банка йүкә балы алып ҡайтып китте.

Хәҙерге ваҡытта ҡортсолоҡ менән ауылда күп кеше шөғөлләнә. Эшһеҙ ятҡан йәштәр ҙә бар. Әгәр мин уларҙың йәшендә булһам, "ыһ" та итмәй 100 умарта тотор инем. Әле миңә 71 йәш, яңы тынышҡан кешеләр миңә 50 йәш бирә. Йәш күренеүемдең сәбәбе - араҡы, тәмәке менән мауыҡмауымда һәм бал ашап йәшәүҙәлер, тип уйлайым. Шулай ҙа, бәхеткә күрә, һуңғы 1-2 йыл эскелектең кәмеүе күҙәтелә - кеше был яман ғәҙәттән арынып, ниһайәт, һәйбәт йәшәргә ынтыла башланы шикелле. Үҙ эшен нимәнән башларға белмәгән йәштәргә умартасылыҡҡа тотонорға тәҡдим итер инем. Башлаһалар, унан айырыла алмаҫтар, шул ваҡытта миңә рәхмәт кенә әйтерҙәр әле.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Умартасылар конкурсының судьяһы, ауыл хужалығы фәндәре кандидаты Юнир Исхаков: "Конкурста ҡатнашыусыларҙың әҙерлеге йылдан-йыл яҡшыра бара. Был, үҙ сиратында, талаптарҙы ла бер баҫҡысҡа юғары күтәрә. Тимәк, конкурстың абруйы ла йылдан-йыл арта. Балалар араһында бындай конкурстар үткәреү икеләтә отошло. Балалар һөнәр һайлаған ваҡытта бәләкәйҙән ни күрә, шуға өйрәнә. Атанан күргән - уҡ юнған, әсәнән күргән - тун бескән, тип, дөрөҫ әйткәндәр", - тине. Беҙ, был сараларҙы ҡарағас, йәрминкәгә килгән умартасыларҙың тыңлағас, ҡортсолоҡтоң ярайһы уҡ килемле сығанаҡ булыуына инандыҡ. Был эштәр артабан да шулай уңышлы дауам итһә, республикабыҙҙы тиҙҙән "Балҡортостан", тип ололай башларбыҙ һымаҡ.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ әҙерләне.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Аң торошоноң үҙгәреүен үлсәү өсөн һыу ҡулланыу

Ваҡыты-ваҡыты менән тормош күңелһеҙ ҙә булып китә. Был үҙ аңыбыҙ менән яңылыш идара иткәндән түгел, ә икенсе кемдер йәки икенсе нимәләр яңылыш идара итеүҙе тормошҡа ашырғандан шулай килеп сыға.

Барыһы ла ата-әсәнән һәм уҡытыусыларҙан башлана, һуңынан бөтөн тормошобоҙға тарала. Идара итеүҙең нескә формаһы - киң мәғлүмәт саралары яғынан һөжүм. Улар беҙ нимә кейергә, нимә ашарға, ҡайһы яҡҡа йүнәлеш торорға тейешбеҙ, тигән ҡарарҙарыбыҙға көслө йоғонто яһай.

Был яҙмалар аң ныҡ тәьҫир иткән тән сәләмәтлегенә бағышлана. Һеҙҙе, йөрәгегеҙ уйламағанда насар эшләй башлауы мөмкин, тип иҫкәртәләр: гәзиттәр, журналдар, радио-телевидение йөрәк эшмәкәрлеген тикшереүҙе финанслауҙы арттырыу тураһындағы мәғлүмәт менән тулған. Һәр саҡ йөрәк өйәнәге тураһында ишетеү һеҙҙә ҡурҡыу тойғоһо уята. Уның нисек булыуы тураһында уйланаһығыҙ. Төпкө аңығыҙҙа: "Сираттағы кешенең мин булыуы ла мөмкин", - тигән уй тыуа. Уларҙы раҫларға теләгәндәй, киң мәғлүмәт саралары ла: "Сираттағы кеше һеҙ булыуығыҙ ихтимал", - тип ҡабатлай.

Был теманан ситкә тайпылып, һыу темаһына күсәйек. Төштәрҙә төпкө аң һыу менән көүҙәләнә. Беҙҙең тәнебеҙ 80 процентҡа һыуҙан тора. Һыу, аң һәм кеше организмы бер-береһе менән тығыҙ бәйләнгән. Был һыуға бәйле дауалауҙың төрлө формаларына һәм рухи күнекмәләр тыуыуға килтерә.

Йылы һыуға төшөү менән хәүефһеҙлек, бәхет һәм тыныслыҡ тойғоһо тыуа. Бында нимә ҡулланыуығыҙ мөһим түгел: ул йылға ла, ванна ла, океан да булыуы мөмкин. Һыу көсөргәнеште, кире уйҙарҙы, ниндәйҙер кимәлдә йорт хәстәрлектәренең, эштәге проблемаларҙың һәм гәзит мәҡәләләренең йоғонтоһон йыуып төшөрә.

Массачусетс технология институтында беҙҙе һыу - универсаль иреткес, тип уҡыттылар. Әммә уҡытыусы уның ярҙамында проблемаларҙы "иретеп" була икәнлеген әйтмәне. Ә Сильва ысулында һыулы стакан тап шул маҡсатта файҙаланыла.

Аңдың үҙгәргән торошон саҡырыусы "йөҙөүсе йәшниктәр" хәҙер ныҡлы танылыу таба. Йылы ванналар ребефингта - кешенең ҡабаттан тыуып, әсә ҡарынынан айырылған ваҡытта алған травмаларын асыҡлау ысулында ҡулланыла.

Хәҙер баланы һыу эсендә табыу популярлаша бара. "Аң һәм тән" тупланмаһындағы отчетҡа ярашлы, 1995 йылдың апрелендә Лондонда 1100 акушер йыйылып, бала тапҡан ваҡытта ауыртыуҙы баҫыусы наркотиктарға бәйле ысулдарға ҡарағанда, һыуҙа бала табыуҙың 9 мең осрағын уңышлы тип һанауын белдерә. Һыу аналыҡтың бала ятҡан һыу менән тулы урынына оҡшаш, шуға ла һыу сабыйҙарға яҡты донъяға тыуыуҙың травмалы йоғонтоһон кәметә. Яңы тыуған балалар - тыумыштын йөҙөүселәр, һыу аҫтында тын ала белә.

Шулай булғас, ниңә һеҙгә тормошта уңыш һәм бәхет ҡаҙаныу юлында кәртә булып торған ҡаршылыҡтарҙы йыуып төшөрөү өсөн йылы һыу ҡулланмаҫҡа? Ошо алым менән юлығыҙға башҡалар ҡуйған ҡаршылыҡтарҙы һәм кәртәләрҙе лә универсаль иретеүсе - һыу ярҙамында алып ташлай алаһығыҙ.

**Роберт СТОУН.**

КӨН ҠАҘАҒЫ

**РФ Дәүләт Думаһына 4 декабрҙә үтәсәк һайлауҙар ҡыҙыу һәм ҡырҡыу бәхәсле булырға оҡшаған. Сөнки, беренсенән, элекке кеүек дүрт сәйәси фирҡә түгел, ә етәү кәс һынашырға йыйына; икенсенән, уларҙың һайлау алды платформаһы ла "һул" ҡарашлы һайлаусы иғтибарына иҫәп тотоп, күпте вәғәҙә итә. Өсөнсө сәбәпте лә күрһәтергә мөмкин: РФ Президенты Д. Медведев федераль парламентҡа үтәсәк депутаттарҙың төрлө ижтимағи төркөмдәрҙән булыуын хәстәрләй.**



# ҠАЙҺЫ ФИРҠӘ...

## нимә вәғәҙә итә?

Әлбиттә, иҡтисадтың тотороҡло үҫешен, фәҡирлеккә ҡаршы көрәште күҙ уңынан төшөргән сәйәси фирҡә юҡ тиерлек. Власть фирҡәһе булараҡ, **"Берҙәм Рәсәй"**, мәҫәлән, һуңғы һигеҙ йылда илебеҙ донъяның иң эре иҡтисади яҡтан алға киткән илдәре төркөмөнә инде, граждандарҙың килеме ике тапҡырға артты, пенсиялар һәм пособиелар ҡырҡа күтәрелде, тигән ҡараштa. "Рәсәй патриоттары" ағзаларының фекеренсә иһә, беҙ, БМО мәғлүмәттәренә ярашлы, ҡайһы бер мөһим иҡтисади күрһәткестәр буйынса 40-50-се урында ғынабыҙ.

Һуңғы осорҙа иҡтисадты инновацион ысулдарға күсереү, донъя баҙарында башлыса сеймал менән һатыу итеүҙән арыныу тураһында һүҙ күп бара. Маҡсат изге, ләкин уға өлгәшеү өсөн предприятиеларға теләшле шарттар тыуҙырырға, йәғни һалым, таможня, тариф сәйәсәте буйынса тауар етештереүселәрҙе дәртләндергән саралар күреү кәрәк. Тәбиғи монополияларға реформа үткәреү ҙә - күптән күтәрелә килгән мәсьәлә. Артабан ваҡ кәсепселәр өсөн уңайлы шарттар тыуҙырыу фарыҙ, сөнки донъя иҡтисады шулай үҫешкән һәм алға бара. Һайлау алды программаларында был проблемалар әүҙем күтәрелә икән, тимәк, һуңғы һигеҙ йылда был йүнәлештәрҙә үҙгәрештәр самалы булған.

Рәсәй парламентына дәғүә итеүселәр иҡтисадты үҫтереү буйынса ниҙәр вәғәҙә итә? Власть фирҡәһе, мәҫәлән, эре проекттар өҫтөндә эшләйәсәге хаҡында байтаҡтан бирле белдереп килә. Йәнәһе, аныҡ эш. Тик был хөкүмәт эшмәкәрлеген ҡабатлау түгелме? Урал төбәгендә сеймал сығанаҡтарын үҙләштереү буйынса проект ғәмәлгә ашырыла ҡалһа, ти улар, был тирәне генә түгел, тотош илде сифатлы сеймал менән тәьмин итеп буласаҡ. "Берҙәм Рәсәй" шулай уҡ транспорт мәсьәләһен хәл итеү буйынса ла махсус проектты ысынбарлыҡҡа әүерелдермәксе. Тимәк, илдең теләһә ҡайһы мөйөшөнә тотҡарлыҡһыҙ барып етергә мөмкин буласаҡ. Бирһен Хоҙай!

Агросәнәғәтте үҫтереү ҙә - сәйәси фирҡәнең өҫтөнлөклө йүнәлештәренең береһе. Рәсәй крәҫтиәне күберәк һәм сифатлы ауыл хужалығы продукцияһы етештерһен өсөн дәүләт барлыҡ сараларҙы күрәсәк, сөнки шунһыҙ илдең аҙыҡ-түлек именлегенә өлгәшеү мөмкин түгел. Хаҡ фекер бит! Был ауылдарға юлдар төҙөү, газ индереүҙе тамамлау, элемтә, һаулыҡ һаҡлау селтәрен үҫтереү кеүек эштәр атҡарыласағын аңлата. Фирҡә шулай уҡ крәҫтиән хеҙмәтенең лайыҡлы түләүгә хоҡуғын да яңғай хәл итмәксе. Бер аҙ сабыр итергә тура килер, ә әлегә Рәсәй сит илдәрҙән 35 миллиард долларлыҡ аҙыҡ-түлек индерергә мәжбүр.

Лайыҡлы хеҙмәт, лайыҡлы эш хаҡы һәм лайыҡлы тормош вәғәҙә иткән сәйәси көстәрҙең хәҙерге социаль-иҡтисади хәлгә баһаһы урыны менән ҡырҡыулашып китә. Ил мөлкәтенең 90 процентынан граждандарҙың 10 проценты ғына файҙа күрә, тиелә **"Рәсәй патриоттары"** программаһында. Беҙ законһыҙ хосусилаштырылған предприятиелар законлы хужаһы - халыҡҡа ҡайтарып биреүҙе хәстәрләйәсәкбеҙ. Иҡтисади көрсөктән сығыу өсөн оҙайлы, мәҫәлән, 2050 йылға тиклем социаль-иҡтисади үҫеш өлгөһөн эшләү мотлаҡ. Әйтерең бармы: партия пландары - халыҡ пландары. Таныш һүҙҙәр.

Сәйәси фирҡә фекеренсә, алдағы йылдарҙа уҡ рәсәйлеләрҙең тормошо Төньяҡ Европа илдәренекенән ҡалышмаһын өсөн илдә барлыҡ мөмкинлектәр ҙә бар. Мәҫәлән, мөлкәт мәсьәләләрен ғәҙел хәл итеү, хеҙмәткә донъя стандарттары кимәлендә түләү, прогрессив һалым индереү иҫәбенә граждандарҙың килемен яҡын арала ике тапҡырға арттырырға мөмкин. Әйткәндәй, ошондай уҡ фекерҙе Дөйөм Рәсәй халыҡ фронтына программа әҙерләү менән мәшғүл Н. Федоров (Сыуашстандың элекке президенты) та ысҡындырғайны. Ҡуйылған маҡсаттарға өлгәшеүҙә РФ Хеҙмәт кодексына етди төҙәтмәләр индереү иҫәбенә эш шарттарын яҡшыртыу, хеҙмәткә лайыҡлы түләү өсөн профсоюздарҙың, ялланма эшселәрҙең хоҡуҡтарын киңәйтеү зарур. "Рәсәй патриоттары" ирекле баҙарҙы дәүләт көйләүен индереү проблемаһын да ҡыйыу күтәрә. Дәүләт иҡтисадҡа инвестициялар йүнәлтеү менән дә шөғөлләнергә бурыслы, тиелә фирҡә программаһында. Мәҫәлән, фәнни нигеҙҙә эшләнгән юғары технологиялы предприятиеларҙы ойоштороу тик уның көсөнән генә килә. Һуңғы йылдарҙа ныҡлы таралыу кисергән ауыл хужалығына, эшҡыуарлыҡҡа туранан-тура ярҙам итеүҙе лә дәүләт иненә һалырға кәрәк.

**"Ғәҙел Рәсәй"** сәйәси фирҡәһе хеҙмәт әйләнереңн хоҡуҡтарын яҡлау буйынса Советтар өлгөһөнә әйләреп, хеҙмәт законларын, хеҙмәтте һаҡлауҙы боҙған етәкселәрҙе ҡаты административ яуаплылыҡҡа тарттырырға саҡыра. Шул уҡ ваҡытта "ҒР" хеҙмәтсәндәргә забастовкаларға хоҡуҡ биреү, профсоюздарға предприятиеларҙың финанс-иҡтисади хәле менән ҡыҙыҡһыныу хоҡуғы биреүҙе лә хәстәрләй.

Иҡтисади курстың **КПРФ** тәҡдим иткән иң яңыһы - сәнәғәттең төп тармаҡтарын дәүләт ҡулына алыу, йәғни национализациялау. Ул финанс ресурстарын башлыса дәүләт ҡулында туплап, уларҙы иҡтисадты яңыртыу, социаль мәсьәләләрҙе хәл итеү һәм илдең именлеген тәьмин итеүгә йүнәлтеүҙе аңлата. Тәү сиратта дәүләт ҡарамағына күсәсәк сеймал тармағынан тыш, был исемлеккә электр энергияһы етештереү, металл иретеү, машиналар эшләү һ.б. ингән. Ләкин Ярославль ҡалаһында үткән Сәйәси форумда РФ Президенты был проблемаға үҙенсә асыҡлыҡ индерҙе. Беҙ байҙарҙы бөтөрөүҙең нимәгә килтереүен күрҙек инде, тине ул. Ҡайһы бер сәйәсмәндәр популистик лозунгылар күтәреүгә ҡарамаҫтан, элеккегә ҡайтыу (тимәк, национализация) булмаясаҡ.

Ауыл хужалығында коллектив хужалыҡтарҙы тергеҙеүгә ярҙам итеү, эшкәртелмәй ятҡан ерҙәрҙе сәсеү әйләнешенә индереү, тармаҡты техника менән ҡайтанан ҡоралландырыу ҙа коммунистарҙың беренсе нәүбәттә ғәмәлгә ашырыласаҡ эштәр исемлегендә. КПРФ программаһына ярашлы, ауыл хужалығына финанс ярҙамын федераль ҡаҙнаның 10 - 15 процентына еткергәндә генә быға өлгәшеп буласаҡ. Кооперацияны үҫтереү продукцияны крәҫтиәндәр өсөн отошло шарттарҙа һатыуға мөмкинлек бирәсәк, тиелә "КПРФ сделает!" тигән документта.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Алдағы йылда иҡтисадта ниндәйҙер һынылыш көтөләме? 2012 йылға федераль ҡаҙна проектында тулайым эске продукттың 2,7 процентҡа артыуы күҙаллана. Килемдәрҙең 11,8 триллион, сығымдарҙың 12,7 триллион һум булыуы көтөлә. 5 сентябрҙә Череповец ҡалаһында "Берҙәм Рәсәй" сәйәси фирҡәһенең йыйылышында сығыш яһап, В. Путин власть фирҡәһе әҙерләгән проекттарҙы ғәмәлгә ашырыу алдағы һигеҙ йылда 33 триллион һумға төшәсәк, тип белдерҙе. Иң ҡиммәт статья - 20 триллион һум - армияны яңыртыуға тотоноласаҡ. 8,3 триллион һум юлдар селтәрен яңыртыуға китәсәк.**

**Ошо көндәрҙә Дәүләт Думаһының ҡаҙнә ултырышында ҡаҙна сығымдарының нисек бүленәсәге асыҡланды. "Известия" гәзите хәбәр итеүенсә, именлек һәм хоҡуҡ һаҡлау органдарына сығымдар, проектҡа өҫтәп - 37,2, оборонаға 20 процентҡа арттырыласаҡ. Уның ҡарауы, торлаҡ-коммуналь хужалыҡҡа сығымдар - 57 (ҡалғаны - халыҡ кеҫәһенән, тип аңларға кәрәк), спорт һәм физкультураға 9,5, төбәктәргә 13,5 процентҡа кәметелә.**

Мәхмүт ХУЖИН.

# ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ошо көндәрҙә халҡыбыҙҙың арҙаҡлы шәхесе, Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһы академигы, иҡтисад фәндәре докторы, профессор, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, төбәк иҡтисад фәне өлкәһендә үҙ фәнни мәктәбен булдырған һәм әлләкүпме иҡтисад белгестәренә һәм фән эшмәкәрҙәренә остаз булған **Мазһар Насип улы ИҪӘНБАЕВ** 75 йәшлек оло юбилейын билдәләй.

Беҙ, уның уҡыусылары, Мазһар Насип улын ошо байрамы айҡанлы ихлас ҡотлап, уға оло рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ һәм ныҡлы сәләмәтлек, оҙон ғүмер, ғаиләһенә именлек теләйбеҙ.

**Иҡтисад фәндәре кандидаттары һәм докторҙары: А.У. Байгилдина, Х.Г. Байморатова, Х.Ш. Ғәбитов, У.Р. Мусин, Г.Г. Мөфтиев, С.М. Шакирова, В.Г. Хәйруллина, З.М. Юлдашбаева һәм башҡалар.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

22 сентябрь 19.00 сәғәттә "Алтын көҙҙең моңдары" исемле II башҡорт һәм татар эстрадаһы фестивале үтә. Һәр дәүерҙең үҙ йыры, үҙ моңо булған кеүек уҡ, үҙ тыңлаусыһы, үҙ тамашаһы ла була. Йылдар уҙған һайын улар тағы ла ҡәҙерләрәк, яҡынырак була бара. Был фестивалгә килгән тамашасы ла бында үҙенә яҡын булған, үҙе яратып тыңлаған йырсыһы менән осраша, тыңлай ала. Йәш башҡарыусылар араһында Айгөл Һағынбаева, Искәндәр Ғәзизов, Марсель Ҡотоев, Заһир Иҫәнсурин, Әлфиә Заһиҙуллина, Венера Рәхмәтуллина, Айгиз Ғиззәтуллин, Рөстәм Шаһыбалов, сәхнә оҫталары - Илһам Вәлиев, Флүрә Килдейәрова, Азат Айытҡолов, Иҙрис Ғәзиев, Әлфиә Юлсурина, Әлим Ҡәйүмов, Нәзифә Ҡадырова, Азамат Тимеров, Радик Вәлмөхәмәтов, Вәхит Хызыров, Гөлзәмиә Ситдиҡова, Илшат Ишморатов, Сәйҙә Ильясова, Лилиә Ишемйәрова үҙҙәренең моңло ла, дәртле лә йырҙары менән ҡыуандырһа, Рушан Биктимеров, Рөстәм Шәрипов, Азат Биксурин ҡурай моңдарына сорнаһа, "Далан", "Каруанһарай" фольклор-эстрада төркөмдәре үҙҙәренең таланттары менән йәш йөрәктәрҙе дер һелкетер, "Ҡыҙыҡ-Мәҙәк" көлдөрөп, күңелдәрҙе күтәрер.

ХОККЕЙ

# "ЛОКОМОТИВ" КУБОГЫ - "САЛАУАТ ЮЛАЕВ"ТА!

**7 сентябрҙә "Салауат Юлаев" һәм "Атлант" командалары уйыны менән башланырға тейеш Континенталь хоккей лигаһының 2011-2012 йылғы уйындары Ярославль фажиғәһенән һуң бер нисә көнгә күсерелгәйне. Йыл да КХЛ-дың беренсе матчында уйнатылып килгән Асылыу Кубогы (Кубок Открытия) быйыл "Локомотив" командаһы иҫтәлегенә, Локомотив Кубогы итеп үҙгәртелде.**

Уйындың тәүге минуттарында уҡ "Атлант" юлаевсылар ҡапҡаһына беренсе шайбаһын оҙатты, ә уйын осоро тамамланыуға иһә иҫәпте үҙ файҙаһына 0:3 еткерҙе. Артабанғы ике осорҙа иһә уйын дилбегәһе тик юлаевсылар ҡулында булды, ә Виталий Колесник урынына сыҡҡан Эрик Эрсбергтың ҡапҡаһы "Атлант"ҡа башҡаса "асылманы". Константин Барулин ҡапҡаһына тәүге шайбаны Петр Счастливый оҙатһа, артабан Юрий Трубачевтың шайбаһы иҫәпте 2:3 еткерҙе. Өсөнсө осорҙоң тәүге минуттарында уҡ майҙан хужалары иҫәпте тигеҙләне, ә осор бөтөүгә иһә уйын иҫәбе юлаевсылар файҙаһына 5:3 булды.

**Шулай итеп, быйылғы уйын миҙгеле "Салауат Юлаев" командаһы өсөн уңышлы башланды. Артабан да юлаевсылар көслө һәм мауыҡтырғыс уйын күрһәтер тип ышанайыҡ.**

Юныс ӘХМӘҘИЕВ.

✓ *Тыуған тыуғыҙ осраҡта ҡыҙ-ҡатындар үҙҙәрен ахмаҡтарса тота, әммә йөҙөнсө осраҡта ул ирҙәрҙән дә хәйләкәрерәк булып сыға.*

*(Агата Кристи).*



СМСНАМӘ - ШИҒРИ ӘЙТЕШ

# БЕҘ ЯҢЫЛЫШ ЮЛДАН КИТЕП,

## Аҙашҡанбыҙ түгелме?

**Гәзит уҡыусыларыбыҙ араһында шул тиклем сәсәндәр барлығын ошо конкурсты ойоштормаһаҡ, белмәй йөрөр инек әле. Шуға күрә лә тәүге һорауға яуаптар әле булһын килеүен дауам итә. Бәлки, ҡайһы бер авторҙарыбыҙҙың баш ҡалабыҙҙан алыҫта йәшәп, гәзиттең уларға һуңлап барып етеүе лә сәбәптер быға. Шиғри яуаптар һуңлап килһә лә, беҙ уларҙы иғтибарһыҙ ҡалдырмаҫбыҙ. Конкурсҡа яңынан-яңы авторҙар ҡушыла. Был юлы улар өсәүгә артты. Улар: АРЫҪЛАН, АҒИНӘЙ һәм СУЛПАН. Шиғри әйтеште был юлы тәүге һорауға яуап биреүҙән башлап, шунан сираттағы һорауға күсәбеҙ.**



**АРЫҪЛАН:**
Нинә арта фәҡирлек?
Сүлмәгенә күрә ҡапҡасы,
Һорауына күрә яуабы:
Халҡыма ят сәйәсәтте
Һеңдерә гәзит биттәре...
Байлыҡмы ул, фәҡирлекме?
Һәр кем үҙе баһалай.
Ҡара икмәк оло байлыҡ -
Уйланғанға...
Һары алтын фәҡирлек ул -
Һайланғанға...

**АҒИНӘЙ:**
Үтә байҙар байый торһон,
Берен-бере һанай торһон.
Тормош фәҡир булһа-булһын,
Аҡыл фәҡир булмаһын.

**КӨФӨ:**
**Аҡыҡ әйтте: "Ғәҙеллектә**
**Йәшәгәндәр фәҡир", тип.**
**Саян әйтә: "Фәҡирлектә**
**Йәшәүселәр бахыр", тип.**
**Улай булғас, әйтегеҙ һуң:**
**Бахырлыҡмы - фәҡирлек?**
**Фәҡирлекме - бахырлыҡ?**

**БУЛАТ:**
Фәҡирлектә йәшәп кенә,
Ғәҙел булып булмайҙыр.
Бахыр, фәҡир - бер тамырҙан,
Бер йәбешһә, ҡалмайҙыр.
Бахырлыҡтыр - фәҡирлек,
Фәҡирлектер - бахырлыҡ.
Ошоларҙы яҡынлатмау
Үҙе ҙур бер батырлыҡ.

**САЯН:**
Фәҡирлектә йәшәүселәр,
Бахыр булмай, батырмы?
Ғәҙеллектә йәшәгәндәр
Берәй ваҡыт байырмы?
Еребеҙҙә йәшәһәк тә,
Күрәбеҙ бит бер нужа.
Барлыҡ байлыҡтарыбыҙға
Башҡалар булды хужа.

**ЭТКОЛ:**
Ауыҙымды асһам да бит,
Үпкәм күренмәй.
Минең өсөн һаулыҡ -байлыҡ.
Юҡлыҡ беленмәй.
Шөкөр итеп йәшәүҙәрем -
Батырлыҡ бит ул.
Аҡса ҡоло булып йәшәү -
Бахырлыҡ бит ул.

**СУЛПАН:**
Әгәр уйлап ҡараһаң,
Һәр кеше үҙ донъяһын,
Тормошон үҙе ҡора:
Кемдер тормоштан уңа,
Кемдер бәхетһеҙ, туңа.
Маңлайыма яҙылған, тип
Көтөп ултырып булмай.
Тырышып эшлә, дуҫҡайым,
Фәҡирлеккә юл ҡуймай.

**ЭТКОЛ:**
Олигархты бай тибеҙ,
Ҡайҙан килә килеме?
Беҙ ваучерҙы колготкаға
Алыштырҙыҡ түгелме?

**АҠЫҠ:**
Донъя йөмен күрә белеп,
Өмөт утын һүндермәй,
Йәшәйексе был донъяла
Юҡҡа-барға көйөнмәй.
Эй, кешеләр, шаярмайыҡ,
Алдашмайыҡ, ялышмайыҡ,
Фәҡирлеккә юл ҡуймайыҡ,
Бахырлыҡҡа ҡул һуҙмайыҡ,
Күптәребеҙ был донъяның
Ҡәҙерҙәрен белмәй бит.
Белә ҡалһа, бахырлыҡҡа,
Фәҡирлеккә юл ҡуймаҫ,
Юҡ-барҙарға сер бирмәҫ...

**КӨФӨ:**
**Һүҙегеҙҙе тыңланым,**
**Бүлергә лә ҡыйманым.**
**Ҡабат-ҡабат уйланым,**
**Артабан шул һорауым:**
**Иманлылар йөҙө бойоҡ,**
**Иманһыҙға күңелле...**
**Был ерҙәрҙән ҡасҡы килә,**
**Әллә ҡайҙа йүгерге...**
**Беҙ яңылыш юлдан китеп,**
**Аҙашҡанбыҙ түгелме?**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**СМС аша шиғри әйтеш дауам итә. Алдағы һанда ЭТКОЛ сәсәндең башҡаларға биргән һорауын тәҡдим итербеҙ. СМС өсөн беҙҙең телефон: 8-917-477-09-74.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# ХИТРЫС ТА ҺУҢ,

## йәғни аңһат юл эҙләүсе

**Һоҫолоп йөрөү** - итәк-еңен дә йыя алмаусы, әрпеш
**Ҡыйсыйы** - ығы-зығы, үҙ-ара ҡанғырыу
**Үкел әсәй, апай** - әхирәтлек әсәй, апай һаҡ
**Тайпан** - ҡыйыш-мыйыш атлап килә
**Былтыш** - етлекмәгән, ҡойолоп төшөп бара
**Былтандаҡ** - тик тора алмай, төрлә сүрәткә инә
**Сәлтер** - беҙҙең "найыҫҡан" урамында балтырҙы шулай тиҙәр
**Түгләп-яҫтар** - ҡаралты, түшәк-яҫтыҡтар
**Ихахай ҙа суктыҡай** - донъяһында эше юҡ, уйын-көлкөгә әүәҫ
**Ҡыйкыйламта** - кәрәкмәгән кешеләр
**Сыныйр-сәнһеҙ** - унда-бында бәрелә, маҡсатһыҙ
**Тыуар-ҡара** - әсәйем мал-тыуарҙы шулай тине
**Ярҡа** - оҙон, йыуан ағасты уртаға ярып алынған ағас (брус тиҙәр хәҙер)
**Һырпалана** - эргәлә өйөрөлә, сөйөрөлә
**Юхасой** - үсеккән баланы нимә менәндер көйләү
**Бәлнөй баш** - ни һөйләрен белмәй, башы эшләмәй
**Ҡатынша** - гел ҡатындар һүҙен һөйләп, ҡатын-ҡыҙ эшен эшләгән ир
**Баҡырса** - ҙур түнәрәк еҙ тас, элек байҙарҙа ғына булған, мәйетте лә шунда йыуғандар
**Дрансалай шитайып** - оҙон аяҡтарын ялтыратып йөрөй
**Бөксәндәү** - бер туҡтамай эшләй, эше ырамай
**Ерҙәй** - оҙон, нәҙек, ябыҡ кеше

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АЙҺЫҘ ТӨНДӘ...

## ҡыҙ күҙләмәйҙәр

Тыуған тыуғыҙ осраҡта ҡыҙ-ҡатындар үҙҙәрен ахмаҡтарса тота, әммә йөҙөнсө осраҡта ул ирҙәрҙән дә хәйләкәрерәк булып сыға.

**(Агата Кристи).**

Хәҡиҡәт - тормошта икмәк кеүек үк кәрәкле продукт.

**(Карл Берне).**

Илай белмәгән йәш кеше - ҡырағай, йылмая белмәгән өлкән кеше - бахыр.

**(Сантаяна).**

Айһыҙ төндә ҡыҙ күҙләмәйҙәр, болғансыҡ һыуҙа балыҡ эҙләмәйҙәр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кешенең тәүге бурысы - ҡурҡыуҙы еңеү. Кешенең теҙ быуындары ҡалтырағанда уның һәр эше ҡолдарса килеп сыға-саҡ.

**(Томас Карлейль).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше Уҡытыусы эргәһенә килә һәм шулай тип зарлана:**
**-Мин бөткән кеше. Минең тормошом ҡайғыларҙан һәм ярлылыҡтан ғына тора. Эшләгән эштәрем миңә шатлыҡ та, байлыҡ та килтермәй. Мин уңышһыҙ кеше. Атай-әсәйем миңә белем бирмәне, ярҙам да итмәне, шуға ла мин наҙан һәм ахмаҡмын, шуға ла мин бер-бер артлы хаталар эшләйем...**
**Уҡытыусы был кешенең үҙ-үҙен әрләгәнен тыңлап ултыра ла, шулай ти:**
**- Эйе, ысынлап та һин өмөтһеҙ кеше...**
**- Ни өсөн? - тип аптырай кеше. Ул Уҡытыусынан йәлләү һәм уны йыуатыу һүҙҙәре ишетермен тип уйлаған була.**
**- Сөнки кеше үҙен ниндәй тип иҫәпләһә, ысынлап та шундайға әйләнә, - тип яуаплай Уҡытыусы. - Мин һине өмөтһеҙһөң тинем, һәм был - хаҡиҡәт.**
**- Миңә ни эшләргә һуң? - тип әрнеп һорай кеше.**
**- Бөтөн ғүмерең буйы һин үҙеңде көсһөҙ һәм бер нигә лә эшкинмәгән тип иҫәпләнең. Хәҙер инде һин быны киреһен эшлә. Быға тиклем үҙеңде эшкинмәгәнмен тип ныҡыһаң, хәҙер инде, мин шәпмен, эшкингәнмен, тип үҙ-үҙеңде ышандыр. Шунан һуң был ике фекерҙе лә ситкә ташла. Сөнки һин эшкинмәгән дә түгел, шул уҡ ваҡытта бөйөклөккә лә дәғүә итә алмайһың. Һин ҡайһы саҡта дөрөҫ эшләй, ҡайһы саҡта яңылыша торған ҡәҙимге кеше. Хәҙер һин ялы кешегә оҡшаш. Көсһөҙлөк әнәһе һине ауыртыныуға дусар итә, ул ауыртыныуҙы көслөлөк әнәһе менән баҫырға тырыш. Ул саҡта балаға оҡшап ҡаласаҡһың: балалар бит булдыра алам, юҡмы икәнлеккә ҡарап тормай, бар донъяны үҙенеке итә лә ҡуя..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттен Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 16 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**
Тиражы - 5203
Заказ 3672